ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кiске Өфө

5-11 сентябрь (һарысай) 2025

№35 (1179)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Радий Хәбиров - сәфәрҙә**



2

**Себерҙә йөрөп...**

ғаиләләрен тарҡаталар



6

**Еңеүен дә, еңелеүен дә...**

һабаҡ булып ҡына ҡабул ителә



8-9

**Ҡасан телевизор ҡарай башланыҡ?**



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!* ***Баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл етте: 2026 йылдың 1-се яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы башлана. ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә ярты йылға яҙылыу хаҡы - 1054 һум 50 тин. Күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле "Киске Өфө" гә яҙылырға ашығығыҙ - үкенмәҫһегеҙ.***

***Мөхәрририәт.***

ӨФӨ ҠУНАҠТАРЫ



# ЗАМАНСА ҠАЛАЛА ЙӘШӘЙҺЕГЕҘ

**Армия мәҙәниәте көндәре сиктәрендә Өфөгә Рәсәй художество академияһы директоры, билдәле скульптор Зураб Церетелиҙың ейәне Василий Церетели килде. Ул республикаға икенсе тапҡыр килеүен, бында үткәрелгән сараларҙың масштабына хайран ҡалыуын белдерҙе.**

Ҡунаҡ Өфөнөң архитектура һәм художество күҙлегенән юғары баһаланы, уны "заманса матур ҡала" тип атаны. Василий Церетели ҙур профессионаллек һәм зауыҡ менән биҙәлгән музейҙарҙы һәм иҫ киткес грандиоз һәйкәлдәрҙе билдәләне. Улар араһында генерал Шаймуратов һәйкәле айырым урын алып тора, тирә-яҡҡа йәм бирә, тип өҫтәне.

Василий Церетели, ил өсөн ауыр мәлдә сәнғәттең роле ҙур, тине. Уның һүҙҙәренсә, сәнғәт әҫәрҙәре, әҙәбиәт, скульптура һәм картиналар халыҡты һәм милләтте берләштерә. Сталиндың Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Рәсәй художество академияһын тергеҙеүе быны асыҡ дәлилләүсе һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Алғы һыҙыҡтағы рәссамдар, яугирҙар менән йәнәш, ваҡиғаларҙы мәңгеләштерә, эштәр ижад итә һәм яҙа. Ә һуңынан монументтар һәм кинофильмдар булдырыла, улар менән илебеҙ ғорурлана һәм ошо әҫәрҙәр йогонтоһо аҫтында тотош быуындар үҫә, тип белдерҙе. Шулай уҡ, академия етәксеһе фекеренсә, тап Армия мәҙәниәте көндәре һәм "Үлемһеҙ полк" кеүек саралар патриотик тәрбиәнең мөһим саралары булып тора.

"Бала сактан уҡ Ватанға, мәктәпкә, балалар баҡсаһына, ихатаға, ғаиләгә һөйөү тәрбиәләү зарур. Өлкәндәргә һәм тыуған илде яҡлаусыларға ихтирам тәрбиәләү зарур. Тыуған илгә һөйөү шулай тәрбиәләнә. Тарихи ваҡиғаларға, Бөйөк Ватан һуғышына, Махсус хәрби операцияға, шулай уҡ заман темаларына арналған ижади конкурстар ҙа бындай тәрбиәнең һөҙөмтәле ысулы", - тип иҫәпләй Церетели.

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# НИ ӨСӨН УНЫ УҠЫЙЫМ?

**Аҙна һайын "Киске Өфө" гәзитенең яңы һанын түҙемһеҙләнеп көтәм. "Киске Өфө" республикала донъя күреп килгән күп һанлы баҫмаларҙың береһе генә түгел минең өсөн, ул минен ышанысლы мәғлүмәти компасым, тыуған ҡаламдың, төбәктең һәм хатта ил, донъя кимәлендәге бөтә ваҡиғалар менән танышырға ярҙам иткән төп сығанағым.**

Был гәзиттә тәү сиратта мине нимә йәлеп итә һуң? Иң беренсе, яңылыҡтарҙы туған телемдә уҡырға мөмкинлек бирелә. Шулай уҡ гәзит биттәрендә мин көнүҙәк ваҡиғаларҙы ғына түгел, ә, ғөмүмән, донъяуи мәсьәләләрҙе яҡшыраҡ аңларға ярҙам иткән тәрән аналитик материалдарҙы ла табам.

Баҫманың күп яҡлылығын айырыуса билдәләп үткем килә. Бында барыһы ла бар: ҡала яңылыҡтарынан алып мәҙәни ваҡиғаларға тиклем, иҡтисади кҙәтеүҙәрҙән алып ябай кешеләрҙең тарихтарына тиклем, һәм башҡалар. Гәзит йәмғиәт тормошонда әүҙем ҡатнаша, мөһим социаль мәсьәләләрҙе лә күтәрә. Ғөмүмән, "Киске Өфө"лә һәр кем үҙенә ҡыҙыҡлы, күңеленә яҡкан, ауаздаш булған мәғлүмәт таба ала. Гәзит бөтә баш ҡала, республика ваҡиғалары менән "яңып" йәшәй. Көн үтһен, был һан сыҡһын, тигән буш ҡыуыҡлыҡ юҡ, ә бөтә яҙмалар ысын күңелдән ижад ителеп, уҡыусы күңеле аша үткәрелә. "Киске Өфө"нөң мәҙәни, тарихи йүнәлешкә бәйләнгән өлөшө традицияларыбыҙҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, йолаларҙы һәм туған телебеҙ менән бәйләнешле һаҡларға ярҙам итә. Иң мөһиме, баҫмалағы һәр бер һүҙгә, һәр һүҙҙең төплә тикшерелеп, һәр фекерҙең тәрән уйланылып яҙылыуына ышанам.

Бына шуға ла мин был баҫманың тоғро уҡыусыһы булып ҡалам. Гәзиткә артабан да беҙҙе ҡыҙыҡлы материалдар менән ҡыуандырып тороуын һәм яңы уҡыусылар теләйем. "Киске Өфө"бөҙ артабан да быуындар араһын бәйләүсе ныҡлы еп, тел һәм мәҙәниәт һаҡсыһы булып ҡалһын. Булғаның өсөн рәхмәт, "Киске Өфө"!

**Илсур ДӘҮЛӘТШИН.**
**Иглин районы.**




*Аҡһаҡалдар ҙа гәзит уҡый.*

12+

ҠЫҪҠАСА

## ОКТЯБРҘӘ...

**Республика Башлығы указы менән Башҡортостан Республикаһының Дәүләт суверенитеты тураһында декларацияһын иғлан итеүҙең 35 йыллығы байрамына әҙерлек буйынса ойоштороу комитеты булдырылды.** Уны Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһе вазифаһын башҡарыусы Искәндәр Әхмәтвәлиев етәкләне. Ойоштороу комитетына 2025 йылда Республика көнөнә әҙерлек һәм уны үткәреү буйынса саралар планын әҙерләү һәм раҫлау бурысы йөкмәтелде. Бынан тыш, муниципалитеттарға байрамға арналған тантаналы саралар үткәрергә, учреждениеларҙы, урамдарҙы, майҙандарҙы, йәмәғәт биналарын һәм торлаҡ йорттарҙы биҙәүҙе тәьмин итергә, мәҙәни һәм спорт сараларын үткәреүҙе ойоштороrға тәҡдим ителә.

✓ **Рәсәй Федерацияһының Закон сығарыусылар советы Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы индергән закон проектын ҡарай.** Ул наркотик таратыусылар өсөн енәйәт яуаплылығы йәшен 14 йәшкә тиклем кәметеүҙе күҙ уңында тота (әле 16 йәш). Рәсәй Енәйәт кодексының 20-се статьяһына тейешле үҙгәрештәр индерергә тәҡдим ителә, тип хәбәр итә республика парламентының матбуғат хеҙмәте. Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, яңы закон проекты үҫмерҙәрҙе наркотиктар әйләнеше менән бәйле енәйәттәргә йәлеп итеүгә ҡаршы тороуға йүнәлтелгән. Бөгөн үҫмерҙәрҙе йыш ҡына курьер итеп файҙаланалар. Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығы статистикаһына ярашлы, 2024 йылда наркотиктар әйләнеше өлкәһендә бәлиғ булмағандар ҡылған енәйәттәр һаны бик ныҡ артҡан.

✓ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары "Башҡортостан Республикаһында физик культура һәм спорт тураһында" Башҡортостан Республикаһы Законына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон проекты өҫтөндә эште дауам итергә йыйына.** Закон проекты инвалидтарға һәм һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән кешеләргә ярҙам күрһәтеү системаһын камиллаштыра. Республика парламенты спикеры Константин Толкачев һүҙҙәренсә, был граждандарҙың яҡланмаған категорияларын физик реабилитациялау һәм абилитациялау мөмкинлектәрен киңәйтә. "Закон ҡабул ителһә, улар дәүләт реабилитация үҙәктәрендә генә түгел, инвалидтар өсөн махсус физкультура-спорт клубтарында, дәүләткә ҡарамаған сектор ойошмаларында, шул иҫәптән шәхси реабилитация үҙәктәрендә һәм физкультура-спорт ойошмаларында профессиональ ярҙам алырға мөмкин. Был ярҙам дәүләт (муниципаль) социаль заказы нигеҙендә бюджет аҡсаһы иҫәбенә финанслана", - тип билдәләне Толкачев.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# РАДИЙ ХӘБИРОВ - СӘФӘРҘӘ



**Үткән аҙнала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Махсус хәрби операция барған биләмәләрҙә эш сәфәрендә булып ҡайтты.**

● Донбасҡа эш сәфәре барышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров яҡташтар - "Башҡортостан"полкы хәрбиҙәре менән осрашты. Төбәк етәксеһе хәрбиҙәрҙең йәшәү шарттары менән танышты, медицина пунктында булды. Шулай уҡ Башҡортостан Башлығы идара итеү пунктын, ашхананы, мобиль мунсаны, тренажер залын ҡарап сыҡты, хәрби техника һәм ҡорамалдар менән танышты. Республика Башлығы командование менән матди-техник яҡтан тәьмин итеү һәм хәрбиҙәрҙең ғаилә ағзаларына ярҙам күрһәтеү һорауҙары буйынса ла фекер алышты.

● Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Ҡыҙыл Байраҡ орденлы Кенигсберг ҡалаһының 12-се айырым гвардия инженер бригадаһы подразделениелары урынлашҡан урында булды һәм шәхси состав менән аралашты, хәрбиҙәрҙең йәшәү шарттары менән танышты, республиканың дәүләт наградаларын тапшырҙы.

● Радий Хәбиров шулай уҡ Әҙерләү үҙәге эшмәкәрлеге, "Үҙәк" ғәскәрҙәре группировкаһының пилотһыҙ инженер системаларын ҡулланыу һәм үҫтереү менән танышты. Уның белгестәре төрлө тәғәйенләнештәге пилотһыҙ осоу аппараттарын эшләү һәм модернизациялау менән шөғөлләнә, шулай уҡ хәрбиҙәр өсөн уҡыуҙар ойоштора. Бригаданың шәхси составы Башҡортостан етәкселегенә МХО-ла ҡатнашыусыларға ярҙамы, шул иҫәптән пилотһыҙ ҡоролмалар ебәреүҙәре өсөн рәхмәт белдерҙе.

● Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Донецк Халыҡ Республикаһы Башлығы Денис Пушилин менән "Саур-Могила" мемориал комплексындағы Мәңгелек утҡа сәскә һалды. ДХР Башлығы Башҡортостан яугирҙарының лайыҡлы хеҙмәт итеп, Махсус хәрби операция бурыстарын башҡарыуға ҙур өлөш индереүҙәрен билдәләне.

● Луганск Халыҡ Республикаһына эш сәфәре барышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Красный Луч ҡалаһының беҙҙең республика ярҙамы менән капиталь ремонт үткәрелгән 7-се мәктәбендә булды. Мәктәп 600 балаға иҫәпләнгән. Икенсе сиректән бында 300-гә яҡын бала, шул иҫәптән 17 беренсе класс уҡыусыһы уҡый башларға ниәтләй. Белем көнөн һәм түүгә сиректе уҡыусылар 4-се мәктәптә үткәрә, сөнки капиталь ремонттан һуң аҙыҡ-түлек блогында ҡорамалдар һәм мебель ҡуйырға кәрәк, улар яҡын арала Луганск Халыҡ Республикаһы Хакимиәте ярҙамында ҡабул ителәсәк.

● Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Луганск Халыҡ Республикаһында Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында Донбасты азат иткәндә һәләк булған яугирҙарҙың мемориаль комплексында һәм туғандар ҡәберлегендә булды. Улар араһында Рәсәй Геройы, генерал-майор Миңлегәле Шайморатов етәкселегендәге 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙары ла бар. Бында ерләнгән 20-нән ашыу яугирҙың исеме әле булһа билдәһеҙ. Өҫәүһенең генә исемен асыҡларға мөмкин була. Уларҙың береһе - Балтас районының Ҡомъяҙы ауылында тыуған Кәрим Зиятдинов, 1943 йылда разведка операцияһы ваҡытында һәләк була.

● ЛНР-ҙа республика Башлығы шулай уҡ Красный Луч ҡалаһы эргәһендәге Миус йылғаһындағы Хәрби Дан Музей комплексында булды. Мемориаль ансамбль 1965-1968 йылдарҙа ойоштоrола. Ул Бөйөк Ватан һуғышы ваҡиғаларына арналған - 1941-1942 йылдарҙа бында башлыса шахтерҙарҙан төҙөлгән уҡсылар дивизиялары ҡатнашлығында ҡаты алыштар бара. 2025 йылда музейҙа Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығы һәм учреждениеның 60 йыллығы хөрмәтенә саралар үткәрелә.

● Журналистар менән әңгәмәлә Башҡортостан Башлығы Донбасҡа эш сәфәренә йомғаҡ яһаны. "Был сәфәр хәрби хеҙмәткәрҙәргә ярҙам күрһәтеүҙең һөҙөмтәлелеген баһалау өсөн кәрәк ине, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Бөгөн Ватанды һаҡлаған барлыҡ егеттәр менән ғорурланабыҙ, әммә айырым ғорурлыҡ - беҙҙең "Башҡортостан" полкы. Был яйға һалынған хәрби берәмек, уның тураһында командование бик юғары баһа бирә. Шуға күрә полк подразделениеларына барып, беҙҙең яугирҙарға ярҙам итеү тураһында һөйләшеп килештек".

***Әйткәндәй...***

***Күптәр Башҡортостан Башлығының МХО-ға эш сәфәренең әһәмиәтен баһалап, хәүеф-хәтәргә ҡарамаҫтан, республика яугирҙарына ярҙам итеү өсөн тағы ла МХО яғына юлланыуы айҡанлы һоҡланыу белдерә. Был хаҡта РФ Йәмәғәт палатаһы ағзаһы, МХО ҡатнашыусыһы, украин неонацистарының енәйәттәр буйынса халыҡ-ара йәмәғәт трибунаһы рәйесе Максим Григорьев бына ниндәй фекерҙә:*** "Радий Хәбировты мин күптән, 10 йылдан ашыу беләм, һәм ул һәр ваҡыт бик мөһим, хатта хәүефле мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә, мәҫәлән, Ҡырымды Рәсәй составына ҡайтарыу операцияһында ҡатнашҡан кеше. Һис шикһеҙ, ҡыйыу кеше. Ул хәрби бәйләнеш һыҙығынан 10-15 км алыҫлыҡта эшләй. Ә был бик хәүефле ара. "Хаймарс" һәм башҡа ҡоролмаларҙың һөжүме тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Ғөмүмән, һәр сәйәсмәндең был яҡҡа килеүе дошмандың ҡыҙыҡһыныуын тыуҙыра. Уларҙы эҙләргә, оҙатырға, һунынан хәрби еңелеүгә дусар итергә тырышалар. Был билдәле факт. Һис шикһеҙ, хәүеф ҙур, һәм һәр сәйәсмән сәйәхәттең маҡсатҡа ярашлылығын үҙе хәл итә. Икенсе яҡтан, төбәк хәрбиҙәре үҙҙәренә етәксе килеүен ҙур ярҙам тип ҡабул итә. Төбәк халҡы өсөн был мөһим, шул иҫәптән контрактҡа ҡул ҡуйыусылар өсөн дә. Был үҙенекеләргә ярҙам итеү өсөн аңлы хәүеф", - тип аңлатма бирҙе Максим Григорьев.

**Алһыу ӘҺЛИУЛЛИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировҡа Рәсәй Художество академияһының почетлы ағзаһы исеме бирелде. Таныҡлыҡты Рәсәй Художество академияһы президенты Василий Церетели республиканың Мәҙәниәт һәм сәнғәтте үҫтереү буйынса советы ултырышында тапшырҙы. Ул төбәк етәкселегенә хеҙмәттәшлек, мәҙәни тормошҡа иғтибар һәм уның дөйөм дәүләт проецтарына интеграцияһы өсөн рәхмәт белдерҙе, Башҡортостандың талантттарға бай булыуын билдәләне. Василий Церетели шулай уҡ Рәсәй Геройы Миңлегәле Шайморатовҡа һәйкәл төҙөгән өсөн скульптор Салауат Щербаковҡа һәм архитектор Константин Донгузовҡа академияның алтын миҙалын тапшырҙы.

✓Башҡортостан Башлығы кадрҙар тәғәйенләү тураһында белдерҙе. Конкурс процедураларынан һуң Башҡортостанда Көйөргәҙе һәм Әбйәлил райондары хакимиәт башлыҡтары эш башланы. Көйөргәҙе районына Лира Тереғолова башлыҡ итеп тәғәйенләнде. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Лира Рафаил ҡыҙы - республика муниципалитетында етенсе ҡатын-ҡыҙ етәксе. Республика Башлығы Әбйәлил районының яңы етәксеһе Әминев Айрат Зиннәт улын да ҡотланы.

✓Башҡортостан Башлығы указы менән республика хәрби комиссариаты буйынса Үҙәк хәрби округы берләшкән стратегик командованиеһының инспекторҙар төркөмә инспекторы генерал-майор Владимир Трофимовты "Хеҙмәт батырлығы өсөн" миҙалы менән бүләкләне. Награданы генералға республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Радий Хәбиров тапшырҙы. Владимир Трофимов үҙе 12 йыл етәкселек иткән һәм республика етәкселеге ярҙамы менән ҡуйылған бурыстарҙы уңышлы үтәгән тотош коллективтың наградаға лайыҡлы булыуын билдәләне.

✓Башҡортостан делегацияһы "Иннопром. Беларусь" күргәҙмәһендә ҡатнашты. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Белоруссия премьер-министры урынбаҫары Виктор Каранкевич менән осрашты. Улар партнерлыҡ мөнәсәбәттәрен артабан үҫтереү тураһында фекер алышты. Дуҫтарса мөнәсәбәттәге республикалар сәнәғәт, ауыл хужалығы, фән, мәҙәниәт, туризм һәм башҡа өлкәләрҙә хеҙмәттәшлеге дауам итә. Быйыл көҙ Башҡортостан делегацияһының "Иннопром. Беларусь" халыҡ-ара күргәҙмәһендә ҡатнашыуы көтөлә.

✓Башҡортостандың һигеҙ урта махсус мәҙәниәт һәм сәнғәт уҡыу йортона 477 беренсе курс студенты ҡабул ителгән. Был хаҡта республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова хәбәр итте. Ижади урта махсус уҡыу йорттары Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат, Октябрьский, Сибай, Учалы ҡалаларында эшләй.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ИҒТИБАР ҮҘӘГЕНДӘ - МӘҘӘНИӘТ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Мәҙәниәтте һәм сәнғәтте үҫтереү мәсьәләләре буйынса советтың сираттағы ултырышын үткәрҙе. Сарала сенаторҙар, Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары, профилле министрлыҡ һәм ведомство етәкселәре, мәҙәниәт учреждениелары вәкилдәре, сәнғәт эшмәкәрҙәре, шулай уҡ "Армия мәҙәниәте көндәре" проектын ойоштороусылар ҡатнашты.**

- Беҙҙең республикала патриотик йүнәлештәге мәҙәни мираҫты һаҡлау буйынса эш киң йәйелдерелгән, - тип билдәләне Радий Фәрит улы. - Төп бурыстарҙың береһе - мәҙәниәт учреждениеларын базаһында МХО-нан ҡайтасаҡ яугирҙарға социаль-мәҙәни реабилитация системаһын булдырыу.

Радий Хәбиров шулай уҡ креатив индустрия, шул иҫәптән кинематографияны үҫтереү буйынса ҙур эштәр башҡарылыуы тураһында һөйләне. "Был йүнәлеште системалы рәүештә үҫтерә башланыҡ. Креатив индустрия буйынса совет булдырҙыҡ, ярҙам саралары ойошторолдо. Киләһе йылда Өфөлә Халыҡ-ара һөнәрселәр йәрминкәһен уҙғарасаҡбыҙ. Шулай уҡ 2026 йылда бөйөк рус яҙыусыһы Сергей Аксаковтың 235 йыллыҡ юбилейы үтәсәк", - тине төбәк етәксеһе.

Башҡортостан Башлығы милли мәҙәниәтте үҫтереү мәсьәләләренә туҡталып, "Урал батыр" эпосы, Ҡурай көндәре булдырылыуы, Ҡурайсыларҙың дәүләт ансамбле ойошторолоуы тураһында һөйләне. Ултырыш ҡатнашыусылары Рәсәй мәҙәниәт министры Ольга Любимованың сәләмләү хатын тыңланы. Унда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировҡа төбәктең мәҙәниәт өлкәһен үҫтереүгә булышлыҡ итеүе өсөн рәхмәт белдерелә. Шулай уҡ "Ғаилә" милли проекты, "Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре", "Пушкин картаһы" федераль программалары республикала уңышлы тормошҡа ашырылыуы һыҙыҡ өҫтөнә алына.

# ЙӘРМИНКӘ ЛӘ БУЛА

**Баймаҡта үткән "Башҡорт аты" фестивалендә ауыл хужалығы тауарҙары етештереүселәрҙең күргәҙмә-йәрминкәһендә Күмертау, Белорет, Салауат, Стәрлетамаҡ ҡалаларынан, шулай уҡ Баймаҡ, Мәләүез, Белорет, Учалы һәм Кушнаренко райондарынан "Башҡортостан продукты" проектында 11 еңеүсе үҙҙәренең тауарын тәҡдим итә.**

- Фестивалдә "Башҡортостан продукты" проекты еңеүселәребеҙ республикала етештерелгән продукцияның төрлөлөгөн күрһәтә аласаҡ. Был урындағы тауар етештереүселәргә ярҙам ғына түгел, ә фестиваль ҡунаҡтарына төбәгебеҙҙең үҙенсәлекле зауыҡтары менән танышыу мөмкинлеге лә, - тип билдәләне Башҡортостандың ауыл хужалығы һәм аҙыҡ-түлек министрлығының Тауар етештереүселәр һәм хеҙмәттәр министры вазифаһын башҡарыусы Василий Таболин.

Шулай итеп, фестивалгә килеүселәр төрлө продукция ассортиментын ҡарай аласаҡ: йылҡы итенән эшләнгән деликатестарҙы, һөт һәм әсетелгән һөт, икмәк-булка һәм сыр ризыҡтарын, бал, сәй, ҡайнатмалар, пихта һыуы һәм сувенирҙар. Гастрономия зонаһын шулай уҡ Өфө, Белорет, Благовещен, Сибай, Хәйбулла һәм Баймаҡ райондарының дөйөм туҡланыу учреждениелары күрһәтәсәк. Фестиваль ҡунаҡтары урындағы продукцияны ҡулланып әҙерләнгән аутентик башҡорт ризыҡтарын ғына түгел, ә Корея һәм Кавказ кухняһы ризыҡтарын да баһалай аласаҡ.

# ҠАНУНИӘТТЕ ҮҪТЕРЕРГӘ

**Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе Лилиә Ғүмәрова Мәҙәниәт буйынса совет ултырышында мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһендә ҡануниәтте камиллаштырыу тураһында һөйләне.**



- Ил Президенты ҡушыуы буйынса "Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре" программаһына старт бирелде. Быйыл проектта ҡатнашыуға 1100 белгес йәләп итергә планлаштыралар. Тап Башҡортостан федераль кимәлдә үҙенең тәжрибәһен уңышлы күрһәтеп, ошо башланғысты тормошҡа ашырыу өлгөһө булды.

Лилиә Ғүмәрова йәнә бер мөһим йүнәлешкә - мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлауға иғтибар йүнәлтелеүен билдәләне. "Рәсәй Президенты мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау буйынса йөкләмәләр бирҙе, 2030 йылға тиклем 1000-дән кәм булмаған тарих һәм мәҙәниәт ҡомартҡыларын реставрациялау һәм уларға икенсе һулыш биреүҙе тәҡдим итте. Бөгөнгө көнгә реестрҙа 156 меңдән ашыу мәҙәни мираҫ объекты теркәлгән. Уларҙың һәр береһендә халҡыбыҙҙың йәне, уның тарихы, мәҙәни коды йәшәй. 2022 йылдан башлап беҙ 15-тән ашыу закон акттарын ҡабул итеүгә әҙерләнек, улар менән уникаль тарих һәм мәҙәниәт ҡомартҡыларын һаҡлау һөҙөмтәле саралар булдырыла, артыҡ талаптар бөтөрөлә һәм уларҙы артабан хужалыҡ әйләнешенә йәлеп итеү өсөн мөмкинлектәр асыла. Федерация Советында төбәктәрҙең фекерен иҫәпкә алып, мәҙәни мираҫ объекттары дөйөм милли ревизиялау кәрәклегенә, уның һөҙөмтәләре буйынса һәр объект буйынса шәхси "юл картаһы" төҙөүгә, уны тергеҙеүгә иғтибар бирәбеҙ", - тине сенатор.

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# ЙОҠЛАЙҘАРМЫ ӘЛЛӘ?

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

***Сәйфулла ӘМИРОВ, Мәләүез районы:*** Мин ошо һорауҙа ҡуйылған "еңел булмаған осор" һүҙбәйләнеше менән төптө килешмәйем. Әллә беҙҙең бала саҡ тура килгән Хрушев осоронда еңел инеме? Хәтеремдә, әсәйебеҙ, ун километрҙа ятҡан Мәләүез ҡалаһына йәйәүләп барып, бер түтәрәм икмәк өсөн көнө буйы сиратта торҙо, ә бит өйҙә береһенән-береһе бәләкәй алты бала көтә ине уны. Ә атайыбыҙ иртәнән төнгә тиклем баҫыуҙа эшләне. Өлкәндәр үҙҙәре лә һуғыш осоронда тормоштоң әсеһен-сөсөһөн татып, ас-яланғас үҫкән быуын ине бит. Брежнев заманында ике тиҫтәгә яҡын йыл әҙәмсәрәк йәшәп ҡалдыҡ. 1985 йылда Горбачев "үҙгәртеп ҡороу" тип ауыҙын асҡанда ул һүҙ нимә аңлатҡанын үҙе лә белмәгәндер. Шулай башланды һәм бына ҡырҡ йыл инде нимәлер үҙгәртеп ҡоралар, бер-ике йылдан уны янынан үҙгәртәләр.

Унан һуң, ошондай "еңел булмаған осор"ҙа, ихата һайын ике-өс еңел машина, төпкөл ауылдарҙа ла интернет, бала һөйләшә лә белмәй, ҡулында планшет та смартфон? Һанай китһәң, беҙҙең атай-әсәйҙәрҙең төшөнә лә инмәгән осор килде.

Тик мине борсоғаны шул: ошо заманға зыялыларыбыҙ, әгәр уларҙы шулай тип атап булһа, ҡулайлаша алманы, юғалып ҡалды. Ҡайҙа бөгөн беҙҙең Рәшит Шәкүрҙәр, Марат Ҡолшәриповтар, Дамир Вәлиевтар, Рим Ниязғоловтар? Былан 35-37 йылдар элек халҡыбыҙҙы уята алырлыҡ көсө булған ошо зыялыларға алмаш ҡайҙа? Мостай Кәрим менән Динис Бүләковтар урынына кем килде? Йылына бер түгел, икешәр әҙипкә халыҡ шағиры, яҙыусыһы исеме бирелә, ә нимә өсөн? Мин үҫкәндә ни бары дүрт халыҡ шағиры бар ине, уларҙың исемдәрен генә түгел, яҙған әҫәрҙәрен дә яттан тиерлек белә инек. Ә хәҙергеләрҙең ниндәй әҫәре телегеҙҙә лә, ҡайһыһы хәтерегеҙҙә?

Мин йыш ҡына тормошта барған ваҡиғаларға аңлатманы Мостай Кәримдең иҫтәлектәренән эҙләйем һәм... яҙмаларҙағы юлдар араһына һалынған мәғәнәнән табам. Икенсе ярҙамсым ул, һис шикһеҙ, Әнғәм Атнабаев. Бына үрҙә телгә алынған әҙиптәр хаҡында уның "Шағирҙар" исемле шиғырында әйтелгәндән дә төплөрәк әйтеп буламы икән?

Замана тыуҙыра шағирҙы,
Шағирҙар күтәрә заманды.
Күтәрә халҡының күңелендә
Бикләнеп йоҡлаған аңдарҙы.
Халҡына атылған уҡтарҙы
Йөрәге арҡыры үткәрә.
Шағирҙар - халыҡтың намыҫы,
Халыҡтың сәйәси һалдаты.

Был шиғырҙаң бер һүҙен алып та, бер һүҙ өҫтәп тә булмай. Зыялылар иҫәбенә мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәрен дә индереп булыр ине. Тик уларҙың да сығышы, бая әйтмешләй, кемдең йөрәген ҡуҙғыта ла, кемдең хәтерендә ҡала! Беҙ, милләттең ябай бер кешеләре, матбуғат биттәрендә үҙ фекерҙәребеҙ менән уртаҡлашабыҙ ҙа ул, тик зыялыларыбыҙ ҡулдарына башҡортса гәзит-журнал тотоп уҡыу түгел, уларҙың барлыған беләме икән һуң? Ғөмүмән, зыялыларыбыҙ, кемдер әйтмешләй, бөгөн бик тәрән йоҡола, уларҙың осоро етмәгән, тип тә уйланыла әле...

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✔Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы Рәсәйҙең Рәссамдар союзы һәм Рәсәй Рәссамдарының ижади союзы ағзаһы Юрий Сивачёв Башҡортостандың Милли музейына яҡташ яугирҙарҙың портреттарын бүләк итте. Дүрт картинала хеҙмәттәштәре, Сибай концерт-театр берекмәһе артистары Әлфир Заманов, ағалы-ҡустылы Фларид һәм Фидан Бирғәлиндар һәм "Сулпан" театры артисы Илнур Сәфәров һүрәтләнгән.

✔Башҡортостанда Халыҡ художество кәсептәре һәм һөнәрҙәре халыҡ-ара фестивале була. Башҡортостан Башлығының тейешле указы рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. Документка ярашлы, фестивалде 2026 йылдың май-июнендә Өфөлә ойоштороу, артабан йыл һайын уҙғарыу ҡүҙаллана. Сараға әҙерлек өсөн Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев етәкселегендә ойоштороу комитеты булдырыла. Ойоштороу комитеты саралар планын әҙерләргә һәм раҫларға тейеш.

✔Белем көнөндә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҡыусыларҙы, студенттарҙы, уларҙың ата-әсәләрен һәм уҡытыусыларҙы яңы уҡыу йылы башланыуы менән ҡотланы. "Ярты миллион уҡыусы өсөн яңы уҡыу йылы башланды. 45 меңгә яҡын бала тәүге тапҡыр парта артына ултырҙы. Беҙҙең маҡсат - балаларға мәктәптәрҙә, колледждарҙа, юғары уҡыу йорттарында яҡшы, конкурентлы белем биреү. Башҡортостандың идара итеү командаһы быныҡ өсөн күп эштәр башҡара. Бөгөнгө ауырлыҡтар уларҙың үҫешенә бер нисек тә ҡамасауламаһын өсөн. Улар бөгөнгө байрамдағы кеүек уҡ ихлас йылмайһын өсөн".

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Терроризмға ҡаршы төбәк комиссияһының һәм Оператив штабтың берлектәге ултырышын үткәрҙе. Белем көнөндә, шулай уҡ урындағы үҙидараның вәкиллеке органдарына һайлауҙарҙа тауыш биреү ваҡытында йәмәғәт хәүефһеҙлеген тәьмин итеү мәсьәләләре тикшерелде. Ултырышта ҡатнашыусылар саралар ойошторолған осорҙа ведомство-ара эш итеү тәртибен, шулай уҡ хоҡуҡ һаҡлау органдары, оператив һәм авария хеҙмәттәре эшенең төп йүнәлештәрен билдәләне.

✔ТАСС хәбәр итеүенсә, немец Compact сәйәси журналы Путин хөрмәтенә көмөш тәңкә сығарған. Сувенирҙың тасуирламаһында, Рәсәй Президенты көнбайыш мейнстримын еңеүсе, тиелә. Сувенир көмөштән эшләнгән. Тәңкәлә Рәсәй лидерының портреты һүрәтләнгән һәм "Патриот Владимир Путин" (Patriot Wladimir Putin) тип яҙылған. Тасуирламанан күренеүенсә, ул "тотороҡлолоҡто, батырлыкты һәм көнбайыш мейнстримын еңеүҙе" символлаштыра. Тәңкә сентябрь аҙағында һатыуға сыға.

ИҪКӘРТӘБЕҘ!



# УТТЫҢ ЯЛ-ҠОЙРОҒО ЮҠ

● Алдағы көндәрҙә республиканың көньяҡ-көнсығышында ғәҙәттән тыш янғын хәүефе көтөлә. Был хаҡта Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығынан иҫкәртәләр. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, йыл башынан алып төбәктә ҡоро үлән янған 325 осраҡ теркәлгән. "Әле урып-йыйыу кампанияһы бара. Иген баҫыуҙарында ут менән һаҡһыҙ эш итеү - ташланған тәмәке, ауыл хужалығы машиналарынан сыҡҡан ялҡын йәки асыҡ ут менән файҙаланыу - янғынға килтереүе ихтимал", - тип киҫәтәләр Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығынан.

● Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты мәғлүмәттәре буйынса, аҙна башында Хәйбулла районында ҡоро үлән янған. Урынға тиҙ арала ҡотҡарыусыларҙың килеп етеүе уттың таралып китеүенә юл ҡуймаған. 2025 йыл башынан алып республикала дөйөм майҙаны 29 гектарҙан ашыу - 14 урман янғыны һәм дөйөм майҙаны 1300 гектарҙан ашыу булған 325 үлән янъыуы теркәлгән.

● Янғын йорт-ҡоралаарҙы ла аямай. Шишмә районының Алкин-2 ауылында сыҡҡан ут фажиғәгә килтергән. Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы һәм БР Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты янғын һүндереүселәренән берләктәге тырышлығы менән дүрт бүлмәле йортто ялмап алған ут һүндерелә. Ҡыҙғаныcҡа ҡаршы, янғын урынын тикшереү барышында һәләк булған 62 йәшлек ҡатындың кәүҙәһе табыла.

● Ауырғазы районының Көйәҙебаш ауылында ишле ғаилә йәшәгән йортта янғын сыҡҡан. Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, ғаилә башлығы ут сығыуын күреп ҡалған һәм балаларын иҫкәртеп өлгөргән. Барыһы ла тышҡа йүгереп сыҡҡан, бәхеткә, бер кем дә зыян күрмәгән.

● Республикала янғын тураһында хәбәр итеүсе приборҙар (извещатели) 1,2 меңдән ашыу кешене ҡотҡарған. Башҡортостанда 2016 йылдан алып халыҡҡа 700 мең самаһы прибор таратылған. Улар ярҙамында 1242 кеше, шул иҫәптән 461 бала ҡотҡарылған. Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты белгестәре белдереүенсә, приборҙар - йорттарҙы һәм ғаиләләрҙе янғын хәүефенән һаҡларға ярҙам иткән мөһим ҡотҡарыусы ул.

Янғын тураһында ваҡытында иҫкәртеү ғүмерҙәрҙе ҡотҡара. Бынан тыш, күп кенә заманса приборҙар хәлдә асыҡлау һәм үҙ-үҙен әүҙемләштереү функцияларына эйә.

Уларҙы ҡуйыу буйынса кәңәштәр:
- өйөгөҙҙөң һәр ҡатына/бүлмәһенә приборҙар ҡуйығыҙ,
- уларҙың эшләү-эшләмәүен даими тикшереп тороғоҙ,
- батареяларын алмаштырырға онотмағыҙ, приборҙың үҙен дә 10 йыл һайын алмаштырып тороу яҡшыраҡ.

БЫНАҒАЙЫШ!

# ҺОРАУҘАР КҮП, ЯУАП - ЮҠ...

**Нышып тултырылған автобуста ҡапыл шау-шыу ҡупты: алғы урында ултырған йәш ир-егетте ҡыҫылып килеп ингән әбейгә урын бирмәгән өсөн пассажирҙар һүгә, тиргәй башланы, ә ул өндәшмәне, ҡыҙарынып, тыныс ҡына ултыра бирҙе. Ниндәй генә сәнскеле һүҙ, мыҫҡыллауҙар яманы егеттең бәхетһеҙ башына! Үҙенең туҡталышына еттеме, әллә был асыу һәм әр менән тулы автобусты ташлап сыҡҡыһы килдеме - эргәһендә ултырған олораҡ ҡатын менән сығырға йыйындылар. Ҡатын, ә ул егеттең әсәһе булып сыҡты - күнегелгән хәрәкәттәр менән улын арҡаһына йөкмәп алды һәм һаҡ ҡына автобустан сыҡты. Егеттең ике аяғы ла төптән юҡ икәнлеген шунда ғына аңғарҙы ярһыған пассажирҙар. Автобус эсе шып-шым булды. Ә туҡталышта гәрип улын артмаҡлаған әсәне инвалид коляскаһы менән көтөп торған үҫмер ҡаршыланы...**



Бөгөнгө көн өсөн таныш күренешме? Һәр хәлдә, бындай осраҡтар тормошобоҙҙа һаман да йышыраҡ осрай башланы - килешһеҙгеҙме? Аптырай торғаны ла юҡ - типһә, тимер өҙәрлек күпме йәш ир-егет аяҡ-ҡулһыҙ ҡайтты. Ата-әсәһе, яҡындары уларының башы һау ҡайтыуына ла шөкөр итеп, уларҙы сабыр ҡабул итте, хатта әлегеләй йөкмәп йөрөргә лә әҙерҙәр. Аяҡ-ҡулһыҙ ҡалған ир-егеттәрҙең өйҙәрендә, көнкүрештә ҡулһыҙ көйө ҡалаҡ тоторға, аяҡһыҙ салбар кейергә өйрәнә-өйрәнә ни хәлдә лә йәшәргә тырышыуҙарын күрһәткән видеокадрҙар ҙа күп. Тән ғариплеге генә түгел, йән һыҙлауҙарын да баҫыр, аҙмыштары менән "уйнаған" ҡот оҫҡос хәлдәрҙе онотор өсөн үҙҙәрендә көс, ихтыяр ныҡлығы таба алырмы улар? Терәк булыр яҡындары, индәрен ҡуйыр дуҫ-иштәре бармы уларҙың? Бәлки, психотерапевт ярҙамы кәрәктер?

***Ә бит уйлап ҡараһаң, психотерапевт хеҙмәттәренә баяғы автобус пассажирҙары ныҡыраҡ мохтаж булып сыға түгелме? Кешеләрҙең бер-береһенә иғтибар һәм ихтирамы, сабыр һәм әҙәпле мөнәсәбәте, иплелек, түҙемлелек кеүек сифаттары төптә юҡҡа сыға барғандай тойолмаймы һеҙгә? Башҡаларға ҡарата түҙеп тормауcанлыҡ, тупаҫлыҡ, битарафлыҡ миҫалдары урамда булһынмы, транспорттамы, табипҡа сиратта торғандамы - айырыуса йыш күҙгә ташлана. 2019 йылда уҡ әле "Российская газета" хәбәрсеһе Валерий Выжутовичтың психология фәндәре кандидаты Сергей Ениколопов менән әңгәмәһендә, рәсәйҙәр агрессив кимәле, тупаҫлыҡ һәм әйләнә-тирәләгеләрҙе күрәалмауcылыҡ йәһәтенән бигүк яҡшы иҫәптә тормай, тигән һығымта яһағайны. Бөгөн иһә бындай хәл һис үҙгәрмәне, киреһенсә...***

Быны сәбәптәре күп төрлө һәм был яҙмала уларҙы ентекләп тикшереү бурысы ҡуйылмаһы ла. Кемдер әйтмешләй, агрессия - ул элекке совет системаһы ҡиммәттәренең юҡҡа сығыуы һәм был йүнәлештә яңы бурыс-маҡсаттарҙың әле нығынып етә алмау бәләһе - айырыуса йәштәр, үҫмерҙәр араһында таралған. Шулайҙыр. Өҫтәүенә, кешеләрҙең бер-береһенә түҙемлелек күрһәтеү (толерантлыҡ) кимәленең булмауы бөгөнгө мәҙәнилек көрсөгөнә лә бәйле. Донъя булғас, барыһы ла: ҡайғыһы ла, шатлығы ла була, ә бына шундай ваҡыттарҙа, айырыуса кешене хәсрәт баҫһа, дөрөҫ юлдан тайпылһа, тормош маҡсатын юғалтһа, ғаиләһендә аңлашылмауcылыҡ килеп тыуһа, йәшәүҙең йәмен күрмәй башлаһа, күңеленә хәүефле уй килһә, ул ни эшләргә тейеш? Кемдерҙелер бындай төшөнкөлөктән яҡындары, дуҫтары менән уртаҡлашыу ҡотҡаралыр, кемдәрҙер ҡайғыһын алкоголь менән баҫырға маташыр, кемдәрҙер проблемаларын йырып сығырға үҙендә көс, ихтыяр табыр...

Ә бит беҙҙә ошоға тиклем бик популяр булмаһа ла, һуңғы йылдарҙа йәнләнә төшкән психолог-психотерапевт хеҙмәте лә бар. ВЦИОМ (Бөтөн Рәсәй йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге) мәғлүмәттәре буйынса, һуңғы йылдарҙа рәсәйҙәр психологик ярҙам хеҙмәттәренә йышыраҡ мөрәжәғәт итә башлаған. 2020-2024 йылдар эсендә Рәсәйҙә психологтарҙың клиенттары 26 процентҡа артҡан, ә был, тимәк, 15,6-нан алып, 19,6 млн кеше тигән һүҙ. Ә инде былтырғы йыл эсендә генә лә психолог һәм психотерапевтҡа мөрәжәғәт итеүселәр 2023 йылға ҡарағанда 25 процентҡа артҡан. Шул уҡ былтырғы йыл ахырына психологик ярҙам хеҙмәтенә ихтыяжлыҡ индексы мөмкин булған 100 пункттан 30-ға еткән. Ошоға тиклем бер ҡасан да психологҡа мөрәжәғәт итмәгән рәсәйҙәр өлөшө 2023 йылғы 81 проценттан былтыр 74-кә тиклем кәмегән. Был белгестәргә айырыуса ҙур ҡалала йәшәүселәр һәм күберәк ҡатын-ҡыҙҙар мөрәжәғәт итә икән. Ә инде сит илдәрҙә үҙен ихтирам итеүсе һәр ғаиләнең тип әйтерлек үҙ психологы бар.

***Ошондай шарттарҙа яңыраҡ ҡына интернет киңлектәрендә күптәрҙе аптырашта ҡалдырған бер хәбәр таралды: 2026 йылдың 1 мартынан Рәсәйҙә дәүләт медицина учреждениеларында ла, шәхси клиникаларҙа ла психиатрҙарға мөрәжәғәт итеүсе бөтөн граждандарҙы ла диспансер күҙәтеү талап ителгән психик сирле пациенттарҙың федераль регистрына индерергә ниәтләйҙәр икән.*** Ҡыҫҡаһы, был регистр ҡарап тормаясаҡ: ябай кеше тормош ҡатмар-

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔ Урал аръяғы" инвестиция һабантуйының төп темаһы - яңы иҡтисади үҫеш үҙәктәре. Иҡтисади үҫеш министры урынбаҫары Михаил Изотов белдереүенсә, 2024 йылда Башҡортостанда "Тормош өсөн инфраструктура" милли проекты сиктәрендә 62 терәк пункт билдәләнде, улар - республиканың барлыҡ муниципаль үҙәктәре (шул иҫәптән Инйәр). Үтәсәк сарала Сибай ҡалаһы ошондай терәк пунктты үҫтереү моделе булып сығыш яһаясаҡ.

✔ Әбйәлил районының Бурангол ауылында капиталь ремонттан һуң мәктәп-интернат асылды. Капиталь ремонтты районда геология-разведка эштәре алып барған "Салауат" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте финансланған. Әбйәлил районы башлығы Айрат Әминев, "Салауат" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте директоры Таһир Бәхтигәрәев мәктәп коллективын, уҡыусыларҙы һәм уларҙың ата-әсәләрен әһәмиәтле ваҡиға менән ҡотланы. Айрат Әминев Әбйәлил халҡының республика етәкселегенең ярҙамын һәм иғтибарын тойоуын билдәләне. Быйыл ғына район мәктәптәре алты автобус алған, Асҡарҙа тәҙәкләндерелгәндән һуң "Ҡайынҡай"" балалар баҡсаһы асылған, башҡа мәктәптәрҙе лә яңыртыу планлаштырыла.

✔ 1 сентябрҙән Шүлгәнташ мәмерйәһенә инеү, музей-экскурсия комплексы буйлап экскурсиялар үткәреү графигы үҙгәрҙе. Хәҙер экскурсиялар көнөнә 4 тапҡыр ойоштороla, тип әлеккә сөвет үҙәге үҫ курсаулыҡ етәкселеге. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, пенсионерҙар, инвалидтар, хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашыусылар, ишле ғаилә ағзалары, хеҙмәт ветерандары өсөн ярты хаҡ ғәмәлдә ҡала. Ә 8 йәшкә тиклемге балаларға экскурсия бушлай, 9-16 йәшлектәр өсөн 50 процент ташлама бар. Бөрйән районы халҡына льгота һаҡлана, быны өсөн паспортты күрһәтергә кәрәк.

✔ Ҡытай хөкүмәте 15 сентябрҙән Рәсәй халҡы өсөн визаһыҙ режим индерә. Был хаҡта ТАСС Ҡытай Халыҡ Республикаһы дипведомствоһының рәсми вәкиле Го Цзякунь белдереүенә һылтанып хәбәр итә. Рәсәйҙәр сит ил паспорты менән илдә 30 тәүлек була ала. Сара 2026 йылдың 14 сентябренә тиклем ғәмәлдә була.

✔ "Башнефть" яғыулыҡ ҡойоу станцияларында бензинға хаҡ артҡан. Хәҙер АИ-92 маркалы яғыулыҡтың бер литры өсөн водителдәргә 57,25 һум түләргә тура килә (+30 тин). АТUМ-92 - 58,35 һум (+30 тин), АИ-95 - 61,1 һум (+30 тин), ә АТUМ-95 62,25 һум (+40 тин) тора. Шул уҡ ваҡытта АИ-100 һәм дизель яғыулығына хаҡтар шул килеш ҡала. Компания 17 августа ла бензинға хаҡты арттырғайны.

лыҡтарын сисеүҙә ярҙам һорап мөрәжәғәт итәме, әллә етди психик сир сәбәплеме. Дөрөҫөн әйткәндә, һуңғы категория психотерапевтҡа үҙ теләге менән килә булыр микән? Улар туранан-тура махсус дауалау учреждениеларына ебәреләә бит. Өҫтәүенә, был регистрға әләгеүҙең ҡайһы бер эҙемтәләре хаҡында ла хәбәр итә телеграм-каналдар: мәҫәлән, психиатрға мөрәжәғәт итеү факты эшкә урынлашҡанда эш биреүсе тарафынан иғтибарға алынасаҡ, имеш. Ошо юҫыҡта эксперттарҙың хәүефләнеүе урынлылыр ҙа, бәлки, сөнки бөтәһен бер "ҡаҙанға" һалып бутау ябай кешеләрҙе психолог хеҙмәттәренә ярҙам һорап мөрәжәғәт итеүҙән ҡурҡытасаҡ һәм улар был ниәттәренән тыйылырға мәжбүр буласаҡ. Был кешене бик күп һорауҙар алдына ҡуя: "табип сере" тигән төшөнсә юҡҡа сыға буламы хәҙер? Ә кеше хоҡуҡтарын һаҡлау гарантияһы менән ни булыр, тип борсола социаль селтәрҙәр ҡулланыусылары.

Ләкин мәсьәләнең икенсе яғы ла бар. Эксперттар аңлатма биреүенсә, 2026 йылдың 1 мартынан ҡайһы бер һөнәр эйәләре: уҡытыусыларҙың, водителдәрҙең, полицейскийҙарҙың һәм башҡа белгестәрҙең мотлаҡ психиатрия тикшереүе үтергә тейешлеге хаҡында яңы ҡағиҙәләр ғәмәлгә индереләсәк. Бындай тикшереүҙәр биш йылға бер һәм хатта йышыраҡ та ҡулланылыуы ихтимал. Һәм әгәр ҙә табиптар һөнәр эйәләрендә психик тайпылыш билдәләре асыҡлаһа, хеҙмәткәр үҙ һөнәре буйынса эшләргә яраҡһыҙ тип табыласаҡ. Яңы ҡағиҙәләр эш биреүселәр тарафынан яуыз ниәттәрҙә файҙаланылыу ихтималлығына килтермәҫме, шулай уҡ регистр мәғлүмәттәре Эске эштәр министрлығына, банк һәм башҡа хеҙмәттәргә килеп эләкмәҫме, тип тә хафалана эксперттар.

Бер яҡтан ҡарағанда, был дай яңылыҡтың төп маҡсатын аңларға ла була: йәмғиәтебеҙҙә психик тороштарын асыҡлау талап ителгән һәр төрлө хәүеф-хәтәр тыуҙырыусы адекват булмаған кешеләр ҙә байтаҡ бит: улар ниндәйҙер ҡорал менән эш итергә, террористик акттар ҡылырға, аңы томаланған килешь руль артына ултырырға йә булмаһа, осраҡлы граждандарға һөжүм итергә мөмкиндәр. Өҫтәүенә, ошо рәттән наркомания һәм алкоголизм ҡорбандарын да өҫтәһәң... РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығының штаттан тыш баш психиатры Светлана Шпорт белдереүенсә, регистрҙа йәмғиәт өсөн хәүеф тыуҙырыусы ауыр сирлеләр генә күҙ уңында тотоласаҡ. Ләкин ундай әҙәмдәр үҙ теләктәре менән бер ҡасан да психолог хеҙмәттәренә һәм бигерәк тә психиатрҙарға мөрәжәғәт итмәйәсәге асыҡ. Күренеүенсә, баш белгес аңлатмаһы һорауҙарға тулы яуап биреп бөтмәй әле.

Был яңылыҡ социаль селтәрҙәрҙә ҡыҙыу бәхәстәр килтереп тыуҙырғас, РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ҡайһы бер мәғлүмәт каналдарының яңы ҡағиҙәләр хаҡында дөрөҫ булмаған хәбәр таратыуын белдереп, уларҙы кире ҡағырға мәжбүр булды һәм киләһе йылдан айырым категория хеҙмәткәрҙәренең генә мотлаҡ психиатрия тикшереүе үтәсәге хаҡында аңлатма бирҙе. "Федераль регистрға ҡасан да булһа психиатрия ярҙамына мөрәжәғәт иткән кешеләрҙән иң тәүҙә ауыр психик тайпылыштарға дусар, хәүефле ҡылыҡтары менән йәмғиәт өсөн ҡурҡыныс тыуҙырыусы һәм даими диспансер күҙәтеүҙә булырға тейешле граждандар ғына индереләә, ә табиптарға мөрәжәғәт иткән күпселек башҡа граждандар регистрҙан ситтә ҡаласаҡ һәм психологтарҙан ярҙам алыуҙарын дауам итәсәк ", - тип өҫтәне баш белгес Светлана Шпорт. Ә бит бынан алда ғына әйтеп кителеүенсә, интернет сайттары һәм каналдарҙа ҡасан да булһа психиатрия ярҙамына мөрәжәғәт иткән бөтөн граждандарҙың да мәғлүмәттәре берҙәм федераль реестрға индереләсәк, тип хәбәр ителгәйне. Социаль селтәрҙәрҙәге шау-шыу тап ана шундай икеле-микеле аңлатмалар арҡаһында килеп тыуҙы ла инде. Хәҙер кемгә ышанырға? Шуныһы ла бар: бындай бәхәстәрҙән һуң психолог һәм психотерапевттар пациенттарһыҙ тороп ҡалмаҫ, тимә...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ҠЫТАЙҘАҒЫ ДҮРТ КӨН

**Үткән аҙнаның иң мөһим яңылығы РФ Президенты Владимир Путиндың Ҡытайға эш сәфәре булды. Был Рәсәй етәксеһенең Ҡытайға 20-се тапҡыр барыуы, ләкин был юлы уның ут күршеләрҙә 31 августан 3 сентябргә тиклемге оҙайлы визитын рәсми даирәләрҙә ошоғаса күрелмәгән һирәк ваҡиға, стратегик аҙым, тип атанылар. Сөнки Путиндың дүрт көнлөк эш программаһы, ысынлап та, ғәҙәттән тыш бай һәм тығыҙ булыуы менән айырылып торҙо.**



31 август Рәсәй Президентын Тяньцзинь ҡалаһында тантаналы шарттарҙа йылы ҡаршыланылар, һәм ошо көндөң кисендә ҠХР рәйесе Си Цзиньпинь исеменән ШОС (Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы) саммиты башланыу уңайынан ҡабул итеү тантанаһы үткәрелде. Ошо сарала бергә ултырыусы Владимир Путин менән Си Цзиньпин Аляскала булып үткән Рәсәй-Америка һөйләшеүҙәре хаҡында фекер алышып та өлгөрҙө, тип хәбәр итте журналистарға РФ Президенты ярҙамсыһы Юрий Ушаков. Ҡабул итеү тантанаһынан һуң Владимир Путин Беларусь президенты Лукашенко һәм Әрмәнстан премьеры Пашинян менән осрашып һөйләште.

Иртәгәһенә Тяньцзиндә ШОС лидерҙары Советының 25-се юбилей ултырышы булып, унда ойошманың 2024-2025 йылдарҙағы эшмәкәрлегенә һығымта яһалды һәм киләсәктә берләшмәне артабан нығытыу - 2035 йылға тиклем ШОС-ты үҫтереү стратегияһы билдәләнде. Мәғлүм булыуынса, ШОС күптән инде төбәк лидерҙары осрашыуҙарынан Көнбайыштың бер полярлы донъя моделен тәнҡитләүсе державаларҙың ҡеүәтле стратегик форумына әүерелде. Рәсәй менән Ҡытайҙан тыш, унда Һиндостан, Иран, Төркиә, Беларусь, Пакистан, Монголия, Египет, Малайзия, Непал, Вьетнам, Лаос, Камбоджа, Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Тажикстан, Әзербайжан, Төркмәнстан, Әрмәнстан - бөтәһе 20-нән ашыу дәүләт етәкселәре ҡатнашты. Хатта Британияның сәйәси аналитигы Александр Меркурис АҠШ президенты Дональд Трампҡа Американан да ШОС саммитына делегация ебәрергә кәңәш бирҙе: был Украина проблемаһын хәүефһеҙлек гарантияһы менән хәл итеүгә бер аҙым булыр ине, тине ул.

Рәсәй инвестициялар фонды башлығы һәм сит илдәр менән хеҙмәттәшлек буйынса РФ Президенты вәкиле Кирилл Дмитриев 1 сентябрҙә "Известия" гәзитенә ШОС саммитының юғары халыҡ-ара кимәлдә эшмәкәрлек алып барыуы хаҡында һөйләне. Был Көнбайыш тарафынан Рәсәйҙе "изоляциялау" тураһында таратылыусы ялған хәбәрҙәрҙе юҡҡа сығарҙы, тине ул.

Саммит ултырышынан һуң Владимир Путин Һиндостан, Иран, Сербия, Төркиә Пакистан, Үзбәкстан, Вьетнам, Конго башлыҡтары менән осрашып һөйләште. Премьер-министр Нарендра Моди менән әңгәмәлә Владимир Путиндың йыл ахырында Һиндостанға эш сәфәренә әҙерлек мәсьәләһе ҡаралды.

Саммит тамамланғас, Рәсәй Президенты Пекинда Ҡытай һәм Монголия менән өс яҡлы осрашыуҙан һуң Рәсәй - Ҡытай делегацияларының киңәйтелгән составтағы ултырышы, аҙаҡтан Владимир Путин менән Си Цзиньпиндың мөһим мәсьәләләр буйынса икәү-ара фекер алышыуы көтөлә, тип хәбәр итте Юрий Ушаков. Ике ил башлығы 3 сентябрь япон илбаҫарҙарына ҡаршы һәм Икенсе донъя һуғыштарында Еңеүҙең 80 йыллығына арналған тантаналы парадта ҡатнаша.

Ҡытайҙағы саралар тамамланғандан һуң РФ Президенты Владивостокта туҡталып, Көнсығыш иҡтисад форумының (ВЭФ) 5 сентябрҙә үтәсәк пленар ултырышында ҡатнаша. Форум сиктәрендә лә Путиндың сит ил вәкилдәре менән осрашыуҙары дауам итәсәк.

Башҡа халыҡ-ара хәлдәргә ҡағылышлы шуны әйтеп китеү кәрәк: РИА Новости агентлығы Strategic Culture мәғлүмәт сығанағына һылтанып хәбәр итеүенсә, Украина үҙенә күрше илдәргә етди хәүеф тыуҙыра башланы. "Көнбайыш Киев режимына ярҙам хаҡында хәбәрен тылҡый биргән арала Венгрия менән Польша кеүек уға күрше илдәр Украинаның радикаль һәм экстремистик ҡылыҡтарынан тамам биҙеүҙәрен белдерә. Мәҫәлән, Киев режимы яңыраҡ ҡына Венгрия менән Словакия өсөн мөһим энергетика сығанағы булған "Дружба" нефть үткәргесенә өс тапҡыр һөжүм яһап, уның эшен тотҡарланы. Һөҙөмтәлә Венгрия менән Словакияны энергетика менән тәьмин итеү 6 көн буйына туҡтатылып торҙо.

Варшаванан да Украинала милли экстремизмдың көсәйеүе һәм бандеровщинаның тергеҙелеүе сәбәпле хәүефле хәбәрҙәр килә. Венгрия менән Словакия властарының энергетик хәүефһеҙлек тәьмин итеүҙә ярҙам һорап Еврокомиссияға мөрәжәғәт итеүҙәре иғтибарһыҙ ҡалдырылды. "Был күрше илдәр халҡы хәҙер Киевтағы неонацистик режимды алыштырыуҙың берҙән-бер дөрөҫ юл икәненә тамам төшөндө, буғай. Рәсәй ошо законлы маҡсатҡа денацификация ярҙамында өлгәшеү өсөн сығыш яһай ҙа инде. Шунһыҙ Европала тыныслыҡ һәм тотороҡлолоҡ даими рәүештә хәүеф аҫтында буласаҡ",- тип яҙа Strategic Culture сайтындағы мәҡәлә авторы. Көнбайыш илдәр йәмғиәттәре лә Украина конфликтын көйләүҙә Рәсәйҙең дөрөҫ юлда тороуын таный, тип белдерә Төркиәнең dikGazete баҫмаһы. Мәҫәлән, Германия халҡының 52 проценты территория мәсьәләһендә Украина Рәсәй шарттарына ризалашырға тейеш, тип иҫәпләй.

МХО-нан яҡшы хәбәр: Рәсәй ғәскәрҙәре Донецк халыҡ республикаһының бөтөн көньяҡ биләмәһен азат итте, тип яҙҙы үҙенең Телеграм-каналында ошо төбәк башлығы Денис Пушилин. РФ Ҡораллы Көстәренең Генеральный штаб начальнигы Валерий Герасимов белдереүенсә, Донецк республикаһының - 79, Луганск республикаһының - 99,7, Запорожьеның - 74, Херсон өлкәһенең 76 проценты Рәсәй армияһы ҡарамағына күсте.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓"Һөт иле" ғаилә фестивале быйыл 30 августа Өфөнөң "Ҡашҡаҙан" паркында ойошторолдо. Был сара 2011 йылдан алып үткәреләә, сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалай һәм республиканың һөт продукцияһын таныта. Был юлы ла байрамда һөт йәрминкәһе, фермер баҙары, сыр кибете ойошторолдо. Шулай уҡ оҫталыҡ дәрестәре, ғаилә өсөн интерактив майҙансыҡтар һәм концерт сығыштары булды. Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәте буйынса, өфөләр һәм баш ҡала ҡунаҡтары сәй фестивалендә күмәкләп сәй эсеү буйынса республика рекордын ҡуйыуҙа ҡатнашты. "Ҡымыҙ ауылы" майҙансығында республиканың иң яҡшы ҡымыҙ бешеүселәренән шифалы милли эсемлек, "Бал йәрминкәһе"ндә умартасылыҡ продукцияһы тәҡдим ителде.

✓Өфө фән һәм технологиялар университетының урта һөнәри белем биреү институты бюджет урындарына 355 студент ҡабул итте. Уларҙың 138-е киләсәктә Өфөнөң "УМПО", "Гидравлика", "УАПО", "УППО" предприятиеларына эшкә урынлашыу шарты менән маҡсатлы килешеүҙәргә ҡул ҡуйған. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - БР сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министры Александр Шельдяев йәштәрҙең авиация төҙөлөшө өлкәһендәге һөнәрҙәргә ҡыҙыҡһыныуы артыуын билдәләй. 2025 йылда Өфө фән һәм технологиялар университетының дөйөм конкурсында ҡатнашҡан абитуриенттар һаны 5145 кеше тәшкил иткән, былтыр 3169 абитуриент булған.

✓Өфөнән диңгеҙ курортына рейстарҙың дөйөм һаны аҙнаһына 29-ға еткереләә. "Өфө" аэропортының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, сентябрь башында Azur air авиакомпанияһының Өфөнән Төркиәнең Анталья ҡалаһына өҫтәмә рейсы булдырыла. Әлеге теҙмәгә аҙнаһына бер рейс өҫтәлеп, осоштарҙың дөйөм йышлығы аҙнаһына 7 рейсҡа тиклем арта. Рейстарҙы башҡарыу өсөн заманса киң фюзеляжлы Boeing 767-300 самолеты йәлеп ителә. Киңәйтелгән осоштар программаһы быйыл октябрь аҙағына тиклем ғәмәлдә була.

✓Өфө художество галереяһында театр һәм кино рәссамы, Рәсәй Рәссамдар союзы ағзаһы Руслан Мәғәлимовтың шәхси күргәҙмәһе эшләй. Күргәҙмә экспозицияһына өс төп йүнәлеш буйынса эштәр ингән: рәсем сәнғәте, графика һәм сценография. Беренсе залда рәссамдың ижади донъяһының асылын асыусы, Башҡортостан рухын һәм мәҙәниәтен данлаған төп картиналар ҡуйылған. "Рух иле", "Урал васыяттары", "Салауаттың йәшлеге", "Йылҡы сыҡҡан" эштәре ата-бабаларыбыҙҙың йыһан кеүек тәрән мираҫынан рухланып, рух күтәрелеүен сағылдыра. Күргәҙмә 20 сентябргә тиклем эшләйәсәк.

**“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

✓ Бындай ғаиләләрҙә балалар зыян күрә. Атайҙың эргәлә булмауы ғына ла хәстәрлектән мәхрүм баланың психикаһында юйылмаҫ тәрән эҙ ҡалдырыуы, балала кәмселек тойғоһо артыуына булышлыҡ итеүе мөмкин.



БОРОНҒО АМАНАТ

# ТЫЙЫУ ЙОЛАҺЫ

## Ярамағанды ҡарауҙы тыйыу

Һаҡларға ҡушылған, йәшерелгән нәмәне, кәрәкмәгәндә ҡарау ҙа тыйылған. Грек мифологияһында һуғыш һәм енеү, шулай уҡ аҡыл, белем, сәнғәт, төрлө кәсептәр алиһәһе Афина Гефестың орлоғонан Ер Гея тыуҙырған бәпесте, ул ятҡан ҡумтаны Аглавра һәм уның ҡыҙ туғандарына һаҡларға бирә. Афинаның тыйыуына ҡарамай, ҡыҙҙар ҡумтаны аса һәм йылан кәүҙәле баланы күрә. Афина тәҡсиренән һарманланған, һантыйланған ҡыҙҙар акрополдән ташлана һәм һәләк була.

Монгол риүәйәтендә һурәтләнеүенсә, дүрт егет олоғайған Хохәдәй мәргәнгә торлаҡты һаҡларға ҡалдыра, мәгәр билдәле һауытты асыуҙы тыя. Һауытҡа йәшен уҡтары һәм ҡанатлы кейем һалынған була. Хохәдәй ике тапҡыр тыйыуҙы боҙа. Шулай ҙа егеттәр уны йәшен уҡтарын һаҡлауҫы итеп ҡалдыра, ләкин уларҙы фәҡәт аллалар ҡушыуы буйынса ғына ҡулланырға бойора.

Йөҙгә ҡарамау тыйыуы ла булған. Грек мифологияһында сағылыуынса, Психея бер ҡасан да иренең йөҙөн күрмәскә тейеш. Психея ҡыҙыҡһыныуына сыҙай алмай, төнөн шәм яндыра һәм йәш аллаға шул тиклем һоҡланып ҡарай, Амурҙың naҙлы тәненә ҡайнар май тамсыһы тамғанын да тоймай. Амур юҡ була. Психея бик күп һынауҙар үтеп, ыҙа күреп, тере һыу алырға ер аҫтына төшөп, йәрен ҡайтарырға тейеш була. Тыйыуҙы боҙоу ҡатынды утҡа, һыуға төшөрә.

## Ҡәрҙәштәргә өйләнеүҙе тыйыу

Боронғо дәүерҙәрҙә үҡ табу тәү сиратта ҡауышыу, никах, ир-ҡатын мөнәсәбәттәре йолаларын күҙәтеүгә, үтәүгә һәм һаҡлауға ҡағылған. Күп ҡәүемдәрҙә экзогамия өҫтөнлөк иткән, бер ырыу, оло ырыу эсендә үҙ-ара өйләнешеү тыйылған. Ҡан бутамаҫ, сәләмәт нәҫел булдырыу өсөн башҡорттарҙа тыуа ят, ете ят кешеләр менән генә никахлашыу рөхсәт ителгән.

Ҡан ҡәрҙәштәр менән ҡауышыу тыйылыуы грек мифологияһында ла һүрәтләнә. Эоланың ҡыҙы Канака ағаһы Макареяға ғашиҡ була һәм уның менән бәйләнешкә инә. Инабатһыҙ ҡушылыуҙан тыуған бәпесте Эола һәләк итә һәм ҡыҙына үҙен үҙе юҡ итергә бойора.

Үҙәк Америка индеецтарының аллаһы Кецаль-ко-атль, иҫерткес эсемлек эсеп, үҙ табуҙарын боҙоп, ҡыҙ туғаны менән гонаһ ҡыла. Айныған, ғөрөф-ғәҙәткә һыймаған, һис кенә лә ярамаған яҙыҡ ҡылғанын, сафлығын юғалтҡанын аңлай һәм үҙ ирке менән Көнсығыш иленә сығып китә, унда мәрхүм була, тәне яндырыла.

Тоетама-Химэ тураһындағы япон мифында экзогамия табуһы һалынған дөйөм тотемдан (бында крокодил йәки кашалот) булған ир менән ҡатын никахҡа инеү күренеше сағыла. Диңгеҙ батшаһы ҡыҙы Тоетама-Химэ, ире Хоори һәм тыуасаҡ балаһы менән бергә ҡалырға теләп, диңгеҙҙән ергә сыға. Тыйыуға ҡарамаҫтан, Хоори бала табыу күренешен ҡарай. Уның улын имәнес хайуан (крокодил, кашалот) тыуҙыра. Һөҙөмтәлә ҡатыны Тоетама-Химэ ерҙә ҡалдырып китергә һәм мәңге диңгеҙ төпкөлөндә йәшәргә мәжбүр була.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы бар).**

УЙЛЫҒА - УЙ

# СЕБЕРҘӘ ЙӨРӨП...

## ғаиләләрен тарҡаталар



**Башҡортостанда 160 меңдән ашыу кеше аҡсалы эш табыуҙың вахта ысулына мөрәжәғәт итергә мәжбүр. Яҡын туғандар менән мөнәсәбәттәргә йыраҡтағы эш нисек тәьҫир итә икән? "Үҙ ирке менән һөргөндә йәшәгән" ғаилә башлығы булыуы нисек?**
**Тыуған яҡтың ҡосағында naҙланған йылы усаҡты лайыҡлы эш хаҡы өсөн ҡорбан итеү, ҡыҙғаныска ҡаршы, ауыл ир-егеттәренә хас аяныс ысынбарлыҡ. Йәшәгән урында йүнле эш булмау, бәләкәй эш хаҡы ошо ауыр ҡарарға килтерәләр уларҙы. Ҡалғандарҙан кәм булмаһын, ҡатыны, балалары мохтажлыҡта йәшәмәһен, тигән изге ниәттәр менән вахтаға сығып киткән ғаилә башлығы үҙе генә түгел, бөтә ғаиләһе менән нужа ҡаласы ашай. Күнегелгән йәшәү рәүешенең емерелеүе ғаилә эсендәге мөнәсәбәттәрҙе лә ҡатмарлаштыра, әлбиттә. Тимәк, был осраҡта ғаиләнең төп нигеҙе сереүе ҡотолғоһоҙ.**
**Ғаилә алдында ир-егеттең дә, ҡатын-ҡыҙҙың да бурысы бар: ир - келәт, ҡатын - йоҙаҡ. Келәт йоҙаҡһыҙ булып, шар асыҡ тороуҙан, йә йоҙаҡ эленеп тороп саң йыйыуҙан фәтүә бармы икән?**
**Тыңлайыҡ:**

***Айһылыу һөйләй:*** Атайҙың Себерҙә вахтала йөрөүе беҙҙең ғаиләне емерҙе, тиһәң дә була. Ул мин юғары синыфтарҙа уҡыған саҡта уҡ вахтаға йөрөй башлағайны. Бишәр ай өйҙә булмай торғайны. Ә әсәйем уны гел һағынып көттө, уға үҙ иңенә төшкән бар хәстәрлектәрҙе лайыҡлы күтәрергә, ныҡ түҙергә тура килде.

Улар икеһе лә улай йәшәп булмауын шул саҡта уҡ аңлай инеләр. Атайым бит вахтанан баш тартып, ике йыл самаһы үҙен йөк ташыусы һөнәрендә лә һынап ҡараны, ләкин түҙемлеге оҙаҡҡа етмәне. Хәҙер, ана, тағы вахтала. Инфраструктура өсөн мөһим тимер юлдар һалалар. Был вахтаның срогы ҡыҫҡараҡ, 10-20 көн тип ышандырған булғайны ул, әммә уныһы рәсми, ҡағыҙҙа ғына шулай, ысынында, эше тамам булмайынса, унда эшләгәндәр урынын ташлап китә алмай.

Хәҙер атайым менән әсәйемә илленән ашыу йәш, ә улар бергә йәшәй белмәй. Атай үҙенең эшселәре менән ваҡыт үткәрергә ғәҙәтләнгән, әсәй яңғыҙлыҡты ҡыйынлыҡҡа һанамай. Уларға ҡарап, йән әрней.

Үҙемдең иремде бер ҡасан да вахтаға ебәрмәйәсәкмен, тип һүҙ биргәнмен үҙемә. Вахтала йөрөү бөгөн етеш йәшәүҙең берҙән-бер юлы икәнен аңлап торам, ләкин береһенә лә ундай әсе яҙмыш төшөүен теләмәҫ инем...

Уйлап ҡараһаң, нимәһе ҡыйын? Барҙың, аҡса эшләнең, ҡайттың, туғандар менән ваҡыт үткәрҙең, һәм тағы - эшкә. Шәп схема булып күренә, тик бына был "шәп" вариант үҙендә ғаилә мөнәсәбәттәренә ҡағылышлы бик ҙур хәүефтәр йәшерә. Ваҡытлыса айырылышыу тураһында ғына түгел, хис-тойғоларҙың һыуыныу тураһында бара бында һүҙ.

Һәм, әлбиттә, бындай ғаиләләрҙә балалар зыян күрә. Атайҙың эргәлә булмауы ғына ла хәстәрлектән мәхрүм баланың психикаһында юйылмаҫ тәрән эҙ ҡалдырыуы, балала кәмселек тойғоһо артыуына булышлыҡ итеүе мөмкин.

Әсә кешенең бөтә ҡыйынлыҡтарға ҡаршы яңғыҙ тороп ҡалыуы ла йүнлегә килтермәй: бер-бер артлы ауырлыҡтар артыуынан нервылары ҡаҡшай, шунан депрессия ҡосағына инә һәм шуның һөҙөмтәһендә үҙен юғалтыу хәленә тиклем барып етеүе ихтимал. Һөҙөмтәлә вахтала эшләү ғаиләне емереүҙең бер сәбәбенә әүерелә. Айырым көн күреү, хәстәрлекһеҙ тонсоғоу, аңлашылмаусанлыҡ, оҙаҡ ваҡыт йыйылған ярһыуҙы баҫыу - былар бөтәһе лә "талаҡ"ҡа килтергән ҡаты низағ хәбәрселәре.

***Сулпан һөйләй:*** Бергилке минең дә ирем Себерҙә эшләп ҡараны ул. Бер-беребеҙҙән ситләшә башланыҡ, ҡыҙыҡһыныуҙарыбыҙ ҙа айырыла башланы. Вахтаһынан ҡайтһа, сит кеше кеүекбеҙ. Яңынан бер-беребеҙгә өйрәнер өсөн уның ярты ялы үтә торғайны, нимә тураһында һөйләшергә лә белеп булмай ине.

Айырылышыуҙан саҡ ҡалдыҡ. Атай менән әсәйгә рәхмәт инде, беҙҙе Төркиәгә ял итергә ебәргәйнеләр, шунда иреп, һәйбәт итеп һөйләшеп, вахталарҙы тамамланыҡ. Төркиәнән ҡайтыу менән ирем эшенән китте. Хәҙер икебеҙ ҙә ҡалала эшләйбеҙ, беребеҙ ҙә үкенмәй, күңел дә тыныс...

Иреңдең ситтә эшләп йөрөүе, ысынлап та, ғаиләне тарҡата. Күп ваҡыт айырылып тороу үҙ эшен эшләп ҡуя барыбер. Аҡса, ярай, әҙерәк булыр, ләкин татыулыҡ, бергә булыу мөһим.

***Азат һөйләй:*** Йүнле эш хаҡы түләмәйҙәр бит беҙҙә, шуға ла ир-егеттәр вахтаға ынтыла. Унан һуң, бер алдаҡ та күп. Өс-дүрт йыл элек вахтанан ҡайтҡайным, бер яҡташ танышым Өфөнән шылтырата, үҙебеҙҙә әлеге лә баяғы вахта эшен тәҡдим итә. Ул биргән телефон буйынса ойошманың етәкселеге менән һөйләштем, 20 көн эш өсөн 100 мең түләйбеҙ, тигән булдылар. Һөҙөмтәлә ныҡ алдандым, етәкселеге эшселәренә мал һымаҡ ҡарай, эш өсөн еткерер түләмәйҙәр. Башлығыбыҙ "Өйҙә эшләү - бәхет" тип әйтә лә ул. Бәхет, әлбиттә. Ләкин кемдәрҙер уны тамуҡҡа әйләндерә шул. Мин дә татыным ул тамуҡты. Ярай, эш хаҡы ҙур булһа, уныһына ла түҙер инем, ләкин уныһы ла булманы.

Вахтаға йөрөй башлағанда улыма алты йәш тулғайны. Ваҡыт һиҙелмәй үтте лә китте, уны йылына өс-дүрт тапҡыр ғына күрә торғайным. Ана, хәҙер үҫте, айырым йәшәй. Эргәһендә күберәк булырға кәрәк булған, тип уйлап ҡуям. Йәш ғаилә башлығына, балалары бәләкәй булғандарға йөрөмәскә кәрәк ине ул вахтаға, ләкин "оҙон аҡса" иң күбе шундайҙарға кәрәк бит инде. Һирәктәрҙе генә иҫәпкә алмағанда, мин белгәндәрҙең күптәре ҡатындары менән талаш-ҡаңғырыштарҙан сыҡмай, хыянат итеп, йә хыянатҡа түҙмәй, айырылышып бөттөләр.

Элек Себер яҡтарында вахталағы эш өсөн һәйбәт түләнә ине, хәҙер улай түгел, тимәк, өйөндән, ғаиләнән айырылып, вахтала йөрөүҙең дә файҙаһы юҡ. Кемдер вахтала йәшәп өйрәнгән, кемдер өйҙәге ҡыйынлыҡтарҙан ҡаса, шуға ла йөрөй һаман, ә миңә етте. Һаулыҡты бөтөрөп, ҡартлыҡҡа барып етеп булмаҫ, тип ҡуркам... Нефтсе булып ауыр эштә йөрөгәнсе, берәй Wildberries йә Ozon складтарында заказ йыйыусы булып, шул уҡ аҡса эшләргә була, уның өсөн әллә ни белем дә кәрәкмәй һәм үҙеңдең ғаиләң эргәһендә йәшәйһең бит инде...

**Шулай итеп, был теманы бик тә дауам итке килә. Ул бик тә көнүҙәк бит. Хаттар көтәбеҙ.**

**Рәзил ШӘМСЕТДИНОВ.**

АРҘАҠЛЫЛАРЫБЫҘ

# БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ РУХИ ШАҺЫ...

## Зәйнулла ишан тураһында бер кәлимә

Зәйнулла Рәсүлев Тамъян, Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Түңгәүер, Үҫәргән ырыуҙарынан үҙе ише имам-хатиптар менән 1862 йылдарҙа уҡ олоҫтарҙа мәктәптәр астырыу һорауы менән Ырымбур губернаторына бара. Ул хатта кантон идаралығынан был маҡсатты тормошҡа ашырыуға юллама алырға ла өлгәшә. Губернатор был имамдар вәкәләтлеген тыңлағанмы, юҡмы, уныһы беҙгә билдәһеҙ. Әммә 1865 йылда олоҫ үҙәге Түңғатар ауылында 10 балаға иҫәпләнгән рус-башҡорт мәктәбе асыла. Губернатор ул мәктәпкә үҙ "күҙ-ҡолағын", Неплюев кадет корпусын тамамлаған хорунжий Абдуллатиф Урусовты уҡытыусы итеп ебәрә. Ул мәктәптә урыҫ телендә уҡырға, яҙырға өйрәтә һәм арифметиканан һабаҡтар бирә. Ә гәрәп графикаһында башҡортса уҡырға һәм яҙырға Түңғатарҙағы Уйылдандар һәм Ҡарамыш тоҡомдары хәлфәләре уҡыта. Шундай уҡ мәктәпте Мулдаҡай ауылында ла асалар. Ләкин унда рус телендә яҙма һәм уҡыуҙы өйрәтеүсе уҡытыусы булмағанлыҡтан, мәктәп яртылаш йәҙитсә, яртылаш мәҙрәсә кимәлендә ҡала.

Олоҫ үҙәге Түңғатарҙа мәктәп асылыуы тураһында Әнүәр Әсфәндийәров та архив материалдарына таянып "Ауылдар тарихы" китабында яҙа.

2008-2009 йылдарҙа Башҡортостан Президенты һәм хөкүмәте ҡарары менән Түңғатарҙа бик күркәм мәктәп бинаһы төҙәлеп, халыҡты ла, балаларҙы ла ҡыуандырғайнылар. Рәсәй һәм Башҡортостан кимәлендәге бик күп шәхестәрҙе биргән был мәктәп бөгөн ябылыу сигендә. Батша губернаторының фатихаһы менән асылып, Рәсәйҙең барлыҡ ауыр, ҡанлы дәһшәтле йылдарында ла дәүләт тарафынан



ябылмаған был мәктәп бөгөн мәңгелеккә юҡ булыр өсөн упҡын ситенә этәрелде.

Башҡорттоң олуғ был затының үҙе яҙып ҡалдырып, Ризаитдин Фәхретдин тарафынан халыҡҡа еткерелгән шәжәрәһе түбәндәгесә:

Туҡһаба бей сама менән 1230-1240 йылдарҙа йәшәй. Уның улы Ҡаңлы - Минтәй - Шәйехмамай - Һеркә - Манғут - Ятабей - Яңыш - Ураҙгәли - Тупый - Мораткол - Солтанай - Ғашиҡ - Байрамғол - Муса - Рәсүл - Хәбибулла - Зәйнулла.

Уҡыусы өсөн был шәжәрәнән, ҡабатлап булһа ла, тағы ла шуны өҫтәргә кәрәк. Шәйех Зәйнулланың Мәхүбә исемле ҡатынынан тыуған өлкән улы Ғабдрахманды 1936 йылда, Ризаитдин Фәхретдин вафат булғас, Башҡортостан мосолмандары Диниә назаратының мөфтөйө итеп һайлап ҡуялар. Уның Ғабдулла, Фәбделҡадир, Ғәбделсабур тигән улдары хажға барғандан һуң Төркиәлә уҡый. Ғабдулла шиғырҙар яҙған. Рус, төрөк, ғәрәп, ҡаҙаҡ телдәрен яҡшы белгән. Ул 1914 йылда һуғышҡа алына. Офицер була. Үлеме билдәһеҙ. Ғәбделҡадир Рәсүлиә мәҙрәсәһе ябылғас, Ҡазанға китә. Әстерханда имам булып эшләй. Татар яҙыусыһы Атилла Рәсих - уның улы.

Зәйнулланың бер туған ҡустыһы Фәтхулланың ике улы була. Ғайса һәм Муса. Муса вафатына тиклем Учалы районының Ахун ауылында имам була. Генерал Дашковтың ҡыҙына өйләнгән була. Әммә ҡатыны кинәт кенә донъя ҡуя. Унан ҡалған ҡыҙҙы Мусаға бирмәйҙәр. Икенсе ҡатыны Ғәйшә Малай Муйнаҡ ауылында имам-хәлфә булып эшләгән Әхмәт улы Яҡуптың ҡыҙы була. Муса Яҡуп хәҙрәт ҡыҙына өйләнгән осорҙа Ахун ауылына имам-хатип булып күскән була.

Мусаның ағаһы - Ғайса. Буласаҡ ахун. Рус-япон һуғышы батыры. Батшанан наградалары була. Башҡорт халҡына атаҡлы "Ғайса" йырын бүләк иткән кеше. Әммә Өфө фәлсәфиҙәре Ғайсаға "Илсе" исеме тағып ҡуя. Ул бер ҙә илсе булмаған. Полк муллаһы була ул. 1904-1905 йылдарҙа Порт-Артурҙы, Харбин һ.б. ҡалаларҙы оборонalauҙа ҡатнаша. Әле киң йәмәғәтселеккә билдәле булмаған йыр һүҙҙәре бихисап. Уның тураһында ла хәтирәләр әлегә тиклем халыҡ күңелендә һаҡлана. 1921 йылда тифтән үлә. Ҡәбере Иҫке Байрамғол - Әүеш - Әүлиә тау итәгендәге мәҙарлыҡта.

Ғайса ахундың оло улы Таяр. 1918 йылда башҡорт ғәскәрҙәрен төҙөүҙә ҡатнаша. Үҙен коммунист тип атап йөрөгән рус шовинисы Кәләс (русса Калачев булһа кәрәк) өйөнән саҡырып сығарып, Шәрип ауылында ҡапҡаһы төбөндә атып китә.

Ғайса ахундың икенсе улы Талха. Ҡаһирәлә уҡый. Һигеҙ-туғыҙ телдә ирекен һөйләшкән була. Милли-азатлыҡ хәрәкәтен ойоштороусыларҙың береһе. Әхмәтзәки Вәлидиҙең тоғро көрәштәше. Японияла Ҡорбанғәлиевтар менән бер осор бергә була. Аҙаҡ Ҡытайҙа йәшәй.

Ғайса ахундың ҡыҙы Талиба Ауырғазы районында мәғариф бүлеге мөдире, Бөтә Рәсәй ҡатын-ҡыҙҙар съезы делегаты була. Репрессиялар башланғас, 1937 йылда Урта Азияға китә.

Ғайса ахундың кесе ҡыҙы Таһира һуңғы йылдарғаса Ҡаҙағстанда йәшәне. Балалары әле лә Әүлиә тауына, Әүлиә шишмәһенә килеп йөрөйҙәр.

Ғөмүмән, Рәсүлевтарҙың шәжәрәһе бының менән генә сикләнмәй. Араларында төрлө һөнәр кешеләре бихисап.

Шулай итеп, Зәйнулла Рәсүлевты беҙ бөгөн дә Рәсәйҙәге мосолман йәмғиәтенең генә түгел, бөтә Ислам донъяһының мәшһүр заттарының иң олуғы, абруйлыһы, ғилемлеһе, бөйөк дин әһеле тип иҫкә алайыҡ.

Йөҙөп барған болотто бер урында тотоп булмай, әммә ул һәр саҡ беҙгә кире әйләнеп килеп, тағы ла оҙағыраҡ ултырып шифалы һыуын яуҙырып китһә, ер йәшәрер, рухиәтебеҙ яңырыр. Шуға өмөт итәйек.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**
**(Аҙағы. Башы 29-33-сө һандарҙа).**

АРХЕОЛОГ ТАБЫШЫ

# АКИНАК ҠЫЛЫСЫ

**Өфө фән һәм технологиялар университетының археологик экспедицияһы Баймаҡ районының Ишмөхәмәт ҡурғанында ҡаҙыныу эштәрен дауам итә.**



Сираттағы табыштары - акинак ҡылысы. Башҡортостан Республикаһының Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы буйынса идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, акинак ҡылысы менән ерләнгән яугир ҡәберен табыу - яңы асыш ул.

Акинак - сармат (скиф) ҡәүемдәренең ҡыҫҡа тимер ҡылысы. Ул беҙҙең эраға тиклемге VIII- VII быуаттарға ҡарай. "Ирәндек" тарихи-археологик ландшафт паркы етәксеһе Венер Нәбиев әйтеүенсә, барлыҡ артефакттар, шул иҫәптән һөйәк ҡалдыҡтары, тикшереүгә ебәреләсәк.

Ишмөхәмәт ҡурғанын ҡаҙығанда, шулай уҡ фараҙлауҙар буйынса, рухани йәки шаман ҡәбере асылған. Скиф ҡылысы ҡәберлектең иртә тимер быуатҡа ҡарауын күрһәтә. Археологтар экспедицияһы Ишмөхәмәт ҡурғанында ҡаҙыныу эштәрен дауам итә.

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# БАШҠОРТТАР

## Һөнәрсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Мурҙа талдан үрелгән һәм бер метр оҙонлоҡта, 50-60 сантиметр киңлектә булған. Тәүҙә дүртмөйөшлө йәки даға рәүешендә ҡыҫан (рам) бәйләнә, һуңынан уны тирәләп тал үрелә бара. Мурҙаға конус формаһындағы ауыҙ ҡуйыла **(һүрәт)**. Ҙур мурҙалар йылға



ағышы ыңғайына һыу төбөнә һалына, бәләкәйҙәре яр тирәһенәрәк урынлаштырыла. Йылға төбөнә ҡуйылғанын ҡаҙыҡ менән ныҡытып, өҫтөнә таш һалғандар. Әгәр мурҙаны күлгә ҡуйһалар, уның эсенә таш һалып ҡына һыуға төшөргәндәр. Йылғаларҙа мурҙаларҙың үҙен генә ҡуйғандар, ҡайһы бер осраҡтарҙа инде нәрәтә кеүек ике ҡыя забой ҡуйылған.

Ау йәки тоҡ ау башҡорттарҙа өс ҡулсаға, 80 сантимерлы ҡоршауға кейҙерелгән. Тел тип аталған эске бәләкәй ҡулса дүрт бау ярҙамында икенсе ҡулсаға бәйләнгән. Тоҡ ауыҙына ике яғынан ҡанат ныҡытылып ҡуйылған. Уларҙың һәр ҡайһыһы ике-өс таяҡ ярҙамында тарттырылған. Тоҡ ау биш ҡаҙыҡ ярҙамында урынлаштырылған: уларҙың береһе башҡа, икеһе - ҡанаттарҙың буш еренә, икеһе ҡабырғанан, ауға инеү урынында ҡуйыла. Бындай йылым өсөн ау 2 сантиметрлыҡ ячейкалар менән, тығыҙ итеп үрелә. Тоҡ ау йылғаға ла, аҡмаған һыу сығанаҡтарына ла ҡуйылған. Бигерәк тә уны Ағиҙел йылғаһы бассейнында ҡуйыу киң таралған булған. Һирәк-һаяҡ Урал арьяғы күлдәрендә лә осраған. Урал арьяғы күлдәрендә йышыраҡ битәл ҡуйғандар. Битәл, тоҡ ау кеүек уҡ эшләнә, әммә ике ҡаҙыҡ ярҙамында урынлаштырыла. Балыҡ тотоу ҡорамалдарынан башҡорттар бик йыш йөҙәп йөрөүсе (йөҙөү сараһы туҙҙан яһалған) һәм ҡоролоусы ау ҡулланған. Йөҙөүсе ауҙар күлдәргә, тымыҡ һыу сығанағына ҡуйылған. Уларға ауырлыҡ өсөн балыҡтан яндырылған таш тағылған. Оҙонлоҡтары - 25, киңлектәре 2 метрға еткән. Ау туҙы һәм ау ташы, атамаларынан күренеүенсә, бары тик туҙҙан һәм таштан булған, тигән күҙаллау тыуҙыра.

Башҡорттар араһында шулай уҡ балыҡты йылым менән һөҙөп тотоу ысулы ла киң таралған.

Балыҡты ауға ҡыуып индереү бик һирәк ҡулланылған. Шулай уҡ балыҡ тотоу ҡорамалдарынан мәҫкәү һәм һөҙгөс булған. Мәҫкәү ҡулайламаһы бик ябай. Метр оҙонлоғондағы, осонда сатаһы булған һайғау алына. Сат аҫтына ат ҡылынан үрелгән бау тоҡаның бер осо ныҡытып бәйләнә, икенсе, азат осо саттың береһенә **һүрәттәгесә** ныҡытыла. Балыҡсы тыныс ҡына ятҡан балыҡты табып, уның аҫтына тоҡанды һала һәм кинәт тартып, балыҡты ярға ырғыта. Мәҫкәүләп балыҡ тотоу өсөн һыу үтә күренмәле булырға тейеш. Шуға күрә уны йышыраҡ тау башҡорттарында осратырға мөмкин. Улар шулай итеп бағры балығын тотҡан. Күлдәрҙә шүкәләрҙе мәҫкәүләгәндәр.



**(Дауамы бар).**

✓ *Күнекмәләр ҙә, ярыштар ҙа һинең ысынбарлыҡҡа, тормошҡа әҙерлек кенә. Йәғни, был ғәмәлдәрең үҙмаҡсат түгел. Шуға күрә, үҙем дә тренер булараҡ күнекмәләр үткәргәндә спортта ҙур еңеүҙәргә өлгәшеүҙе маҡсат итеп ҡуймайым.*



КискеӨфө

# ЕҢЕҮЕҢ ДӘ, ЕҢЕЛЕҮЕҢ ДӘ

## һабаҡ булып ҡына

**Үткән быуаттың 90-сы йылдары илебеҙ үҫмерҙәре һәм йәштәре өсөн сит ил фильмдары аша килеп ингән Брюс Ли феномены менән иҫтәлекле булғандыр. Күп кенә үҫмерҙәр һәм йәштәр ашығыс рәүештә асылған каратэ, айкидо секцияларына йөрөй башланы, һәр кем бер кемдән дә еңелмәгән экран геройына тиңләшергә тырышты.**
**Өфө ҡалаһында ла барлыҡҡа килде ундай секциялар. Беҙҙең иғтибар үҙәгендә бигерәк тә шул секцияларҙа шөғөлләнеп, уңыштарға өлгәшкән башҡорт йәштәре торҙо. Улар араһында Әбйәлил егете Рушан Хәсәнов та бар ине. Уның хаҡында шундай легендалар йөрөнө: "Рушан Бейеш атлы улын да күнекмәләргә алып йөрөй икән, шундай-шундай ярышта шул-шул спортсының ауыҙын ҡайырған һ.б."**
**Этноспортта, атап әйткәндә, һыбай уҡ атыу буйынса Бөтә донъя, Рәсәй, төбәк-ара, Башҡортостан ярыштарында алдынғылыҡты бирмәгән, йышыраҡ Гран-приҙарға эйә булған Рушан менән әле килеп осрашҡас, 90-сы йылдарҙағы Рушан менән хәҙерге Рушан араһында бер генә айырманы ла күрмәнем: шулай уҡ ас яңаҡлы, ҡатҡыл баҙыҡ кәүҙәле, ҡараштары ут сәсеп тора. Уның өс тиҫтәнән ашыу йыл һуҙымында һаман да йәш килеш һаҡланыуының сере, әлбиттә, туҡтауһыҙ күнекмәләр үткәреүҙән ғәйре рух ныҡлығына ҡайтып ҡала.**
**Уның менән әңгәмәне тап шул туҡһанынсы йылдарҙы иҫкә төшөрөүҙән башлап ебәрҙек.**

**▸ Рушан, үткән быуаттың 90-сы йылдарында беҙ һине көнсығыш ҡул алышы төрҙәрен яҡшы белгән, был йәһәттән ҙур ғына уңыштарға өлгәшкән спортсы итеп белә инек. Нисек спортсы булып киттең, кемдәр быға булышлыҡ итте? Әллә Брюс Ли, Чак Норрис ҡатнашлығындағы фильмдарҙың йоғонтоһо булдымы?**

- Дөрөҫ, ҡул һуғышы тураһындағы Брюс Ли, Ван Дам, Джеки Чан, Чак Норрис ҡатнашлығындағы сит ил фильмдары ҡарау тәүге этәргес биргәндер. Әсәйем йә атайым Өфөгә, Магнитка барһалар, шул геройҙарҙың фотоларын алып ҡайта инеләр. Мәктәптә уҡығанда өлкән ағайҙарҙың ҡулъяҙма дәфтәрҙәре була торғайны. Унда каратэ китаптарынан күсермәләр төшөрөлгәйне, төрлө алымдарҙың тәфсирҙәре, аңлатмалары яҙылғайны. Уларҙы үҙебеҙгә күсереп алып, үҙебеҙсә күнекмәләр үткәреп, хыяллана торғайныҡ. Ишҡол урта мәктәбендә спорт яҡшы ҡуйылғайны, шунда көрәшкә йөрөнөм. Һауа десантсыһы Фәйезйән ағай беҙҙе көрәш менән бер рәттә, әҙмәҙ булһа ла ҡул һуғышы алымдарына ла өйрәтте. Тәпән ауылында шулай уҡ Хәйҙәр ағай Мортазин көрәш алып барҙы. Бер аҙ уға йөрөп алдыҡ. Ә инде әрменән ҡайты, БДУ-ға уҡырға ингәс кенә етди рәүештә шөғөлләнеп, ярыштарҙа ҡатнаша башланым.

**▸ Әрме шундай урын бит инде, унда мөнәсәбәттәр үтә ҡатҡыл һәм тығыҙ, ҡул һуғышы менән шөғөлләнеүең унда ярҙам иттеме?**

- Эйе, әрме шундай урын, әммә мин хеҙмәт иткән ғәскәр төрө уны талап итмәне.

**▸ Ә былай тормошта үҙеңде һәм башҡаларҙы яҡлап хулигандарға ҡаршы торорға тура килмәнеме?**

- Күп булды тип әйтә алмайым, үкенескә ҡаршы, булды. Ундай осраҡтарҙы бер ҡулдың бармаҡтары менән генә һанарлыҡ. Был тағы ла үҙеңдең ниндәй тормош алып барыуыңа ла бәйле. Әгәр ҙә һин шундай осраҡтар була торған урындарға йыш йөрөйһөң икән, ундай ваҡиғалар күберәк тә булыр ине.

**▸ Әгәр ҙә шул ваҡиғаларҙың береһен генә иҫкә төшөрһәк...**

- Йәштәр бульварында дөйөм ятаҡта йәшәгәндә кухняла бер әҙәм тәмәке тартып ултыра ине. Тегене иҫкәрткәйнем, ул мине "алыҫҡараҡ ебәрҙе" бит инде. Тынысландырырға тура килде тегене. Урамда һуғышып йөрөгән кеше булһам, уны бер һуғыуҙа ауҙара инем, шуға күрә уға төрлө алымдарҙы күрһәттем. Һуңғы сиктә коридорға тибеп осорғайным, егеттәр уны тиҙерәк алып китә һалдылар.

**▸ Ниндәй ярыштарҙа ҡатнашып еңгәнең йә еңелгәнең булды?**

- 1995 йылда ныҡлап шөғөлләнә башланым. Университетта уҡығанда ниндзя түңәрәгенә йөрөнөм. Шунда бер ағай Ҡытайҙан бер мастер килеүен хәбәр итте. Киттем ҡытай мастерына. Ул зал Ушу буйынса федерация президенты Ирек Зариповтыҡы ине. Теге ҡытай мастерын Ирек Зарипов семинар үткәрергә саҡырған булған. Шунда оҫталыҡ дәрестәренә йөрөп алғас, тегеләр мине ҡул һуғышы ярышына сығарҙылар. Баҡтиһән, ҡул һуғышы менән ниндзяның һуғышыу кимәле төрлөсәрәк икән. Унда минә ҡаршы Эске эштәр министрлығы мәктәбенән спорт мастеры кандидаты сыҡты. Шарт-шорт туҡмалдым да, аҙаҡ Ришат Шәймәрҙәновта күнекмәләр үтеп, 1996 йылда киләһе йәштәр ярышында еңеп сыҡтым. Артабан еңеүҙәр-еңелеүҙәр төрлөсә, алмаш-тилмәш килде инде. Республика кимәлендәге ярыштарҙа күберәк еңеүҙәр яуланым. Һуңынан кикбоксинг менән ҡыҙыҡһынып киттем. Кикбоксинг буйынса республикала еңеп сығып, Рәсәй кубогында ике тапҡыр чемпион булдым. Унда спорт мастерлығына кандидат исеме алдым. Спорт мастерына етеп булманы, сөнки бер һуғышта яурыным имгәнде. Аҙаҡҡы ярыштарҙа бер ҡулымды бәйләп һуғыша торғайным.

**▸ Университетта уҡып алған белемең буйынса ниндәй белгесһең?**

- Тарих факультетын тамамланым. Тренер булып эшләй башлағас, икенсе дипломым буйынса физкультура уҡытыусыһымын. Арғаяш яғынан Рөстәм Шәрипов атлы көрәшсе егет бар. Университетта бер командала ҡатнашып йөрөнөк. Бер заман уның менән осрашып һөйләшеп киттек. Ул, нисектер, Өфөлә һатып алған фатиры хаҡында әйтеп ысҡындырҙы. Быға нисек өлгәшеүе хаҡында һорашҡайным: "Мин иҡтисад факультетында уҡыным бит", - ти теге. "Мин ни, тарих факультетында уҡығас, һаман атта сабып, уҡ атып йөрөйөм", - тип көлдөрҙөм.

**▸ Атайың һөнәре буйынса кем ине? Һинә ул ниндәй тормош һабағы бирҙе?**

- Тәпән фермаһында ферма мөдире, зоотехник булып эшләне, уның менән бергә һарыҡ та көттөк. Бик иртә, 52 йәшендә генә китте донъялыҡтан. Үкенескә күрә, унан ҙур ғына фәһем алып өлгөрмәнем. Кешелекле булды, ҡайҙа ғына барма, Фуаттың улыһыңмы, тип танып торалар. Һуңғы юлға оҙатҡанда ла кеше күп килде.

**▸ Ярыштарҙа еңеү шатлыҡ алып килә, һис һүҙһеҙ, ә бына еңелеүҙең ниндәй ыңғай яҡтары бар? Бер көрәшсе, еңелеү артабан еңелмәҫкә өйрәтә, тигәйне. Был, ысынлап та, шулаймы?**

- Еңеү-еңелеүең ярышҡа ниндәй әҙерлек менән барыуыңа ла бәйле. Әйтәйек, һине көтмәгәндә ҡапыл ниндәйҙер ярышҡа алып киттеләр икән, ти. Унда барып ҡатнашаһың, ҡатнашты, тигән билдә алаһың. Был осраҡта еңелеүең әллә ни сәмгә теймәй. Элек мин ҡул һуғышы буйынса барлыҡ ярыштарҙы ла күнекмәләрҙең бер өлөшө тип һанай торғайным. Ул осраҡта еңеүең дә, еңелеүең дә һабаҡ, дәрес булып ҡына ҡабул ителә. Дөйөм алғанда, күнекмәләр ҙә, ярыштар ҙа һинең ысынбарлыҡҡа, тормошҡа әҙерлек кенә. Йәғни, был ғәмәлдәрең үҙмаҡсат түгел. Шуға күрә, үҙем дә тренер булараҡ күнекмәләр үткәргәндә спортта ҙур еңеүҙәргә өлгәшеүҙе маҡсат итеп ҡуймайым. Иң мөһиме, үҙебеҙҙең егеттәр тормошҡа әҙер булһын! Үҙемде лә ныҡ азартҡа бирелгән спортсы тип һанамайым. Шулай ҙа алдараҡ өлгәшкән уңыштарҙан түбәнерәк төшһәң, кәйеф ҡырылып киткән саҡтар ҙа булмай түгел, була.

**▸ Әүҙем тормошоңдоң икенсе өлөшө ат менән бәйле. Ат һинең өсөн нимә ул?**

- Тәүҙә ат тормошомдоң төп өлөшөндә хыял ғына булып торҙо. Бәләкәй саҡта атайҙың аты менән көтөү артынан эйәреп, һабантуйҙарҙа сабышып йөрөгәс, ғүмеремдең икенсе өлөшөндә лә ат тоғро дуҫым булырға тейеш ине. Әммә бының өсөн байтаҡ йылдар талап ителде.

Ат башҡорт өсөн азатлыҡ символы ла. Илдар ағай Шәйәхмәтовтың ат тураһындағы әңгәмәләрен тыңлап, ат тураһында шиғырҙар уҡый торғас, тормошомдоң икенсе өлөшөндә лә атлы булыу хыялым тормошҡа ашты. 2018 йылда ат алып, уны Өфөгә алып килдем. Әле атыма һигеҙ йәш.

2016 йылда уҡ Юлай Ғәлиуллиндар менән бергә уҡ атыу менән шөғөлләнә башланыҡ. Рафаэль ағай Амантаев минең беренсе уҡытыусым булды. Тәүге янымды ла унан һатып алдым. Шул уҡ йылда көҙгә Ҡырғыҙстанға күсмәндәр уйындарында ҡатнашырға барҙыҡ. Һыбай сабып барған килеш уҡ атыу буйынса күнекмәләр ваҡытында атып ҡарағайныҡ, килеп сыҡманы, дөрөҫөрәге, сәпкә тейгеҙеп булманы. Башҡаларҙың нисек атҡанын ҡарап торҙоҡ та, Юлай: "Әйҙә, ҡатнашмай торайыҡ, беҙ үҙебеҙҙе түгел, башҡорттарҙы оятҡа ҡалдырабыҙ", - тине. Шунан ҡайтҡас, ныҡлап шөғөлләнә башланыҡ. Тәүҙә төрлө клубтарҙың аттарын арендаға алып, күнекмәләр үткәргәс, үҙем ат һатып алырға булдым. Үҙеңдең өйрәнгән атыңа бер ат та етмәй бит инде.

**▸ Атыңды ҡайҙа тотаһың инде?**

- Уныһы айырым ҙур проблема инде. Өфөгә алып килгәндән алып уны ҡайҙа ғына тотманым, алты-ете урын алмаштырғанмындыр. Атым йыуаш түгел, ҡоймаларҙы емереп сығып, башҡа айғырҙар менән дә һуғышып бөттө. Бер мал бәйләп ҡуйған арҡаны өҙөлөп китеп, ҡайҙалыр китеп юғалып торҙо. Аҙна буйы Өфө эргәһендә эҙләп йөрөп, Русский Юрмаштан барып табып алдым. Бер ай буйы атым менән баҡсала йәшәп алдым. Уға тюклы бесән һатып алып, шул бесән өҫтөндә йоҡлап йөрөргә лә тура килде. Күпте күрелде инде Алабай менән бергә. Бер йыл буйына "Аҡбуҙат" ипподромында торҙо атым. 1 августан унда минең вазифамды ҡыҫҡарттылар, унан атым менән бергә сығып китергә тура килде.

**▸ Атыңа нисек бесән әҙерләйһең?**

- Бесән мәсьәләһе әллә ни ҡыйынлыҡ тыуҙырмай. Рулондар менән һатып алып ҡуям.

**▸ Өфөнән алыҫ урындарҙа үткән ярыштарға атыңды нисек алып бараһың?**

- Үтә алыҫ урындарға атымды алып йөрөмәйем. Ул миңә күберәк бында күнекмәләр үткәрер өсөн кәрәк. Ә ярыш булған урындарҙа ойоштороусылар аттарҙы әҙерләп ҡуя. Ярыштан бер көн алда барып, күмәгеһенең араһынан күңелеңә оҡшағанын һайлап алаһың инде. Ат өсөн аренда хаҡын түләргә тура килә. Екатеринбургтағы ярыштарҙа беҙ дүрт йыл элек ҡатнаштыҡ. Унда тәүге көндә аттарҙы һыбай йөрөргә өйрәтеп алырға тура килә, сөнки бер тапҡыр ҙа һыбай уҡ атыуҙа ҡатнашмаған аттарҙы тәҡдим итәләр унда.

**▸ Һин яңыраҡ Екатеринбургта үткән ярышта еңеп ҡайттың. Сабып барған килеш сәпкә атыу өсөн айырым оҫталыҡ талап ителәләр, күрәһең. Бының серҙәре бармы? Нимә генә тимә, сабып барғанда ат алға ла табан бара, аҫҡа-өҫкә табан да хәрәкәт итә. Шул уҡ ваҡытта елде лә иҫәпкә алырға тейешһең...**

- Ат дүрт аяғы менән дә һауала саҡта атырға кәрәк, тигән теория бар. Әммә мин уны әллә ни дөрөҫ тип һанамайым, сөнки сәпкә атыр өсөн иң уңайлы урында атыңдың һауала булмауы ла бар бит. Ат шәп сапһа, уның аҫҡа-өҫкә хәрәкәте тигеҙерәк, шуға күрә атыңдың сабыу тиҙлеге иң юғары булған саҡта тиҙерәк атып өлгөрөргә кәрәк. Сағыштырыу өсөн: машина менән ни тиклем шәберәк барһаң, уның подвескаһы бер кимәлдә тигеҙ бара, ә инде тиҙлекте әкренәйтһәң, машинаң аҫҡа-өҫкә һикерә башлай. Норма буйынса 90 метрҙы 14 секундта үтергә кәрәк. Әгәр ҙә ул арауыҡты 10 секундта үтәһең икән, артып ҡалған 4 секунд һинең балдарыңа ҡушыла. Әгәрҙә 15 секундта үтһәң, минус 1, 16-ла үтһәң, минус 2 китә. Ҡаҙағстанға былтыр күсмәндәр уйынына барғанда минең мәрәйҙәр иң күбе булды, әммә аттың тиҙлеге етмәү сәбәпле, бер маршрутта 5-се булдым.

Сабып барғанда сәпкә атыу урындан тороп атыуҙан ныҡ айырыла. Сабып барғанда интуиция ярҙамында төҫмөрләп атыуы иң уңышлыһы.

**▸ Беҙҙең башҡорт тоҡомло аттар башҡа аттарҙан ниндәй сифаттары буйынса айырыла тип уйлайһың?**

- Был турала күп һөйләнгән, яҙылған инде, минеңсә, беҙҙең аттар сыҙамлыраҡ. Оҙон тороҡло тоҡом аттары саҡ ҡына бер нәмә булһа, стресҡа бирелеп барыусан, хужалары был осраҡта эргәләрендә йүгермәләп йөрөргә мәжбүр. Ипподромда башҡорт аттарын икенсе урынға күсерергә тейештәр ине. Шунда береһен тейәй алманы-

**✓ *Әлбиттә, ҡул һуғышы менән шөғөлләнеү кешегә үҙ-үҙенә ышаныу көсө бирәлер инде. Әммә беренсе сиратта кешенең холҡо торалыр. Беҙҙең тән ҡорал ғына, ә төп көс эсебеҙҙә, булмышыбыҙҙа, ул көс рух тип атала.***



# ЕҢЕЛЕҮЕҢ ДӘ...
## ҡабул итеlә

лар. Ҡыуып та, һуғып та ҡарайҙар, укол да һалдылар, хәле бөттө, әммә борт янына барырға теләмәй. Бындай осраҡта башҡа аттар ашамайынса, оҙаҡ ваҡыт стресс кисереп йөрөр ине. Ә был ат иртәгәһенә, бер ни булмағандай, ашап тора. Мин уны менеп, күнекмә лә үттем.

**Атлы спорт менән шөғөлләнә башлағас, ҡул һуғышына бәйле спортты ҡалдырырға тура килдеме?**

- Бик урынлы һорау. Күпмелер ваҡыт был ике шөғөлдө йәнәшә алып килдем. Егеттәргә күнекмәләр үткәргән саҡта шуның араһында үҙем уҡ ата торғайным. Йәки иртәрәк килеп, егеттәр килеп еткәнсе уҡ ата торам. Яйлап тәүге шөғөлөм артта тороп ҡалды. Ҡул һуғышы буйынса күнекмәләрҙе туҡтатҡанға өс йыл самаһы ваҡыт үтте. Әммә форманы тотор өсөн шөғөлләнәм, ниндәй генә спорт төрө булмаһын, физик күнекмәләр беренсе урында тора.

**Көслөгә һыйыналар. Һинең көслө икәнлегеңде туғандарың, дуҫтарың, ауылдаштарың, күршеләрең белә. Көслө кеше булыуы ауыр түгелме? Сөнки төрлө ситуацияларҙа кешеләр һинән ярҙам көтә...**

- Үҙемде көслөмөн тип иҫәпләмәйем. Барыһы ла маҡсатҡа бәйле, нимә өсөн мин, әйтәйек, каратэ менән шөғөлләндем, аҙаҡтан яндан уҡ ата башланым. Ысынлап та, көслө кешеләр көслө булыуҙы маҡсат итеп ҡуймайҙыр ул. Улар фәҡәт көслө генә.

**Әммә көслө кеше булыуҙың яуаплылығы ла барҙыр. Һин теләйһеңме-юҡмы, үҙҙәрен үҙҙәре яҡлай алмаған кешеләр алдында яуаплылығың да барлыҡҡа килә бит. Шулай түгелме?**

- Ундай саҡтар ҙа булып алды. Мөрәжәғәт иткәндәргә ярҙам итеп, бергилке йөрөп алынғайны.

**Миңә айкидо оҡшай, унда дошмандың көсөн үҙенә ҡаршы йүнәлтеү мөмкинлеге бар. Һин был алыш төрөнөң философияһын нимәлә күрәһең?**

- Философияһы ҡыҙыҡ, әлбиттә. Әммә Стивен Сигалдыҡы һымаҡ кәүҙәң булһа, һәр төрлө спорт төрөндә лә еңеүгә өлгәшеп булалыр.

**Һин яндырай түгелһең, һалҡын ҡанлы була алыуың ҡайҙан килә, үҙ көсөңә ышаныуҙанмы, әллә башҡа төрлө сәбәптәнме?**

- Әлбиттә, ҡул һуғышы менән шөғөлләнеү кешегә үҙ-үҙенә ышаныу көсө бирәлер инде. Әммә беренсе сиратта кешенең холҡо торалыр. Беҙҙең тән ҡорал ғына, ә төп көс эсебеҙҙә, булмышыбыҙҙа, ул көс рух тип атала. Шул төп көсөбөҙҙө үткер килеш тотоу зарури.

**Ҡул һуғышы буйынса күнекмәләргә һин Бейеш улыңды ла эйәртеп йөрөй торғайның, ул спорт юлын һайламанымы?**

- Уны төрлө ярыштарға байтаҡ ҡына алып йөрөргә тура килде. Әммә ул йәшерәк сағында уҡ күнекмәләрҙе ташланы. Хәҙер өйләнде, Өфөлә йәшәйҙәр.

**Көнсығыш һуғыш төрҙәренән этно спорт төрөнә күсеү ауыр булманымы?**

- Бала саҡта башына сөй ҡуйылған уҡтар менән атышыу дәрте бала саҡтың үҙе кеүек тиҙ генә үтә. Ә минеке үтмәне. Каникулдарҙа, студент саҡта ла йәй ауылға ҡайтһам, һәр ваҡыт ян эшләп, уҡ юна торғайным. Уҡ-яныма ниндәйҙер технологиялар уйлап сығарып, камиллаштырып маташтым. Күрше ағай күреп ҡалды ла: "Мине лә уҡ атып йөрөгәндә тотоп алып, әрмегә алып киткәйнеләр", - ти.

Шуға күрә этноспортҡа ҡараш үҙгәргәс, уға күсеп китеүе миңә ауыр булманы.

**"Башҡорт аты" фестивалендә, уҡ атыуҙан тыш, тағы ла ниндәй ярыштарҙа ҡатнашҡаның булды?**

- Былтыр яугир кейеме әҙерләү буйынса ярышта ҡатнаштым. Унда Алтын Урҙа дәүеренең яу кейемен, атап әйткәндә, һайман менән торҡа әҙерләнем.

**Брюс Лиға мөнәсәбәтең нисек, ул, ысынлап та, шундай оҫта булғанмы, әллә киноиндустрия уны барлыҡҡа килтергәнме?**

- Ул легенда булып ҡалды. Брюс Ли - эпоха, көнсығыш менән көньяҡты ҡушыу тап унан башланды. Уның һуғышыу оҫталығын бер нисек тә инҡар итә алмайбыҙ. Ул актер ғына түгел, уның хаҡында Арнольд Шварцнегер: "Был иң көслө кеше!" - тигән. Ван Дамға килгәндә, ул күберәк актер.

**Һин үҙең өлгәшкән уңыштарың нигеҙендә ниндәйҙер мәктәп асырға уйламайһыңмы? Әйтәйек, социаль селтәрҙәр, интернет аша...**

- Ундай ынтылышты, ихтыяжды үҙемдә күрмәйем. Бәлки, бының өсөн педагог һәләте лә кәрәктер. Ҡул һуғышынан күнекмәләр алып барғанда мин параллель рәүештә юғары уҡыу йортонда студенттар менән, мәктәптә балалар менән дә эшләй торғайным. Әммә балалар менән эшләүе бик ауыр бирелде. Ни өсөн тигәндә, балаларҙы спортҡа ылыҡтырыу менән бер рәттән, уларға дөрөҫ тәрбиә лә бирергә тейешһең.

**Рәсәй Президенты Өфөгә килгәнендә биргән интервьюһында Рәсәй армияһының башҡорт яугиры феномены хаҡында әйтеп үткәйне. Тарихсы булараҡ, спортсы, еңеүсе булараҡ, ҡаҡшамаҫ рухыбыҙҙың нигеҙҙәрен нимәлә күрәһең?**

- Борон-борондан барлыҡ ҡәүемдәр араһында төркиҙәр иң көслөһө һаналған. Шул уҡ ваҡытта төркиҙәр араһынан иң ғәйрәтлеһе итеп башҡорттарҙы таныған яҙмалар ҙа бар. Бындай аңлатмаларҙы тарих биттәренән бик күп табырға мөмкин булыр ине.

**Янды, уҡтарыңды, башҡа кәрәй-яраҡты үҙең эшләп алаһыңмы?**

- Юҡ, әҙерҙәрен һатып алам. Башлаған осорҙа үҙем эшләп ҡарағаным булды. Уҡтарҙы бамбуктарҙан яһаным. Әле килеп ваҡытымды күберәк күнекмәләргә бүләм. Һаҙаҡты үҙем эшләйем, сөнки һыбай уҡ атыр өсөн үҙенсәлекле һаҙаҡ кәрәк.

**Һин уйлап тапҡан "Башҡорт маршруты"ның үҙенсәлеге нимәгә ҡайтып ҡала?**

- Донъяла киң таралған ике төрлө маршрут бар: корея һәм венгр маршруттары. Корея маршрутында сабып барғанда ҡуйылған сәптәргә бер-бер артлы атаһың. Венгр маршрутында старттан уҡ ата башларға мөмкинһең. Яның көсһөҙөрәк икән, сәптән өҫкәрәк атаһың. Ҡайһы берәүҙәр ете тапҡыр атып өлгөрә. Мин алты тапҡыр атып өлгөрәм, әммә бөтәһе лә теймәй.

Мин үҙем "Төньяҡ амуры" тип аталған Башҡорт маршрутын уйлап сығарҙым. Ул үҙенсә ҡатмарлы. Тәүҙә бер яҡҡа атаһың да, тиҙ-тиҙ генә икенсе яҡтағы сәпкә атаһың. Өсөнсө уҡты сабып барған килеш ерҙән эйелеп алып атырға кәрәк. Француз яуында Аҡсулпанов тигән яугир сит ил ҡунағы алдында тап шулай итеп өс уҡты атып күрһәткән. Ул сабып барған килеш һауаға йомортҡа ташлап, уны яра атҡан да, бер уғын һауаға ташлап, икенсе уғын эйелеп алып, уғын сәрпелдереп яра атҡан.

**Һин күсмә халыҡтар уйындарында ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, ҡалмыҡ, бүрәт егеттәре менән аралашаһың бит инде. Уларҙың әҙерлеге ниндәй кимәлдә?**

- Ҡаҙаҡтар һәр ваҡыт ныҡлы әҙерлек менән килә. Улар 2016 йылда яҡынса беҙҙең һымаҡ кимәлдә аталар ине. Дәүләт яғынан да көслө ярҙам булғас, улар тағы ла етдиерәк әҙерләнә башланы. Йыйылма командала ҡатнашыусылар унда стипендия алып, был уйындарҙы профессиональ кимәлгә күтәрә алдылар. Беҙҙә иһә ундай ярҙам тойолмай. Былтыр сентябрь айында күсмә халыҡтар уйындарына беҙ үҙебеҙҙең иҫәпкә барҙыҡ, бер йыл үтеп китһә лә, һаман да сығымдарҙы ҡайтарманылар. Әле төп эш урыным таможняла, эш графигым ошондай ярыштарға йөрөргә мөмкинлек бирә, шул яғы уңайлы. Башҡа урында эшләгән булһам, улай итеп йөрөй ҙә алмаҫ инем. Беҙҙә һыбай уҡ атыу менән, кемдең аты бар, энтузиастар ғына шөғөлләнә. Ундай егеттәр Учалыла, Баймаҡта, Ҡырмыҫҡалыла бар. Яңыраҡ Әбйәлилдә Хәйруллин Нуриман тигән егет "Юрға" ат клубына директор итеп тәғәйенләнде һәм ул күнекмәләр башланы. Был тәүге рәсми клуб, башҡаларыбыҙ һәр ҡайһыһы үҙ урындарында шөғөлләнә.

**Ҡыҙыҡлы әңгәмәң өсөн оло рәхмәт, Рушан. Үҙеңә һүнмәҫ дәрт, рух ныҡлығы, ҡанатлы дуҫың Алабайыңа талмаҫ аяҡтар, оло еңеүҙәр теләйем!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.**



***Мин үҙем "Төньяҡ амуры" тип аталған Башҡорт маршрутын уйлап сығарҙым. Ул үҙенсә ҡатмарлы. Тәүҙә бер яҡҡа атаһың да, тиҙ-тиҙ генә икенсе яҡтағы сәпкә атаһың. Өсөнсө уҡты сабып барған килеш ерҙән эйелеп алып атырға кәрәк. Француз яуында Аҡсулпанов тигән яугир сит ил ҡунағы алдында тап шулай итеп өс уҡты атып күрһәткән. Ул сабып барған килеш һауаға йомортҡа ташлап, уны яра атҡан да, бер уғын һауаға ташлап, икенсе уғын эйелеп алып, уғын сәрпелдереп яра атҡан.***




Мөнир менән дуҫлашып киткәс, Илназды алмаштырып ҡуйҙылармы ни! Тағы ике генә көн бойоғоп, уйсан йөрөнө лә, бер ни булмағандай, башҡа балаларға ҡушылып китте. Өйҙә ашаталар, кейендерәләр, йыуындыралар, йоҡларға һалалар, ҡолап китмәһен, өшөп ҡуймаһын, машина юлына сығып китмәһен, яман кешеләргә юлыҡмаһын, тип һәр аҙымын күҙәтеп торалар. Берәй ҡурҡыныс янай ҡалһа, шул мәлендә ярҙамға ташланырға әҙерҙәр. Бында башҡасараҡ. Сыр-сыу килгән бер өйөр балаға - бер тәрбиәсе апай. Саҡ ҡына ауыҙыңды асып торһаң, төртөп йығып китәләр, әйберендән ҡолаҡ ҡағаһың, ризығыңды уртаҡлашалар. Өҙләкһеҙ көрәш һәм талаш-тартыш майҙаны ине балалар шифаханаһының һәр мөйөшө.

Арҡаһына ҡаты төрткәнгә Илназ йығылып китә яҙҙы, ләкин ҡоламаны. Был ни булды, тип аптыраны тәүҙә. Кеше улайтып уйнамай ҙа баһа. Аҡъярҙа балалар баҡсаһында төртөшмәйҙәр улай. Етмәһә, арттан йәшенеп этеп ебәрҙеләр. Әйләнеп ҡараны. Кәүҙәгә ҙурыраҡ малай телен күрһәтеп: "Бә-ә-ә", - тине лә, йүгереп китте. Илназ, йоҙроҡ күрһәтергә лә онотоп, аптырап тороп ҡалды. Ашағанда компотын урланылар. Ҡалағы төшөп киткәс, өҫтәл аҫтына эйелгәйне, турайып ултырыуына компоты юҡ ине. Тағы аптыраны Илназ.

Атаһы алып килгән машина менән уйнап ултыра ине - Тамара Петровна, атайың алып килде, тине (ул апайҙарҙың исемдәрен дә белә хәҙер) - эргәһенә бер өйөр малай килеп баҫты.

- Һин минең машинамды урлағанһың, малайка, - тине кәүҙәгә ҙурырағы. Илназдың русса насар һөйләшеүенә ҡарап, "малайка" тине, күрәһең.

- Мая масина, - тип Илназ үҙенең мөлкәтен ҡурсалап алып ҡалырға әҙерләнде.

Машинаны бер ҡулы менән артына йәшерҙе, икенсеһен йоҙроҡҡа төйнәне.

- Минеке, әйт Вовка, - мәкерле план менән килгәйне былар.

- Эйе, һинеке, Толик, - тине лә Вовка башын эйҙе.

- Мая, - уйынсығын тоттороп ебәрергә Илназдың бер ҙә теләге юҡ.

Толик уға яҡыная башланы. Башҡалар ҙа артынан эйәрҙе. Көстәр нисбәте Илназ иҫәбенә түгел. Шулай ҙа ул көрәшһеҙ баш һалырға уйламай. Тигеҙ булмаған ике көстөң ҡаршы тороуы күпмегә һуҙылғандыр, бер мәл хәл ҡапыл үҙгәрҙе - Илназ менән Толиктың араһына Мөнир килеп баҫты.

- Ша, шалава, - тине ул булдыра алғанса уҫал итеп.

Яңы ғына Илназдың өҫтөнә менеп килгән малайҙарҙы алмаштырҙылармы ни - ғәйепле йылмайып, тырым-тырағай таралышып юҡ булдылар.

- Мунька, әллә волшебный һүҙ беләһеңме? - тип аптыраны Илназ.

- Старшактан өйрәндем. Ул шулай әйтһә, беҙ детдомда вис ҡасып бөтәбеҙ, - тине дуҫын ҡотҡарып алып ҡалыуына ҡыуанған Мөнир.

Мунька-Мөнир - балалар йортонан. Малай әсәһен дә, атаһын да белмәй, уларҙы күргәне лә юҡ. Уны бала табыу йортонда ҡалдырып киткәндәр. Биш йәше әллә ҡасан тулһа ла, кәүҙәгә Илназ самаһы ғына. Уның ҡарауы, теремек, телдәр, йылғыр. Уларҙы, бер төркөм детдом балаларын, шифаханаға бер ай элек алып килгәйнеләр. Тағы ла ике ай дауаланырға тейештәр.

* * *

Шундай текә дуҫы булғас, Илназды башҡаса туранан-тура йәберләргә теләүсе табылманы. Тик әсәһе менән атаһы ҡуйынында һөйөлөп кенә үҫкән бала был стихияла үҙе аҙым һайын абынды. Йә кейемендә буталды, йә йыуына алмай ҡаңғырҙы. Йәһәт ҡыланырға, барыһына өлгөрөргә кәрәк - ул аҙапланғансы, башҡалар өлөштөн ҙурырағын эләктереп тә ала. Уйынсыҡтың - ватылғаны, ултырғыстың - тояҡһыҙы, икмәктең - ҡайырыһы, компоттың яртыһы эселгәне эләгә. Һәр саҡ эргәһендә Мөнир дуҫы булмаһа, ул бөтөнләй харап булыр ине.

- Мунька, мине шәп эшләргә өйрәт әле, йәме. Ыштанды ла кейеп булмай ҙа ҡуя, күлмәкте лә. - Холҡонда лидерлыҡ һыҙаттары ярылып ятҡан Илназ үҙенең әлеге хәле менән бер ҙә ҡәнәғәт түгел. Уға арттан түгел, алдан йөрөргә кәрәк!

- Һин үҙең кейемеңде вис сисеп ятаһың бит. Улай итмә. Күлдәгеңде сисмә, ә ыштаныңдың балаҡтарын ултырғысҡа тигеҙләп һал. Йоҡлап торғас, бутамай ғына ике аяғыңды бер юлы тыҡ та ҡуй. Тиҙ кейенеп алһаң, теүәлиткә лә, йыуынырға ла алдан өлгөрәһең. Торорға әйтһәләр, һин ятаһың ҡыҙҙар шикелле һуҙылып. Тиҙ генә тор ҙа кит, - тип балалар йортондағы ҡағиҙәләрҙе өйрәтте Мөнир.

Аҙна-ун көндән Илназ үҙен һыуҙағы балыҡтай иркен тоя башланы. Хәҙер ул балауыҙ һығып ултырған мәмәй малай түгел. Руссаны ла ярайһы ебәрә, бүре балаһылай һиҙгер - ҡайҙан, ниндәй ҡурҡыныс янағанын әллә ҡайҙан белеп тора. Малайҙарҙың атлап килеүенән, ҡарашынан, йылмайыуынан, уға табан ниндәй уй менән ыңғайлауҙарын алдан тойомлай. Ҡурҡыныс янағанын арҡаһы менән һиҙә хатта. Шуға уның өсөн көтөлмәгән хәлдәр һирәк хәҙер.

Үҙе белгәнсә, булдыра алғанса, атай-әсәй терәгенән башҡа йәшәргә өйрәнде. Уларҙы иҫенән дә сығарғандай хатта. Үҙенә терәклек өсөн мыҫҡалап киңлек яуланы. Бер мәл төндә уянып китте. Кемдер уға асыҡ итеп: "Әсәйең килгән, һине көтә", - тине. Илназ, йәһәтләп, йоҡлап ятҡан еренән торҙо ла, кейенеп, төнгө няня ултырған ишек яғына китте. Тоноҡ яҡтылыҡта ла аҡ халатлы ҡатын асыҡ күренеп ултыра.

- Ҡайҙа юл тоттоң, бәләкәс? - тине ул аптырап, кейенеп алған баланы күргәс.

- Миңә әсәйем килгән, - Илназ шат тауыш менән яуапланы.

- Кем әйтте? - Няня аптырауға ҡалды.

- Белмәйем кем әйткәнен. Ишеттем... Апай тауышын...

- Төш күргәнһеңдер, бәләкәс...

- Әтеү әсәйем килмәгәнме ни? - Бала иларға етеште.

- Кил әле, ултыр яныма... Мына кәнфит... Ашап ал, - төнгө няня болоҡһоп уянған баланы нисек тә тынысландырырға тырышты. - Исемең кем?

- Илназ... Ә һин, апай, юлыҡтағыса һөйләшәһең...

- Миңә Нурия апай тип өндәш. Юлыҡтағыса һөйләшеү нисек була ул?

- Мына мин өйҙәгесә һөйләшәм, Тамара Петровна - кинолағыса, ә һин - юлыҡтағыса.

- Татарса, тип әйткең киләме?

- Белмәйем. Юлыҡта өләсәйем йәшәй. Ул өйҙәгесә һөйләшә, ә Альмира апай, Ғәбдерәүеф бажа, урамдағы малайҙар - юлыҡтағыса.

- Башҡортса, русса, татарса була инде. Һин минең менән башҡортса һөйләшеп ултыраһың, - няня малайҙың тел өлкәһендәге "төплө" белеменә ихлас көлөп алды.

- Әлләсе...

- Һинең бажаң да бармы ни?

- Б-а-а-а-р... Нишләп булмаһын тей... Атайымдыҡы, минеке, ағайымдыҡы... Ғәбдерәүеф, ней, бажа инде беҙҙең, - Илназ няня апайҙың шуны ла белмәүенә ғәжәпләнде, ә ҡатын өсөн тағы көлөп алырға сәбәп булды.

Төшөндә күренгән әсәһе, күңелен ҡуҙғытып, оҙаҡ ҡына иҫенән сыҡманы Илназдың.

- Мунька, минең әсәйем үлгәндер ул... Шулай уйлайым... Минең өйҙән китеүемә миллион йыл үтте бит. Беҙ Өфөгә самалут менән осҡанда атайыма үҙенә дарыу алып ҡайтырға ҡушҡайны ул. Ауырығандыр ҙа үлгәндер... Кисә лә, килгән тиһәләр ҙә, килмәне, - карауаттары йәнәш булғас, башҡа баш терәшеп, йоҡоға китер алдынан улар төрлөсә һөйләшеп ята шулай.

- Белмәйем һуң... Әсәйең үлһә, детдомға алалар инде һине, - Мөнир үҙе белгәнсә теманы дауам итте.

- Атайым бар бит минең, шәт...

- Әсәй главней. Ул булмаһа, сразы детдомға эпкитәләр! Мин беләм! Сашканың, Гуньканың, Машканың аталары бар - үҙҙәре детдомда...

- Юҡ, детдомға бармайым, өйөмә ҡайтам барыбер... Атайым килеп алам тине.

- Әсәйҙәр нисек була, Илназик? - Мөнирҙең тауышы тулҡынланыуҙан ҡалтырай бирепсыҡты.

- Әсәйһеҙ ҡыйын... Әсәй матур була... Йомша-а-аҡ ҡына, йылы-ы-ы ғына... Шунан - гел ярата... - Илназ мышнап шымып ҡалды. Ул тағы ла үҙен үкһеҙ яңғыҙ, ташланған бәхетһеҙ бала итеп тойҙо.

- Илназик, илама, - Мөнирҙең ҡатҡан күңеле лә йомшарғайны.

- Ә мин әсәйемде гел көтәм. Килер ул... Илназик, килер микән?

- Бәлки, ул һине просто юғалтҡандыр? Табып алыр әле...

- Һинеке кеүек минең дә ағайым барҙыр, моғайын. Рәхәт булыр ине ағай менән икәүебеҙгә. Ә атай нисек була?

- Атай?.. Атай көслө була. Филде лә күтәрә ала. Ғәләмәт көслө була... Мине түбәгә тейгеҙгәнсә һикертә лә ҡуя... Шунан мыйығы була. Ошолай, - Илназ Чапайҙыҡынан да еллерәк мыйыҡ һыҙатын, ҡулын иркен ташлап, танауы аҫтынан йөрөтөп күрһәтте.

- Минең дә атайым бар микән? - Мөнирҙең тауышында өмөт сатҡылары салынды.

- Кешенең атаһы булырға тейеш, - малайҙар оҙаҡ тыныслана алманы.

* * *

Башҡа ваҡытта Мөнир Илназға яттан әкиәт һөйләй йә юрған аҫтына боҫоп, йыр йырлай. Илназ тәүҙә тыңлай ғына торған булды. Шунан йәйләп Мөнир артынан ҡабатлап, һүҙҙәрен отоп ала барҙы. Уйнағанда ла шыбырҙап ҡына ҡабатлап йөрөргә ғәҙәтләнде:

"Жили-были дед да баба.

И была у них Курочка Ряба.

Снесла курочка яичко, да не простое - золотое.

Дед бил, бил - не разбил.

Баба била, била - не разбила.

А мышка прибежала, хвостиком махнула, яичко упало и разбилось.

Плачет дед, плачет баба.

Курочка Ряба им говорит:

- Не плачь, дед, не плачь, баба: снесу вам новое яичко - не золотое, а простое!"

Пульмонология шифаханаһы булғас, ашау, йоҡлау, уйнауҙан тыш, балаларҙы төрлө һауыҡтырыу процедураларына йөрөтәләр, сыныҡтырыу күнекмәләре үткәрәләр. Көн режимы тығыҙ. Әйләнгән һайын "Төркөм, теҙелергә, биш минуттан процедураға" тигән командалар яңғырап ҡына тора. Иртәнге ашты ашап, саҡ ҡына уйнап алғайнылар, сираттағы бойороҡ ишетелде.

- Илназ, бында кил, - тауыш ишетеләр-ишетелмәҫ кенә ҡайҙандыр сыҡты. Мөнир үҙе күренмәне.

- Мунька, һин ҡайҙа ул? - Илназ, ғәжәпләнеп, тирә-яғына ҡараны.

- Аҫта, аҫта тейем... Түңҡайып ҡара...

- Унда нимә эшләйһең ул? - Илназ, эйелеп, дуҫын карауат аҫтында саҡ байҡап алды.

- Кил бында... Апай күреп ҡуймаһын түлке...

Илназ шыпырт ҡына дуҫы янына сумды.

- Тауышланма, тик кенә ят, - тип бойорҙо Мөнир.

- Нишләп бында ятабыҙ? - Дуҫы өндәшмәҫкә бойорһа ла, Илназ түҙмәне, һораны.

- Тс-с-с, - Мөнир йоҙроғон күрһәтте хатта.

Бер мәл бүлмәлә һиллек урынлашты. Балалар процедураға сығып китеп бөттө.

- Дастали, процедура ла процедура, процедура ла процедура... Инде бер ҡайҙа ла бармайым, ошонда ҡасам да китәм. Икәүләп ҡасайыҡ, йәме, - Мөнирҙә балалар йорто ҡылығы өҫкә сыҡты, күрәһең. - Тәрбиәсе апайҙарҙы гел тыңларға ярамай. Ҡотора ла китә улар.

- Ололарҙы тыңларға кәрәк гел дә, Мунька...

- Юҡ, тыңламаҫҡа кәрәк...

- Әһә, бына ҡайҙа ҡасып яталар, суҡынмыштар, - малайҙар бигерәк бәхәскә бирелеп китеп, тәрбиәсенең бүлмәгә ингәнен дә абайламай ҡалған. - Тиҙ генә сығығыҙ унан!

Мөнир тәрбиәсе апайҙарҙы уҡытып алыу өсөн көндө уңышһыҙ һайлаған булып сыҡты. Варвара Николаевна - иң уҫал тәрбиәсе һәм бөгөн уның сменаһы ине. Ул малайҙарға яҙаны оҙаҡ һайлап торманы - бәләкәстәрҙең бызмырлағандарына ваҡытты әрәм итмәй, өҫтәренә ыштан-пальтоларын ике ынтылыуҙа үҙе кейҙерҙе лә, аяҡтарын иҙәнгә лә тейҙермәй, елкәләренән күтәреп, тышҡа сығарҙы һәм яңы яуған ҡар өйөмөнә баштары менән батырып-батырып алды.

- Сыныҡтығыҙ ныҡыраҡ шулай, - тип ҡабатланы асыу менән.

Илназ да, Мөнир ҙә иламаны - үҙҙәре ғәйепле булғас ней. Илназ ныҡ ҡурҡты. Мөнирҙең эргәһенә инеүенә үкенде, дуҫының уны яҙыҡ ҡылыҡҡа этәреүенә йәне көйҙө. Уның бер ғәйебе лә юҡ, ә яҙаһын берҙәй ала. Мөнирҙе йәлләне шунан. Атаһы ла, әсәһе лә юҡ, хәҙер апайҙар ҙа яратмаҫ инде уны, тип уйланы.

Уларҙы Варвара Николаевна елтерәтеп алып китеп барғанда күҙ ҡырыйы менән генә дуҫына ҡараны ла саҡ "пырх" итеп көлөп ебәрмәне. Мөнир бер ҙә бошонғанға, артыҡ бөтөрөнгән кешегә оҡшамағайны - телен күрһәтә, шунан ауыҙын бәлшәйтә, күҙҙәрен бер ҡайта, бер ҡыҫа.

**(Дауамы. Башы 34-се һанда).**

АФАРИН!

# БЕҘҘЕҢ ЗАРИНА - ЕҢЕҮСЕ!



**Сибай ҡыҙы Зарина Исламова Таиландта тай боксы буйынса турнирҙа Sanehjan менән алышта ышаныслы еңеү яулаған. Хәҙер ул халыҡ-ара титулға эйә булды. "Ярыштар легендар Раджадемнерн стадионында үтте. Был Таиландтың тай боксы (муай-тай) ҡағиҙәләре буйынса алыштар ойошторолған стадиондарҙың береһе, Раджадемнерн стадионы чемпионы титулы был спорт төрөндә абруйлы булып һанала.**

23 йәшлек Зарина алышҡа башҡорт бүреген һәм өләсәйенең үҙ ҡулдары менән яһаған түшелдеректе тағып сыҡҡан. Шул рәүешле Зарина башҡорт милләтен, милли кейемен донъяға таныта. "Был образ минең өсөн көс һәм наҙлылыҡты, ышаныс һәм ихтыяр көсөн сағылдыра. Был - традицияларҙы бутау түгел, минең күңелемдә йәшәүсе ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙ башланғыстарының гармонияһын күрһәтеү. Бала саҡтан алып ир-егеттәр донъяһына, спортҡа, физик көскә күберәк тартылғанмын. Әммә минең күңелемдә шулай уҡ нәфислек, йомшаҡлыҡ, матурлыҡ та бар. Был образда минә иң төп нәмә - өләсәйем эшләгән түшелдерек. Ул уны ҡот өсөн һәм бирнә итеп үҙ ҡулдары менән яһаған. Уны кейгәндә мин өләсәйемдең ҡулдарының йылылыһын, көсөн, тыуған ерем менән бәйләнеште тоям. Был минең өсөн бик ҙур кенә түгел - хәтер, тамырҙарымды онотмау. Башҡортостандан булыуыма мин ныҡ ғорурланам һәм быны бөтә донъяға белдергем килә: беҙҙең үҙ традицияларыбыҙ, милли кейемдәребеҙ, мәҙәниәтебеҙ бар, беҙ уларҙы хөрмәт итәбеҙ һәм ғорурланабыҙ".

Зарина Исламова бәләкәй сағынан уҡ Сибайҙың "Ҡара аждаһа" клубында көнсығыш һуғыш төрҙәре менән шөғөлләнә һәм баштан үҙен маҡсатҡа ынтылыусан спортсы итеп таныта. Ул кикбоксинг һәм тай боксы буйынса Башҡортостан, Рәсәй чемпионы, төбәк-ара ярыштарҙа бик күп миҙалдар яулауы менән билдәле. Иң ҙур ҡаҙаныштарының береһе - 2024 йылда Грецияла уҙған U23 донъя чемпионатында алтын миҙал яулауы. Бына әле Таиландтың легендар стадионында көслө дәғүәселәрен еңеп, халыҡ-ара титулға өлгәште. Бангкоктағы еңеүе лә уның ныҡышмал хеҙмәте емеше. Сибай йәштәре уның уңыштарын ҡыҙыҡһынып ҡарай һәм һәр яҡлап уға оҡшарға тырыша.

Социаль селтәрҙәге сәхифәһендә Зарина тренеры Руслан Кривушаға, командаһына, партнерҙарына, турнирҙы ойоштороусыларға, "Ҡара аждаһа" клубы, Сибай балалар һәм үсмерҙәр спорт мәктәбе етәкселегенә, тренеры Александр Гавриловҡа рәхмәт белдерә һәм: "Бангкоктың иң шәп стадионлары рингына күтәрелеү минең өсөн оло мәртәбә. Һәр алышым теләһә ҡайһы дәғүәсегә ҡаршы тороуға әҙерлек мәктәбе. Тыуған ҡаламды, республикамды, илемде халыҡ-ара аренала танытыуыма ифрат шатмын", -тип яҙа.

**Гөлдәр ҠАҘЫЕВА.**

ӘЙҘӘГЕҘ!

# БАЙМАҠТА - БАЙРАМ!

**Хәбәр ителеүенсә, 6 сентябрҙә Баймаҡ районы Граф күле буйында "Башҡорт аты" халыҡ-ара фестивале ойошторола. Күләмле сара дүртенсе йыл үткәрелә, төп маҡсаты - башҡорт тоҡомло аттарҙы һаҡлау һәм популярлаштырыу.**



Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры Руслан Хәбибов "Башҡорт аты" халыҡ-ара фестиваленең спорт программаһы менән таныштырҙы. Уның һүҙҙәренсә, "Башҡорт аты" фестивалендә тәүге тапҡыр "Тәңкә алыу" ярышы уҙғарыла. "Башҡорт аты" - республикабыҙҙың иң сағыу сараларының береһе. Быйыл фестивалдең спорт программаһын киңәйтергә булдыҡ. Мас-рестлинг һәм грэпплинг, көрәш һәм "Бәйге" башҡорт күпбәйгеһе буйынса турнирҙар үткәрергә әҙерләнәбеҙ. Әлбиттә, беҙҙә үк атыусылар өсөн "Ирәндек мәргәне" ярышы, ат сабыштары көтә", - тип билдәләне Руслан Хәбибов.

"Башҡорт аты" фестивалендә шулай уҡ "Самауырлы ритайым" ойошторола. "Самауырлы ритайым" бына бер нисә йыл инде Өфө һәм республикабыҙҙың башҡа ҡалалары йәштәрен берләштерә. Был мәҙәни сара ғына түгел, ә халыҡ традицияларының яңы быуын өсөн актуаль, ҡыҙыҡлы була алыуын раҫлай. Был сара өсөн фестиваль майҙансығында махсус зона ойошторола һәм унда ҡунаҡтарҙы бай программа көтә: "Ритайым" - барлыҡ ҡатнашыусыларҙы берләштергән дөйөм бейеү; Асыҡ микрофон - теләгән һәр кем өсөн йырлау, бейеү йәки шиғыр һөйләү мөмкинлеге; "Тамашасылар + артистар" тип аталған попурри - йыр һәм бейеүҙәрҙе бергәләп башҡарыу. "Самауырлы ритайым" идеяһы 2020 йылда башҡорт йәштәре башланғысы менән барлыҡҡа килде, улар араһында йәш активист Рөстәм Абдразаҡов, баянсы Кәрим Моратов һәм ҡурайсы Ғаяз Ялмырҙин бар. Шул ваҡыттан алып "самауырлы дискотека" күләмле йәштәр хәрәкәтенә әүерелде. Асыҡ майҙансыҡта дәртле бейеүҙәр, тере музыка, халыҡ йырҙары яңғырай. Шулай уҡ самауыр сәйе менән һыйланырға мөмкин.

Этномәҙәни фестивалдә "Башҡорт аты - Башҡортостан бренды" документаль фильмының проморолигын күрһәтеү ҙә планлаштырыла. Фильм республиканың төрлө районларында, шул иҫәптән Баймаҡта төшөрөлгән, сөнки бында йылҡысылыҡ традицияларын һаҡлауға етди иғтибар бүленә. Беренсе планда - Башҡортостан тәбиғәтенең гүзәллеге, башҡорт аты һәм туған тел. Фильмға уның геройҙары - тамашасыларҙы төбәктең йолалары һәм мәҙәниәте менән таныштырыр кешеләр айырым үҙенсәлек өҫтәй. Картинаны төшөрөүҙә шулай уҡ йылҡы үрсетеүселәр, ғалимдар, ҡымыҙ бешеүселәр, ат көтөүселәр, һөнәрселәр, күндән әйбер эшләү оҫталары, ауыл хужалығы тауарҙары етештереүселәр, ат спорты вәкилдәре ҡатнашты.

Документаль фильм тамашасыларҙы үҙенсәлекле башҡорт аты менән таныштырыуҙан тыш, профилле уҡыу йорттары студенттары, йәш белгестәр, йылҡысылыҡ һәм башҡорт халҡының традицияларын менән ҡыҙыҡһынған һәр кем өсөн дидактик материалға әүерелергә тейеш. Проект Башҡортостан Башлығы гранттары ярҙамында тормошҡа ашырылған.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

БАЛАҢА УҠЫ!

# ХЫЯЛЫЙ БЕСӘЙ



Ҡайҙалыр алыҫ-алыҫ бер ерҙә, беҙ белмәгән бер илдә, йәшәгән, ти бер бесәй. Ул шул хәтлем хыялланырға яратҡан. Уның иң ҙур хыялы - бер ҡапҡала йәшәгән ҙур йөнтәҫ эт унан ҡурҡһын өсөн көслө һәм ҡыйыу булыу. Бесәй өйҙән сыҡҡан һайын эт өрә-өрә уны баҫтырырға тотона. Бахыр бесәйгә ҡойроҡтарын ҡабартып, өмөтһөҙ тауыш менән мыяулап, бейек ҡойма башына үрмәләүҙән башҡа сара ҡалмай. Ярай әле эттәр ҡоймаға менеп, ҡойма буйлап йөрөй белмәй!

Хыялға бирелеп ултырған бесәй бар донъяһын онота! Ул шул тиклем ялҡаулана, хатта сысҡандарҙы ла тотмай башлай. Ә сысҡандар әҙәпһеҙлектең сигенә еткәләр, хатта бесәйгә иғтибар ҙа итмәй башлайҙар. Келәттән һәр саҡ уларҙың ҡыштырлауы ишетелеп тора. Хужа бесәйгә ҡарай-ҡарай, уны шелтәләй:

- Ниндәй ялҡау бесәй булдың әле? Тиҙҙән сысҡандар башыңа ла менеп ултырып, мыйыҡтарыңдан да тарткылай башларҙар! Былай дауам итһә, урамға ҡыуып сығарам!

Хужанан был һүҙҙәрҙе ишетеү оят булһа ла, бесәй хыялланыуҙан туктай алмай. Урамға сыҡһа, йән-яғына хәүефләнеп ҡарай, эткә һиҙҙермәй генә йөрөргә тырыша. Әммә эт һәр саҡ уны һиҙеп ҡала ла, өрә-өрә баҫтырырға тотона. Бесәй, эттә нисек итеп еңеп алырға, тигән теләктән башҡа бер нәмә тураһында ла уйлай алмай.

Хужа бесәйенең ялҡау булыуына, сысҡандарға иғтибар ҙа итмәүенә бик асыулана. Тиҙҙән вәғәҙәһен үтәй, бесәйҙе урамға ҡыуып сығара.

Шулай итеп, буш хыялдары арҡаһында ул өйһөҙ ҙә тороп ҡала. Урамдағы ҙур ағас төбөндә: "Был ҡурҡыныс эт мине күреп ҡалыу менән баҫтыра башлай. Шуға көслө һәм ҡыйыу булырға, эттең минән ҡурҡыуын, минә теймәүен уйлап хыялландым. Ләкин хыялдарым тормошҡа ашманы, улар минә ярҙам итмәне. Бына хәҙер өйһөҙ ҙә тороп ҡалдым! Мяу-мяу!"- тип ҡайғырып ултырғанда, теге эт уны күреп ҡала, ҡапҡа эсенән урамға сығыу юлдарын эҙләп ары-бире саба башлай. Тап ошо мәлдә хужаның әсәһе баҙарҙан ҡайтып инә. Ул ҡапҡанан инеп, алған нәмәләрен өйгә ташыған арала, эт урамға сығып та һыҙа һәм бесәйҙең артынан саба. Бесәй йөндәрен ҡабартып, уҡ кеүек ағас башына атыла. Ағас төбөндә тороп ҡалған эт, өрә-өрә, ағасты урап йөрөй.

Урамдағы шау-шыуҙы ишетеп, нимә булғанын асыҡлар өсөн, өйҙән хужа килеп сыға. Ағас тирәләй яңһып өргән этен һәм ағас башында ҡурҡышынан ҡуҙҙәре түп-түңәрәк булған бесәйен күрә. Меҫкен бесәйҙең күҙҙәренән йәш тәгәрәп, шым ғына илай, мыяулап ҡына ярҙам һорай.

Ошо мәлдә хужа бесәйенең ауыр яҙмышын аңлай. Үҙ йортондағы йән эйәләренең нисек йәшәүенә иғтибар бирмәүенә унайһыҙланып китә. Хужа этенә асыу менән ҡысҡыра. Ғәйепле эт, ҡойроҡтарын ҡыҫып, ояһына инеп боҫа. Хужа бесәйҙе ағас башынан төшөрөп, йомшаҡ йөндәренән һыйпай-һыйпай, уны йыуатып тынысландыра: "Эй бахыр бесәй! Әгәр эт менән икегеҙҙең араһындағы ыҙғышты белгән булһам икән... Хәлең был хәтлем насар булмаҫ ине. Исмаһам, бер тапҡыр булһа ла ошаҡлаһаң, мин эткә һине рәнйетергә юл ҡуйыр инемме?"

Хужа этен сылбырға бәйләп ҡуя: "Үҙенде тәртипле тоторға өйрәнгәнсе, сылбырҙа ултырып тор әле, дуҫҡайым!" - ти ул.

Ә бесәйҙе өйгә кире индерә. Хәҙер уға эт ҡурҡыныс түгел. Бесәй хыялланыуын ташлап, тырышып сысҡандар тота башлай. Уның бер ҡасан да тормошҡа ашмаҫ хыялдары файҙаһыҙ, ваҡытты бушҡа әрәм итеү генә булған икән. Сөнки бер генә бесәй ҙә ҙур уҫал этте еңә алмай. Уға яҡлауҙы үҙен яратҡан хужаһынан эҙләр кәрәк ине...

*Хәҙистән:* "Шундай ваҡыт килер - кешеләрҙең йөрәктәрендә Ҡөрьән кейем кеүек иҫкерер, ә эштәре тик буш хыял булып ҡалыр. Берәй яҡшы ғәмәл башҡарһалар, улар әйтерҙәр: "Был ҡабул буласаҡ!", ә инде гонаһ ҡылһалар: "Аллаһ беҙҙе кисерер!"

**Энгин НИГАР.**

**Төрөксәнән Мөслимә АСҠАРОВА тәржемә итте.**

✓ Үҙ йәшегеҙгә ҡарағанда йәшерәк күренәһегеҙме? Тимәк, һеҙ оҙон ғүмер кисерәсәкһегеҙ. Дания ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, был ике күрһәткес араһында туранан-тура бәйләнеш бар.



ИНТЕРНЕТТАН



## ЙӨРӘК СИРЛЕЛӘРГӘ... комедия файҙалы

■ Ғалимдар раҫлауынса, комедик фильмдар ҡарау сәләмәтлек өсөн файҙалы. Был ваҡытта ҡан тамырҙары киңәйә һәм йөрәктең ҡан менән тәьмин ителеше яҡшыра. Триллер һәм боевик ҡарағанда кире эффект күҙәтелә. Тәжрибә күрһәтеүенсә, ындай фильмдарҙы ҡараған саҡта тыуған көсөргәнеш ҡан тамырҙарының ҡыҫылыуына, ҡан баҫымының күтәрелеүенә килтерә.

■ Үҙ йәшегеҙгә ҡарағанда йәшерәк күренәһегеҙме? Тимәк, һеҙ оҙон ғүмер кисерәсәкһегеҙ. Дания ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, был ике күрһәткес араһында туранан-тура бәйләнеш бар. Бында төүге сәбәп булып генетика тора. Икенсеһе - ғәҙәттәр. Тәмәке тартмаған, дөрөҫ туҡланған, ҡояшта артыҡ ҡыҙынмаған кешеләр тиҫтерҙәренә ҡарағанда йәшерәк күренә.

■ Америка медицина ассоциацияһы һимереүҙе ауырыу тип таныңға тәҡдим итә. Элек ассоциация һимереүгә "йәмәғәт һаулыҡ һаҡлау өлкәһенең төп проблемаһы" тигән ҡылыҡһырлама бирә ине. Был ҡарар юридик көсөнә инһә, һимереү кеүек ауыр проблеманы хәл итеү юлдары ла еңеләйәсәк, ти белгестәр. "Артыҡ ауырлыҡ сир түгел, ә артыҡ ашау һәм аҙ хәрәкәтләнеүгә бәйле йәшәү рәүеше алып барыуҙың эҙемтәһе, тип әйтеү дөрөҫ түгел. Мәҫәлән, тәмәке тартырғамы, юкмы икәнен дә кеше үҙе хәл итә, әммә уның һөҙөмтәһендә тыуған үпкә яман шешен ауырыу түгел тип атарға бер кемдең дә башына инеп тә сыҡмай", - тиелә ассоциацияның мөрәжәғәтендә. Һимереү - ул сир, тигән фекерҙе Кардиологтарҙың Америка колледжы, Һимереү йәмәғәте, Американың клиник эндокринологтары ассоциацияһы ла хуплай. Әлеге мәлдә артыҡ ауырлыҡ менән Америка халҡының өстән бер өлөшө яфалана. RTI International институты фаразлары буйынса, 2030 йылға уларҙың һаны 42 процентка етәсәк.

■ Ҡыҙҙырылған картуф, тауыҡ, майлы балыҡ яратһағыҙ, майҙа ҡыҙҙырылған бәлештәрһеҙ йәшәй алмаһағыҙ, улар тыуҙырған хәүеф тураһында ла онотмағыҙ, ти ғалимдар. Был ризыҡтар простата биҙе яман шешенә килтерә ала. Улар билдәләүенсә, майҙы ҡыҙҙырыу һөҙөмтәһендә канцероген матдәләр - альдегидтар, гетероциклик аминдар һ.б. бүленеп сыға. Тап улар ирегеттәрҙә простата биҙе яман шеше барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә лә инде. Был проблема күп илдәр халҡына янай, бөгөн Европала ла ҡыҙҙырылған ризыҡтар ҙур һорау менән файҙаланыла.

■ Холестериндан таблеткаларҙы анар емеше экстракты менән бергә ҡабул иткәндә бик яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшергә була. Етмәһә, был осраҡта дарыуҙарҙың дозаһын түбәнәйтергә лә мөмкин, тимәк, ауырыуҙар уларҙың кире тәьҫиренән дә һаҡлана. Анар емеше менән тәжрибәне профессор Михаэль Авирам етәкләй, ул тәүрат осоро емештәрен өйрәнеүсе булараҡ донъяға билдәле. Быға тиклем профессор анар һәм уның һуты ҡандағы холестерин кимәлен түбәнәйтә, тип сығыш яһағайны инде. Израиль ғалимдарының асышы "Atherosclerosis" халыҡ-ара ғилми-медицина журналында баҫылған. Әлегә шуны ғына кәңәш итергә була - анар ашағыҙ, уның орлоҡтарын салаттарға өҫтәгеҙ.

ХӘТЕРЛӘП...

# ҠАСАН ТЕЛЕВИЗОР ҠАРАЙ БАШЛАНЫҠ?

**Йылайыр районы ауылдарында, минең тыуған төбәгемдә, халыҡ телевизорҙы үткән быуаттың 60-сы йылдары аҙағында ғына ҡарай башланы. Бик һирәктәрҙә, хәллерәк ғаиләләрҙә генә, булды ул тәүҙә. Беҙ "Снежок" маркалыһын 1969 йылда һатып алдыҡ һәм был ваҡиға ғаиләбеҙ өсөн сикһеҙ ҡыуанысլы хәл булды. Ә "зәңгәр экран"дың ауылыбыҙҙа тоҡаныуы Баймаҡта телебашня ҡуйыу менән туранан-тура бәйле ине.**



Ул заманда турпоходтар - мәктәптә уҡыу программаһының мотлаҡ бер пункты булды. Уҡыу йылы тамамланғас, май аҙағында, уҡыусы балалар ике-өс көнгә ҡырға сыға ине. Баймаҡ интернат-мәктәбендә бишенсе синыфтан һуң бер көнлөк кенә поход рөхсәт ителде. Шулай итеп беҙ, интернаттың 5 "б" синыфы балалары, 1974 йылда ҡалаға терәлеп ятҡан Ирәндек тауына, Баймаҡ телебашняһын яҡындан күрер өсөн, күтәрелдек.

Көн иртәнән үк томһораланып торҙо. Мәктәптең "ГАЗ" машинаһына тейәлеп, Кәкреауыл (Баймаҡтың Ирәндек тауына һуғып ятҡан бисттәһе) аша үтеп, Ирәндек итәгенә барып төштөк һәм, үҙебеҙ менән алған аҙыҡ-түлекте бүлешеп тотоп, тауға үрмәләп киттек. Текә икән Ирәндек. Телебашняға еттек. Аҫтан ҡарағанда ул тауҙың иң осонда ултыра, арғыяғында ҡая таштар, кире яҡҡа ауышҡан тау итәге, тип уйлайһың. Менеп еткәйнек, баҡһаң, өҫтә, тип-тигеҙ үк булмаһа ла, ҡәҙимге йәйпәк иркен ер. Үҙәктәре, сауҡалыҡтары, суҡайып торған суйыр таштары матур ландшафт хасил иткән. Баймаҡ үҙе диңгеҙ кимәленән 500 метр бейеклектә ятһа, телебашня урыны - 900 метр тирәһендә. Асылда, Баймаҡ халҡы тау башында йәшәй, әгәр өй һалып алһаң, Ирәндек өҫтөндә лә гөрләтеп тормош көтөргә булыр ине. Әйткәндәй, мал тотҡан ҡала халҡы бесәнде нәҡ ошо тауҙа саба.

Ғөмүмән, Ирәндек башынан беҙ үҙебеҙ генә түгел, хатта тубыбыҙ ҙа кире яҡҡа тәгәрләп төшөп китмәне, рәхәтләнеп футбол типтек, ял иттек. Тик ныҡ ирәйеп китергә ямғыр ҡамасауланы. Ул беҙ тауға күтәрелгәс тә башланғайны.

Әллә ҡайҙан күренеп, гел ымһындырып торған телебашня, тарбаҡланып, ҡеүәтле терәк-тояҡтарына баҫҡайны. Тауҙың ташына һеңдереп ҡойолған бетон нигеҙҙәр, тимер бағаналарҙы уларға бороп беркеткән болттарҙың иҫ киткес ҙурлыҡтары, билдәле тәртиптә арҡыс-торҡос тартылып, болоттарға үрмәләгән ян-яғындағы тимер һайғауҙар ҙурлығы, ҡеүәте менән хайран итте. Ошо бәһлеүәндең янында аппарат йорто, ҙур ауыл өйөндәй бина, юғалып ҡалғайны.

Баймаҡ телебашняһы, Ирәндектең Таҡтаярған тауында район етәкселеге инициативаһы менән предприятиялар һәм хужалыҡтар иҫәбенә төҙөлә. Бейеклеге 80 метр самаһы, дөйөм ауырлығы 500 тонна була. Тора-бара тауҙың "Таҡтаярған" исеме онотола, уны Телевышка тауы тип йөрөтә башлайҙар.

"Таҡтаярған" исеме лә уның юҡтан бар булмаған. Заманында, хатта XX быуаттың башында ла әле, Ирәндек тотошлай ҡарағас урманы менән ҡа-

БАҠСА

# ҠЫРМЫҪҠАНАНМЫ? ҠОТОЛОП БУЛА!



**Ҡырмыҫҡалар - быуынтыҡ аяҡлылар төркөмөнә ҡарай, был төркөм үҙе 12 төркөмсәгә, 297 ырыуға һәм яҡынса 8800 төргә бүленә. Ҡырмыҫҡалар юғары интеллектлы иҫәпләнә һәм улар 10 миллионға яҡын ҡырмыҫҡанан торған колонияларҙа йәшәй. Әйткәндәй, ҡырмыҫҡалар ғына (кешеләрҙе иҫәпкә алмағанда) ойошторолған һуғыш алып бара һәм әсирҙәрҙе ҡолға әүелдерә. Ҡырмыҫҡалар ерҙә лә, ағаста ла көн итә. Һәр колонияла инә ҡырмыҫҡа бар, ул һалған йомортҡанан йәш ҡырмыҫҡалар барлыҡҡа килә. Ҡырмыҫҡалар башҡа бөжәктәр, үҫемлек һуты, бәшмәк, япраҡ менән туҡлана. Ҡырҙа йәшәгән ҡырмыҫҡаларҙың эшһөйәрлегенә, уларҙың урман санитарҙары булыуына ҡарап һоҡланһаҡ та, баҡса ҡырмыҫҡалары йышыраҡ көйөнөргә мәжбүр итә.**

### Ни өсөн көрәшергә?

Баҡса ҡырмыҫҡаһы булған ерҙә мотлаҡ рәүештә ебләә (икенсе төрлө әйткәндә - бет) була. Ебләә - баҡса ҡоротҡостары араһында иң ҡурҡынысы, ул алмағас, груша, слива, ҡарағат культураларына ҙур зыян килтерә. Декоратив үҫемлектәр бет төшөүе һөҙөмтәһендә үҙенең декоративлығын юғалтһа (япраҡтар төрөлә, үҫентеләр кәкерәйә, ныҡ зарарланған ваҡытта, артабан үҫеүен туҡтата), емеш-еләк ағастары йәки ҡыуаҡтары бөтөнләй уныш бирмәүе бар. Ебләне баҡса ҡырмыҫҡалары үрсетә һәм йәш үреңпеләрҙә көтөүе менән "көтә". Бер ебләнән икенсенә килеп, ҡырмыҫҡа уларҙы мыйыҡтары менән "һыйпай", ә был ваҡытта ебәләләрҙең ҡорһағында татлы шыйыҡса бүленеп сыға. Баҡса ҡырмыҫҡалары ошо шыйыҡса менән туҡлана ла инде. Үҙҙәрен туйындырыусыларҙы ҡырмыҫҡалар ҡәҙерләй, улар тураһында хәстәрлек күрә һәм яңынан-яңы үҫентеләргә күсереп тора. Һөҙөмтәлә, бөтөн баҡса үҫемлектәре зарарлана. Көҙөн ҡырмыҫҡалар ебләне ҡышлау урындарына алып китә һәм был тарих яҙын яңынан ҡабатлана.

Ебләгә ҡаршы көрәшеү өсөн байтаҡ ҡына ысулдар булһа ла, баҡса участкаһында ҡырмыҫҡалар булғанда уларҙың барыһы ла файҙа бирмәйәсәк. Эшкәртелгән һәм таҙартылған ағас көс йыя башлауға тағы ла ҡырмыҫҡалар үҙҙәренең "көтөү"е менән уны баҫып алаҡ. Шуға ла был ситуацияла ебләә менән түгел, ә баҡса ҡырмыҫҡаларын тулыһынса юҡ итеү өсөн көрәшергә тәҡдим итәбеҙ.

Баҡса ҡырмыҫҡалары һуҡыр сысҡан кеүек үк, сәскә түтәлен, "альп тауҙары"н һәм газонды боҙа. Һуҡыр сысҡан өйөмөнән айырмалы рәүештә, ҡырмыҫҡа иләүе көндән-көн ҙурая барасаҡ. Был осраҡта ҡырмыҫҡалар менән көрәшеүе ауырға тура киләсәк, сөнки иләү өҫкә генә түгел, ергә ҡарай ҙа үҫә, ул яҡынса 1,5 метр тәрәнлеккә етәсәк.

### Нисек көрәшергә?

Алда әйтелеүенсә, баҡса ҡырмыҫҡаһы менән көрәшеүе еңел түгел, уларҙың һаны миллиондар, ә ер аҫтынан йөрөй торған юлдары километрҙар менән иҫәпләнә, яңы

✓ *Хәҙер, ҡайҙа ғына йәшәһәң дә, интернет, спутник антеннаһы йә кабель аша һәр йортта йөҙәрләгән канал тота. Тик, "зәңгәр экран" элекке кеүек ылыҡтырғыс түгел.*



планған була. Тик уны ҡырҡып бөтөрәләр. "Баймаҡ "прирамида"һы" тип аталған мәҡәләлә (гәзитебеҙҙең 27-се һаны) Баймаҡ уртаһында иғтибарҙы йәлеп итеп ятҡан ҡара тау тураһында яҙғайныҡ. Элек металл иреткәндә ағас күмерен ҡулланғандар. Ирәндек ҡарағаһы шул мейестәрҙә янып бөткән дә инде. Ошонан сығып та, мәғдән ҡаҙыу элек-электән тәбиғәткә ниндәй зыян килтергәнен аңларға мөмкин. Ағастың бер өлөшө, әлбиттә, төҙөлөштә лә файҙаланылған. Нәҡ ошо тауҙа таҡта ярғандар һәм халыҡ телендә ул "Таҡтаярған" исеме менән йөрөтөлә башлаған. Борон, бәлки, башҡа төрлө лә атағандарҙыр. Әйткәндәй, Ирәндек ҡарағастарын Таналыҡ йылғаһы буйлап үрҙәрәк ултырған Мерәҫ ауылы янында күререгә мөмкин. Ҡалын ҡарурмандан бәләкәй генә бер сауҡалыҡ тороп ҡалған. Бәлки, уларҙы ауыл халҡы ҡырҡтырмай ҡурсалап алып ҡалғандыр...

Дәүләт планына (госплан) ярашлы, Баймаҡта телеретрансляция башняһы тик 1985 йылда төҙөлөргә тейеш була. "1965 йылға ҡарата район етәкселеге тамам "өлгөрҙө", ҡала һынлы ҡалала артабан телевидениеһыҙ йәшәү бер нисек тә мөмкин түгел, тигән берҙәм фекергә килдек. Телебашняның урынын билдәләү өсөн бер йыл самаһы ваҡыт китте. Ә 66-сы йылда төҙөлөш майҙансығында эш ҡайнай ине инде. Ул ысын мәғәнәһендә райондың халыҡ төҙөлөшөнә әүерелде. Унда ҡаланың бөтә предприятиелары һәм ойошмалары, бөтә колхоздар һәм совхоздар ҡатнашты", - тип район гәзите биттәрендә 1965-1967 йылдарҙа ҡала советы башҡарма комитеты рәйесе вазифаһын биләгән Хәлфетдин Ишморатов ул ваҡиғаларҙың башы тураһында үҙенең иҫтәлектәре менән бүлешә.

Совет власының планлы иҡтисады шарттарында, ябай ҡаҙауға ла лимит булған осорҙа, был тиклем ҙур проектҡа тотоноу - үҙе бер батырлыҡ өлгөһө ул. Телебашня конструкцияһы өсөн 500 тоннанан ашыу металды нисек, ҡайҙан алыуҙарын күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Юлын табалар. Ҡатмарлы ҙур конструкцияны район белгестәре, үҙ һөнәренең оҫталары көсө менән ҡороп ултырталар. Шулай итеп, Баймаҡта һәм уға күрше райондарҙа "зәңгәр экран"дар 1967 йылдың 7 ноябрендә, Бөйөк Октябрҙең 50 йыллығын байрам итеү айҡанлы, тоҡана. Сигналды ул Магнитогорск ҡалаһынан ала һәм артабан тарата. Билдәле, тәүге телевизорҙар ауылдарҙа ла шул йылдарҙа ғына күренә башлай. Антеннаны мөмкин тиклем бейегерәк ҡуйырға тырыша торғайнылар ул саҡта. Беҙҙең ауылда уны егерме метрға тиклем һәм унан да юғарыраҡ күтәреүселәр булды, хатта ярышалар ҙа ине шикелле был юҫыҡта.

Сигналды Магнитогорскиҙан алғас, Башҡортостан тапшырыуҙарын ҡарауҙан мәхрүм инек. Иҫләйем, 1976 йылда (бәлки, 77-се йылдалыр) Баймаҡ районы рекордлы уңыш йыйып алды һәм дәүләт төшөргән икмәк планын күпкә арттырып үтәне. Ошо айҡанлы Өфөлә район игенселәрен тәбрикләнеләр һәм сараны республика телевидениеһы аша күрһәттеләр. Баш ҡала баймаҡтарҙы ҙурлайҙар, ә район халҡы уны ҡарауҙан да мәхрүм. Мәсьәләне хәл итеү юлын нисектер тапҡандар икән. Беҙҙе, интернат балаларын, саранан репортаж күрһәтелгән киске сәғәттәрҙең береһендә телевизорҙар булған бүлмәләргә һәм залдарға класс-класс менән индереп ултырттылар. Шул рәүешле беҙ һәм, әлбиттә, тотош район халҡы үҙҙәренең ялан батырҙары тураһында тапшырыуҙы ҡарай алды.

Үткән һандарҙың береһендәге мәҡәләлә (28-се һан) юлдарҙың булмауы арҡаһында үткән быуаттың 80-се йылдарына тиклем Урал аръяғында йәшәүселәрҙең баш ҡала менән бәйләнеше юҡ кимәлендә ине, тип яҙғайныҡ. Беҙ шулай уҡ башҡортса телетапшырыуҙар ҙа ҡарай алманыҡ. 1984 йылда Баймаҡҡа 250 метр (документтарҙа күрһәтелеүенсә - 247,92 м) бейеклектәге заманса радио-реле линияһы мачтаһы ултыртылғас ҡына хәл үҙгәрҙе, Урал аръяғына баш ҡалабыҙ Өфө тағы ла яҡынайҙы. Ә халыҡҡа күпме ҡыуаныс килтергән иҫке телебашняны тораҡ һүтеп алдылар. Байтаҡ ултырҙы әле ул, алыҫтан ҡарағанда, һонтор ейәне эргәһендә сүккән ҡартатай шикелле.

Хәҙер, ҡайҙа ғына йәшәһәң дә, интернет, спутник антеннаһы йә кабель аша һәр йортта йөҙәрләгән канал тота. Тик, "зәңгәр экран" элекке кеүек ылыҡтырғыс түгел. Мин үҙем инде биш-алты йылдан ашыу телевизорҙың эргәһенә бөтөнләй бармайым. Ижтимағи-сәйәси ток-шоуҙар, яңылыҡтар бер ҡалыпҡа һалынған тапшырыуҙар теҙмәһе булып китте. Фекер төрлөлөгө, аналитика, тәнҡит бөтөнләй төшөп ҡалды. Көн һайын бер үк "хәбәр һөйләгән баштар" сыға һәм, ни ғәжәп, улар - һәр өлкәлә лә тиңе булмаған "белгестәр", имеш. Ҡайһы бер һүҙҙәрен ишетеп, иҫ-аҡыл китә, аҡты - ҡара, ҡараны - аҡ, тип раҫлау улар өсөн бер ни тормай. Ә күңел асыу программалары тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Баҡһаң, Якубович әле һаман "Мөғжизәләр яланы" тәгәрмәсен әйләндерә, халыҡ уны һаман ҡарай. Шунда тороп ҡартайҙы инде, мыйығы ағарҙы. Иҫ-аҡылың китер!

**Шулай итеп, бер кеше ғүмере эсендә телевизор үрелеп буй етмәҫлек хыялдан бүктергән, осоҡ ҙа, сағыу ҙа һәм шул уҡ ваҡытта мәғәнәһеҙ ҙә бер тәтәйгә әүерелде. Әйткәндәй, "зәңгәр экран" алдында оҙаҡ ултырыу ғүмерҙе ҡыҫҡарта, ти ғалимдар, үҙҙәре үткәргән тикшеренеүҙәргә таянып.**

**Байгилде МОТАЛЛАП.**

---

ҡырмыҫҡалар бер нисә аҙнанан яңынан барлыҡҡа килә.

***Баҡса ҡырмыҫҡаларын ике юл менән юҡҡа сығарып була:*** уларҙы ағастарға яҡын еүәрмәү; баҡса ҡырмыҫҡаларының иләүҙәрен заманса химик саралар менән эшкәртеү.

Ҡалған ысулдар, ҡыҙғаныҫҡа күрә, әллә ни тәьҫирле булмауы ихтимал.

***1-се ысул.*** Ҡырмыҫҡалар менән көрәшеү өсөн был юлды һайлайһығыҙ икән, шуны аңлағыҙ: һеҙ иләүҙең үҙен юҡҡа сығармайһығыҙ, ә "резервация"лар ғына яһайһығыҙ. Икенсе яҡтан, әгәр ҙә баҡсағыҙҙың төп үҙенсәлеге ландшафтлы дизайн түгел, ә тап емеш-еләк уңышы алыу икән, был һеҙҙең өсөн бик һөҙөмтәле сара буласаҡ. Шулай итеп, ағасты йәки ҡыуаҡты баҡса ҡырмыҫҡаһынан һаҡлау өсөн түбәндәге кәңәштәр ярҙам итәсәк.

***Һыу ярҙамында ҡаршылыҡ яһау.*** Был декоратив һәм емеш ҡыуаҡтары өсөн файҙалы, сөнки бер ҡыуаҡта олондар һаны күп, етмәһә, үҙҙәре нәҙек. Шуға ла улар өсөн башҡа ысулдар ҡулланыу уңайһыҙ. Һыулы ҡаршылыҡ яһау өсөн һеҙгә еңел автомобиль покрышкаһы кәрәк буласаҡ. Уны протектор буйынса ике өлөшкә ҡырҡабыҙ, ҡыуаҡҡа кейҙерәбеҙ һәм ситтәре ерҙән күренеп торорлоҡ итеп күмәбеҙ. Әгәр ҙә уны ҡыуаҡ аша кейҙереп булмаһа, бер урындан ҡырҡып, ҡыуаҡ төбөнә һалғас, герметик итеп ялғап ҡуябыҙ. Хәҙер уға һыу ҡойорға ғына ҡала.

***Фольганан кейем.*** Олондо фольга менән уратабыҙ һәм уны осло ҡырлы "итәк" барлыҡҡа килерлек итеп бөйләйбеҙ. Ҡырмыҫҡалар һығылмалы бөжәк түгел һәм ул фольганың осло ҡырыйынан аша үтә алмаясаҡ, ти белгестәр. Ысулдың файҙаһында шик бар, әлбиттә, шулай ҙа эшләп ҡарарға була.

***Елемле билбау.*** Икенсе осраҡтағы кеүек, ағас олонон магазиндарҙа һатылған елемле билбау менән уратабыҙ. Был махсус елемдә ағыулы матдәләр юҡ, ул оҙаҡ кибә һәм дымға бирешмәй. Уны октябрь башында 60-80 см бейеклегендә урарға кәңәш ителә. Февраль-март айында уны яңыһына алыштырыу мотлаҡ. Һөҙөмтәлә, ерҙән сыҡҡан яңы ҡарышлауыҡтар ағасҡа менә алмаясаҡ. Бер комплект 5-6 оло ағасҡа етә.

***2-се ысул.*** Заманса химик сараларға килгәндә, уларҙың хәҙер магазиндарҙа төрлөһөн һатып алырға була. Ҡырмыҫҡа иләүе бик ҡатмарлы ҡоролма булыуы тураһында әйткәйнек инде. Баҡсаның үҙендә йөрөгән эшсе ҡырмыҫҡаларҙы юҡҡа сығарып ҡына улар менән көрәш тамамланды, тип уйлау хата буласаҡ. Тәрән ер аҫтында йәшәгән иләү батшабикәһе һеҙҙең баҡсағыҙҙы тиҙ арала уҡ яңы ҡырмыҫҡалар менән тултырып ҡуясаҡ. Шуға ла тап ағыулы алдатҡыс ем йәки гелдәр берҙән-бер иң тәьҫирле сара булып ҡала. Был матдәләр ҡырмыҫҡаларға шунда уҡ тәьҫир итмәй, эшсе ҡырмыҫҡа был ризыҡты иләүгә алып ҡайтып еткерә һәм батшабикәләрен һәм йомортҡанан яңы сыҡҡан ҡырмыҫҡаларҙы ашатып өлгөрә. Тап инә ҡырмыҫҡа үлгәндән һуң, баҡса ҡырмыҫҡалары ла юҡҡа сыға.

***Шулай уҡ гәзит уҡыусыларға иң ябай ысул - "халыҡ кәңәштәре"н лә тәҡдим итәбеҙ.***

- Ҡайһы бер баҡсасылар ҡырмыҫҡа иләүен ҡаҙып ала һәм баҡсанан йырағыраҡ алып барып ташлай.
- Ҡырмыҫҡалар ҡырҡыу еҫтәрҙе яратмай. Ҡырмыҫҡа иләүенә һыланған балыҡ башы, киҫелгән һарымһаҡ, томат үҫентеһе һабағы, петрушка япраҡтары һалығыҙ.
- Шулай уҡ гөлбаҙран (пижма), эсе әрем, баҫыу бөтнөгө, әнис еҫе уларҙы ҡурҡыта ала. Уларҙы йәшел йәки киптерелгән көйөнсә ҡырмыҫҡалар йыш йөрөгән урынға һалығыҙ.
- Томат үҫентеһе төнәтмәһе яҡшы ярҙам итә. Төнәтмәгә үҫентене ни тиклем күберәк һалаһың, шул тиклем файҙалыраҡ.
- Ҡырмыҫҡаларҙан ҡотолоу өсөн иләүгә һыуынып өлгөрмәгән көл һибегеҙ.
- Иләүгә тоҙ һибеү ҙә ярҙам итә, тиҙәр.
- Баҡса территорияһын ҡырмыҫҡаларҙан таҙартыу өсөн уларҙың иләүенә үҫемлек майы ҡойорға кәрәк. Майҙа бәлеш бешерегеҙ ҙә, майын иләүгә ҡойоғоҙ. Ҡайнар һыу ҙа ярҙам итә, ти баҡсасылар. Тик был эште аҙағына тиклем еткерергә һәм йыш ҡына ҡабатларға кәрәк.
- Тағы бер ҡыҙыҡлы ысул. 1 стакан шәкәр йәки ҡайнатманы 1 биҙрә һыуҙа иретергә. Был ҡатнашма ҡырмыҫҡа иләүенә ҡойола. Баҡтиһәң, ҡырмыҫҡалар үҙҙәренең аҙыҡ запасын углевод-шәкәр формаһында һаҡлай икән. Тупраҡта тәбиғи сүпрә бар. Иләүгә шәкәр иретмәһе ҡойолоу менән, сүпрә әсей башлай һәм уларҙың запасына күсә. Ҡырмыҫҡаларға был ерҙән китергә генә ҡала.

---

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Йәшелғош**

**(Золотистая щурка)**



Ваҡ (сыйырсыҡ ҙурлыҡ) ҡош, суҡышы нәҙек, аҫҡа ҡарай бөгөлөп тора, ҡанаттары оҙон һәм тар ғына, оҙон ҡойроҡло. Башы, арҡаһы һорғолт-ерән, муйынының тамаҡ тирәһе сағыу һары, аҫҡы яғы сағыу зәңгәр, ҡойроғо, ҡанатының ҡайһы бер ҡауырыйҙары йәшел. Тиҙ, еңел оса. Тауышы зыңғырлап тора, "крю-крю", йә "щуррю" тип гел ҡыҫҡырып йөрөй. Йәшелғоштар төркөмөнә ҡарай.

Йәш ҡоштар ололарынан күкһел-йәшкелт төҫлө булыуы менән айырылып тора. Төньяҡ Американан алып Европаның һәм Алтайҙың көньяҡ-көнбайышына тиклемге дала һәм сүллектәрҙә йәшәй. Беҙҙең төбәктә далаларҙа осрай. Йылға ярҙарында, ҡомло урындарҙа оя ҡороп, колониялары менән көн итәләр.

Һуң ғына осоп ҡайталар һәм элекке ояларын йүнәтә лә башлайҙар. Ярҙа яңыһын да соҡойҙар. Ояларының тәрәнлеге - 1, һирәгерәк 2 метрға етә. Төп оянан тыш, эргәһендә ҡыҫҡағыраҡ тағы ла бер-ике оя була. 4-10, йышыраҡ 6-7 йомортҡа һала, икәүләп сиратлап баҫалар. Был осорҙа ата ҡош йомортҡа баҫҡанда инә ҡошто алыштырып ҡына тормай, ризыҡ ташып уны ашата ла. Яҡынса 20 көндән бәпкәләр сыға, улар 30 көн унда йәшәйәсәк әле. Ояға ҡурҡыныс янағанда йәшелғош тауышланып ояның осонда әйләнеп йөрөй. Әгәр ҙә ниндәйҙер сәбәп менән бәпкәләр һәләк булһа, ҡоштар яңынан йомортҡа һалып, уны баҫып сығара.

Күп ваҡытын һауала үткәрә, бик бейектә ҡанаттарын йә тиҙ, йә талғын ғына елпеп оса. Сымдарҙа, ағас һәм ҡыуаҡтарҙа ял итә, ботаҡтарҙың ҡороғанын һайларға тырыша. Йәшелғош йылы ярата, һауа температураһы 10 градустан түбәнәйһә, осмай тиерлек. Бөжәктәр менән туҡлана, уларҙы һауала осоп барышлай ҙа, ерҙә лә тота. Умарталыҡтарға ла һөжүм итә. Шулай уҡ иңкеште ашай, иң яратҡаны энәғараҡ, саранча һымаҡтар, ҡуңыҙҙар. Иңкеш һимаҡ бөжәктәрҙең ҡаяуын алып ташлағандан һуң ғына йота.

Республиканың көньяҡ өлөшөндә йәшелғоштар осрай. 1956 йылда ғалим Ильичев Иҫәнғол эргәһендә Оло Эйек буйында йәшелғоштарҙың тотош төркөмөнә тап була. Шулай уҡ Дим буйының Айыт һәм Бикҡол ауылдары араһында, Өршәк йылғаһының Ключарево эргәһендә, хатта Нуғай ҡасабаһы тирәһендә Ағиҙел буйында ла осрағаны бар.

Ҡышлау ерҙәренә августа китә, Африкала ҡышлай.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**



### 8 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.10 "Модный приговор". [0+]
10.00 "Жить здорово!" [16+]
10.50, 11.25, 1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.35 "50 лет в эфире. Спецпроект. "Что? Где? Когда?". [12+]
13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
18.45 "Большая игра". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Спросите медсестру". Новые серии". [16+]
0.00 "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская. Новые серии". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "Три в одном". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж. [12+]**
**12.15 Квадратные метры. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Асыш. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Д/ф "Преодоление. Ильяс Валеев". [12+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Профессионалы. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**18.50 Хоккей. "Металлург" (Магнитогорск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**0.15 Х/ф "Бабоньки". [16+]**
**1.45 Спектакль "Асылъяр". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 9 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Спросите медсестру". Новые серии". [16+]
0.00 Д/с "Обыкновенный фашизм-2". [18+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская. Новые серии". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "Три в одном". [16+]**
**11.00 Башкортостан#вместе. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00, 22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00, 21.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Д/ф "Кибержертвы". [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Статус: свободен". [16+]**
**1.45 Спектакль "Оль-ля-ля!". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 10 СЕНТЯБРЯ СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Спросите медсестру". Новые серии". [16+]
0.00 Д/с "Обыкновенный фашизм-2". [18+]
1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская. Новые серии". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "Три в одном-2". [16+]**
**11.00, 3.30 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 "Экологично". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Доступный Башкортостан. [12+]**
**18.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Деловая среда. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2025". [12+]**
**0.00 Х/ф "Главный". [12+]**
**1.45 Спектакль "Кавардак Forever". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 11 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Спросите медсестру". Новые серии". [16+]
0.00 Д/с "Обыкновенный фашизм-2". [18+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская. Новые серии". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "Три в одном-2". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**17.00 Башкортостан#вместе. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 Креативный код. [12+]**
**21.00 Формула здоровья. [12+]**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Дуэлянт". [16+]**
**1.45 Спектакль "Не улетайте, журавли!". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 12 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 17.00 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.10, 14.15 "Время покажет". [16+]
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.20 Т/с Премьера. "Шерлок и дочь". [16+]
0.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
23.55 "Истории Большой Страны". [12+]
0.55 Х/ф "Напрасные надежды". [12+]
4.19 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "Три в одном-3". [16+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Аль-Фатиха. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Квадратные метры. [12+]**
**18.00 Башкорттар. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Автомобилист" (Екатеринбург). КХЛ. [12+]**
**22.00 Своих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Х/ф "Авантюристы". [12+]**
**1.30 Спектакль "Весело живем". [12+]**
**3.30 Тайм-аут. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 13 СЕНТЯБРЯ СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15, 23.55 Д/ф "Александр Масляков. "Улыбнитесь, вспомнив обо мне..." [16+]
11.05 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.05 Х/ф "Я шагаю по Москве". [12+]
14.35 Х/ф "Большая перемена". [12+]
17.05 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. Концерт Ларисы Долиной "Юбилей в кругу друзей". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб веселых и находчивых". Встреча выпускников-2025. [16+]
0.45 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Похищенная". [16+]
0.40 "Посвящение Москве". Трансляция из парка "Зарядье". К 878-летию Москвы.
2.10 Х/ф "Одиночка". [12+]
4.08 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.45 Аль-Фатиха. [12+]**
**9.15 "Курай даны". [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 Своих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Әкиәтсе. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Курсак". [6+]**
**11.30 Зерно. [6+]**
**12.00 "Елкән". [6+]**
**12.30 "Ете егет". [12+]**
**13.30, 4.00 Башкорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Д/ф "Огненный танкист". [12+]**
**17.45 Д/ф "Преодоление. Ильяс Валеев". [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Территория героев. [6+]**
**19.30, 4.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Байык-2025". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башкорт йыры-2025". [12+]**
**0.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.30 Х/ф "Звезда". [16+]**
**2.45 Спектакль "И в шутку, и всерьез". [12+]**
**5.15 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

### 14 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
13.30 Д/ф "Светлана Крючкова. "Мы выбираем, нас выбирают". [12+]
14.20 Х/ф "Большая перемена". [12+]
16.50 Д/ф "Уроки забвения". Полная версия". [12+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 Премьера. "Две звезды". Семейный подряд. [12+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с "Триггер". [16+]
0.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.25, 2.30 Х/ф "Два мгновения любви". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 Д/ф "Путь. К 80-летию атомной промышленности". [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Аншлаг и Компания". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Д/ф "Путь". [12+]
4.15 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.30 Күстәнәс. [12+]**
**9.00 Доступный Башкортостан. [12+]**
**9.15 "Мама". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Беседка". [6+]**
**11.30 "Сулпылар". [6+]**
**12.00 "Атайсал. Беҙҙекеләр! Знай наших!" [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 Д/ф "Влюбленный в геологию". Басыр Магадиев". [12+]**
**13.45 Д/ф "Какого лешего?" [12+]**
**14.15, 20.00 Квадратные метры. [12+]**
**14.30 Дорога к храму. [6+]**
**15.00 Честно говоря. [12+]**
**15.45, 18.30 Формула здоровья. [12+]**
**16.00 Х/ф "Любовь из прошлого". [16+]**
**17.45 Д/ф "Преодоление. Ильяс Валеев". [12+]**
**19.00 "Башкорт аты-2025". [12+]**
**20.15 Патриот РФ. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Концерт Минзифы Искужиной. [12+]**
**1.00 Х/ф "Отдам жену в хорошие руки". [16+]**
**2.30 Спектакль "Путем взаимной переписки". [12+]**
**4.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҪ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Сентябрь (Рәбиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 8 (16) дүшәмбе | 4:37 | 6:36 | 13:30 | 17:43 | 19:51 | 21:49 |
| 9 (17) шишәмбе | 4:40 | 6:38 | 13:30 | 17:41 | 19:48 | 21:45 |
| 10 (18) шаршамбы | 4:43 | 6:40 | 13:30 | 17:39 | 19:46 | 21:42 |
| 11 (19) кесе йома | 4:45 | 6:41 | 13:30 | 17:37 | 19:43 | 21:39 |
| 12 (20) йома | 4:48 | 6:43 | 13:30 | 17:35 | 19:40 | 21:35 |
| 13 (21) шәмбе | 4:51 | 6:45 | 13:30 | 17:33 | 19:38 | 21:32 |
| 14 (22) йәкшәмбе | 4:53 | 6:47 | 13:30 | 17:30 | 19:35 | 21:29 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

✓ *Хәбәр ителеүенсә, ҡайһы бер төбәктәрҙә поляр балҡыш булыуы ихтимал. Ҡояш астрономияһы лабораторияһы мәғлүмәтенә ярашлы, поляр балҡыштарҙың төп зонаһы Скандинавия илдәрендә һәм Канадала формалаша.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# "ҠУСТЫЛАРЫ АЛДАН ЙӨРӨЙ, АҒАЛАРЫ АРТТАН ЙӨРӨЙ"




**34-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Реприза. Дисциплина. Көрт. Тәриҡәт. Толпар. Әйтемсәк. Торт. Сиңерткә. Әлгәнйәк. Нотариус. Украина. Лунатик. Лүшә. Лимонад. Нәфсиәт. Төн. Түрә. Ибраһим. Троллейбус. Сәтләүек. Ваза. Галл. Комод. Ялҡын. Кенә. Косметика. Ярҙам. Арпа.

**Вертикаль буйынса:** Асыу. Аранжировка. Рельеф. Зар. Онега. Спарта. Ниәт. Диета. Этимология. Әрмән. Лектор. Рецидивист. Йылҡы. Нәммәт. Әстар. Реликт. Сәүек. Тула. Әтәс. Сәкән. Алтай. Лилипут. Арба. Үләт. Мотор. Мунса. Әрмәндә. Тәңкит. Өмәсе. Кәкүк. Дрон. Кеҫә.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**10 сентябрь "Йырланмаған йырым һин"** (В.Исхаҡов, А. Абушахманов), музыкаль милодрама. 16+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**5 сентябрь "Ханума"** (А. Цагарели, Р.Хәкимов), музыкаль комедия. 12+
**6 сентябрь "Цирк на поляне"** (М. Непряхин, О. Мусина), әкиәт. 0+
**7 сентябрь "Золушка"** (Г. Корнелиссон, М. Күлбаев), әкиәт. 0+
*Г. Константинов ис. Йошкар-Ола академия рус драма театры ҡуя:*
**9 сентябрь "Корсиканка"** (И. Губач, В. Константинов), героик комедия. 16+
**10 сентябрь "Вечера на хуторе близ Диканьки"** (Н. Гоголь, И. Немцев), комедия. 12+
**11 сентябрь "Коварство и любовь"** (Ф. Шиллер, В. Константинов), трагедия. 16+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**5 - 7 сентябрь "О чем поет осень?"** ( В. Щербакова). 0+
**7 сентябрь "Золушка"** (Ш. Перро). 15:00. 0+
**11 сентябрь 94-се театр миҙгелен асыу. "Золушка"** (Ш. Перро). 19:00. 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**6 сентябрь "Балыҡсы һәм балыҡ тураһында әкиәт"** (А.Пушкин, А. Ниғмәтуллина), әкиәт. 0+
**10 сентябрь "Минең өйөм"**, музыкаль-әҙәби композиция. 12+

## БР Милли музейы

**6 сентябрь** Тамбур сигеүе буйынса оҫталыҡ дәресе. 12:00. 6+
**8 сентябрь** Хәрби дан маршруттары буйлап экскурсия. 12:00. 12+
**9 сентябрь** Танкистар көнөнә ҡарата **"МХО геройҙары - танкистар"** экскурсияһы. 14:00. 12+

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!

# ТАШҠЫНДАН ДА...



**Республикала Әй йылғаһы ярҙарынан сығыуы ихтимал. Ғәҙәттән тыш хеҙмәттәр һыу баҫыу хәүефе янауы тураһында иҫкәртә.**

Башгидрометүҙәк мәғлүмәттәре буйынса, республиканың төньяғында һәм төньяҡ-көнсығышында көслө ямғырҙар яуыуына бәйле 5 сентябргә тиклем Әй йылғаһында һыу ташыуы көтөлә. Гидрологтар Ҡыйғы һәм Мәсетле райондары биләмәһендә һыу баҫыу ихтималлығы хаҡында иҫкәртә. "Ошо райондарҙың халҡын һәм ҡунаҡтарын Әй йылғаһы буйында йөрөгәндә иғтибарлы булырға саҡырабыҙ. Һыу баҫыу ҡурҡынысы янағанда шунда уҡ 112 номерына шылтыратығыҙ", - тип белдерҙеләр Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығында.

# ЮЛДАРҘА ЛА...



**Башҡортостанда өс кеше, шул иҫәптән бер бала трактор менән юл фажиғәһендә һәләк булған. Үлемесле авария Стәрлетамаҡ районында теркәлгән.**

Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, Төрөшлә - Николаевка автомобиль юлының 4-се километрында "Лада Гранта" автомобиле менән юлдан китеп барған арбалы трактор бәрелешкән. Аварияла еңел автомобиль водителе һәм пассажиры, шулай уҡ ата-әсәһе менән бергә тракторҙа китеп барған бала урында уҡ йән биргән.

Башҡортостан Прокуратураһының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәте буйынса, ваҡиға урынында Стәрлетамаҡ районы прокуроры Илшат Рәхмәтуллин эшләй.

Күҙәтеү ведомствоһы юл-транспорт ваҡиғаһы сәбәптәрен асыҡлауҙы контролдә тота, юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге тураһында ҡануниәттең үтәлешен тикшерә.

ҠЫҘЫҠ!

# ПОЛЯР БАЛҠЫШ ВАҠЫТЫНДА...

**Республикала йәшәүселәр планета дауылдарын тойоу мөмкин.** Хәбәр ителеүенсә, ҡайһы бер төбәктәрҙә поляр балҡыш булыуы ихтимал. Донъя станциялар селтәре мәғлүмәттәре буйынса, Ерҙә рәсми рәүештә планета кимәлендәге магнит дауылдары башлана. Алдағы сәғәттәрҙә геомагнит индексы арта башлауы мөмкин, сөнки ҡайһы бер станцияларҙан G2-G3 кимәлендәге дауылдар тураһында мәғлүмәттәр килә. Ҡояш астрономияһы лабораторияһы мәғлүмәтенә ярашлы, поляр балҡыштарҙың төп зонаһы Скандинавия илдәрендә һәм Канадала формалаша. Шулай уҡ Рәсәйҙең төньяҡ-көнбайышында күҙәтергә мөмкин.

# АЙ ТОТОЛА

**7 сентябрҙән 8-енә ҡарай төндә Башҡортостан халҡы һирәк осраған астрономик күренеште - быйыл икенсе һәм һуңғы тулыһынса ай тотолоуын күҙәтә ала.** Ай тотолоу 7 сентябрҙә Өфө ваҡыты буйынса киске 10-сы 26 минутта башлана, 8 сентябрҙә төнгө 1 тула 4 минутта тамамлана. "Про космос" сайты мәғлүмәттәре буйынса, сентябрҙәге ай тотолоу - 2025 йылда иңкенсеһе. Уны Ер халҡының дүрттән өс өлөшө - 6,2 миллиард самаһы кеше күҙәтә ала. Был күренештең үҙенсәлеге - перигейға яҡын тороуы. Ай тотолғандан һуң бер нисә көн үткәс, Ай Ерҙән минималь алыҫлыҡта була, шуға күрә ғәҙәттәгенән ҙурыраҡ һәм сағыуыраҡ булып күренә, ҡыҙғылт төҫкә инә. Киләһе "Ҡанлы Айҙы" 2026 йылдың мартына тиклем көтөргә тура килә: ул саҡта ай тотолоуҙы Европала, Азияла, Австралияла һәм ике Америкала йәшәүселәр күҙәтергә мөмкин.

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# ПАТРИОТИК ЙЫРҘАР ТЫҢЛАНДЫ

**Өфөнөң Совет майҙанында IV "Геройҙар ваҡыты" Бөтә Рәсәй асыҡ патриотик йыр конкурсының гала-концерты уҙҙы.**



Республика Башлығы Радий Хәбиров "Геройҙар ваҡыты" патриотик йыр конкурсында гран-при яулаған Лидия Трифонованы бүләкләне.

- Бөгөн Совет майҙанында халҡыбыҙҙың һәм илебеҙҙең иң яҡшы йырҙары яңғырай, - тип билдәләне республика етәксеһе.- Мин беҙҙә Армия мәҙәниәте көндәрен ойоштороуға тигән ҡарар ҡабул иткән Оборона министрлығына айырым рәхмәт һүҙҙәрен еткерәм. Был бик мөһим сара. Жюри рәйесе Ольга Борисовна Кормухинаға ҙур рәхмәт, ул инде дүртенсе йыл беҙҙең менән. Һоҡланғыс артист ҡына түгел, ә илебеҙҙең лайыҡлы граждан҃ы. Барыһыға ла тыныслыҡ, именлек һәм иртәгәһе көнгә ышаныс теләйем.

Әйткәндәй, быйыл конкурсҡа Рәсәйҙең 31 төбәгенән 232 ғариза килде. Бүләк фонды 1 миллион һум тәшкил итте.

# БАШҠОРТ КИНОҺЫ КӨНӨ ЛӘ БУЛҺЫН!

**Башҡортостан Дәүләт ҡурайсылар ансамбленең художество етәксеһе Азат Айытҡолов Мәҙәниәтте һәм сәнғәтте үҫтереү буйынса совет ултырышында республика етәкселегенә милли уйын ҡоралын һаҡлауға ярҙамы өсөн рәхмәт белдерҙе.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2024 йылда Башҡортостан Башлығы указы буйынса Дәүләт ҡурайсылар ансамбле ойошторолдо. Бынан тыш, республикабыҙҙа Ҡурай көнө булдырылды, ул йыл һайын 21 октябрҙә билдәләнә.

Совет ултырышында Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле директоры Нәзир Байегетов Башҡортостан Башлығына республиканың бейеү сәнғәтенә ярҙамы, атап әйткәндә, Милли бейеү көнө булдырылыуы өсөн рәхмәт әйтте. Ул шулай уҡ Башҡортостандың Хореографтар союзы ойошторолоуы тураһында һөйләне, төбәктә федераль эксперттар ҡатнашлығында халыҡ-ара бейеү конкурсы һәм конференция үткәреү пландары менән уртаҡлашты.

"Аҫҡар-фильм" компанияһы директоры, кинорежиссёр Айнур Аҫҡаров төбәктә Башҡорт киноһы көнөн булдырыу тәҡдиме менән сығыш яһаны. Республика етәксеһе был мәсьәләне ентекле өйрәнергә ҡушты. Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, бындай даталарҙың төп маҡсаты - республикала йәшәүселәр араһында башҡорт сәнғәтен популярлаштырыу.

# МИЛЛИ КЕЙЕМ КӨНӨНДӘ...

**12 сентябрҙә Башҡортостанда сағыу байрам - Милли кейем көнө билдәләнә. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ошо уңайҙан флешмоб иғлан итте.**

Ҡатнашыу өсөн милли кейемдә йәки уның элементтарын ҡулланып, үҙең йәшәгән төбәкте билдәләгән урында фотоға төшөргә, уны #НациональныйКостюм2025 йәки #МиллиКейем2025 хештегтары менән социаль селтәргә һалырға кәрәк. "Был сара, һис шикһеҙ, беҙгә рухи бергәмлек тойғоһо бирәсәк һәм көнделәрҙә халҡыбыҙҙың тарихына, мәҙәниәтенә ҡарата ғорурланыу тойғоһон тағы ла көсәйтеп ебәрәсәк. Ҡушылығыҙ, ситтә ҡалмағыҙ!" - тип флешмобта ҡатнашырға саҡыралар Башҡорт ҡоролтайында.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, республикабыҙҙа Милли кейем көнө 2020 йылдан башлап йылына ике тапҡыр - апрель һәм сентябрь айҙарында үткәрелә.

# НИНДӘЙ ЙЫР ЙЫРЛАРҒА?

**Мәғариф министрлығы мәктәптә өйрәнеү өсөн патриотик йырҙар исемлеген әҙерләгән. Исемлеккә "Музыка" дәресендә файҙаланырға тәҡдим ителгән йырҙар индерелгән. Документ Рәсәй төбәктәренә ебәрелгән.**

"Исемлеккә уҡыусыларға патриотик һәм рухи-әхлаҡи тәрбиә биреүгә йүнәлтелгән 37 йыр ингән. Мәктәптәр тәҡдим ителгән әҫәрҙәрҙе уҡытыу процесында ҡулланыу тураһында ҡарарҙы үҙаллы ҡабул итә", - тиелә Рәсәйҙең Мәғариф министрлығы белдереүендә. Музыка дәрестәрендә балалар "Красно солнышко" (П. Аедоницкий, И. Шаферан), "День Победы" һәм "Как прекрасен этот мир" (Д. Тухманов, В. Харитонов), "Моя Москва" (И. Дунаевский, М. Лисянский), "У подножья обелиска" (А. Киселев, К. Чибисов) кеүек йырҙарҙы иҫенә төшөрәсәк йәки яңынан ишетәсәк. Исемлеккә заманса әҫәрҙәр ҙә индерелгән. Улар араһында Ярослав Дроновтың (Shaman) "Моя Россия", Олег Газмановтың "Офицеры", "Бессмертный полк" һәм "Вперед, Россия", Сергей Трофимовтың "Родина", Денис Майдановтың "Россия" йырҙары бар.

Эксперт төркөмө составына Рәсәйҙең халыҡ артисы, дирижер Валерий Гергиев, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы, опера йырсыһы Илдар Абдразаҡов, Борис Щукин исемендәге театр институты ректоры, Рәсәйҙең халыҡ артисы Евгений Князев, Гнесиндар исемендәге Рәсәй музыка академияһы ректоры Александр Рыжкинский һәм башҡа мәҙәниәт эшмәкәрҙәре ингән.

# САЛАУАТ - ЕҢЕҮСЕ!

**Башҡорт дәүләт филармонияһы артисы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Салауат Мөхәмәтйәров "Алдын согун" ("Алтын уҡ") халыҡ-ара эстрада йыры конкурсында I дәрәжәләге премияға лайыҡ булды.**




Конкурс Ҡыҙыл ҡалаһында (Тыва Республикаһы) үтте. Тәүге тапҡыр ойошторолған конкурс Тываның атҡаҙанған артисы Аяс Данзырын иҫтәлегенә һәм Ватанды һаҡлаусылар йылына арналды. Йыр бәйгеһендә Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан һәм Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән (Тыва, Алтай, Бүрәтстан, Ҡалмыҡстан, Хакасия һәм Башҡортостан) 20 башҡарыусы ҡатнашты. Салауат Мөхәмәтйәров "Уралым" һәм "Авай" халыҡ йырҙарын башҡарҙы. "Тыва тамашасылары мине көслө алҡыштар менән ҡаршы алды. Уларҙың телендәге йырҙы башҡарғандан һуң зал мине сәхнәнән ебәрергә теләмәне, бына шулай була икән халыҡ һөйөүе", - тип тәьҫораттары менән уртаҡлашты Салауат Мөхәмәтйәров.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ӨНДӘШМӘҮ АЛТЫН, ТИП...

## алтын һүҙең йәшермә

Атаһыҙ бала алты кешегә хаслыҡ итер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Хәҡиҡәт хәҡиҡәткә ҡаршы килә алмай.

**(Джордано Бруно).**

Ир менән ҡатын затының никахтан ҡасыуы - уларҙы яҡшы яҡҡа үҙгәртә торған союзы түгел, ә уларҙы насар яҡҡа йүнәлтә торған союзды өҫтөн күреүе ул.

**(Шарль Луи Монтескье).**

Ҡарттарҙы әрләмәгеҙ: беҙҙең һәр беребеҙ ҡартлыҡҡа тиклем йәшәргә ынтыла бит.

**(Бион Борисфенит).**

Күктән алтын тәңкәләр яуыуы ла нәфселенең мәйелен ҡандырмаҫ. Нәфсе - ул сир һәм унан бер ниндәй ҙә шатлыҡ көтөү мөмкин түгел икәнен аңлаған кеше аҡыл эйәһе булыр.

**(Будда).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Боронғо Һиндостанда тәбиғәт күренештәре менән бәйле бик күп тылсымлы йолалар атҡарыла торған булған. Мәҫәлән, дин әһелдәре ямғыр яуҙырыу тураһында доға ҡылып, йола башҡарылыу менән ямғыр яуа торған булған. Доғаларҙың тәьҫирлелеген дә, уларҙы үтәү тәртибен дә яҡшы белгән бер кеше бергән-бер көндө байлыҡ һорап, байлыҡ аллаһы Лакшмиға төбәп, доғалар ҡыла башлаған. Ун йыл дауам иткән уның был доғалары. Әммә ошо тиклем ваҡыттан һуң ул ысынында бай кешенең хәле нисек буласағын аңлау дәрәжәһенә еткән һәм төпкөл бер ауылға китеп, ер һөрөп, иген үҫтереп, ысын хеҙмәт кешеһенә әйләнеп көн итә башлаған.**

**Бер саҡ эштән арыныл, доға уҡып ултырһа, алдына иҫ киткес һылыу ҡатын килеп баҫҡанын күргән.**

**- Һин кем һәм бында ни эшләйһең? - тип һораған кеше был ҡатындан.**

**- Мин байлыҡ аллаһы Лакшми, һин ун йыл буйы миңә доғаларыңды ебәргәйнең, бына хәҙер килдем һәм һине бай кешегә әйләндермәксемен, - тигән ҡатын.**

**- О, хәҙерле Лакшми, - тип ҡыҫҡырып ебәргән кеше, - доға уҡып, һиңә үтенестәремде ебәргән йылдарҙа мин бай кешеләрҙең яҙмышы әллә ни матур булмағанын, тир түгеп табылған ризыҡтың татлыраҡ икәнен белергә өлгөрҙөм. Шунан инде байлыҡҡа булған ҡыҙыҡһыныуым юҡҡа сыҡты. Һин һуңланың. Тик әйт әле, ни өсөн һин элегерәк килмәнең һуң?**

**- Тураһын әйтәм, - тигән Лакшми. - Һин, әлбиттә, изге кеше, доғаларыңды һәм йолаларҙы ла теүәл башҡарҙың, байлыҡҡа ла лайыҡһың. Шуға ла мин һине яраттым һәм һиңә изгелек теләгәндән һиңә килергә ашыҡманым..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33.
(453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 04.09.2025 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 04.09.2025 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 05.09.2025 й.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2707
Заказ - 1667



«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.